*Аҡыл - бынамын тигән ҡорал. Ул тормошобоҙҙо планлаштырырға, төрлө идеяларҙы барларға һәм үткәндәге хаталарҙы анализларға ярҙам итә. Аҡыл беҙгә белем алырға һәм тормош биргән һабаҡтарҙан файҙалы һығымталар яһарға булышлыҡ итә. Әммә уға тормошта төп ролде лә бирергә ярамай. Аҡыл һәм йөрәкте бер-береһе менән яраштырырға өйрәнергә кәрәк. Дөрөҫөрәге, йөрәк алда барһын, әйҙә.*

**Робин ШАРМА.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27 ФЕВРАЛЬ - 5 МАРТ (ШАҠАЙ - БУРАНАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№9 (375)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Минең милициям...**

ҡасан тәртип һәм закон талап иткәнсә эшләй башлар?



2

**Шаяр, көл, уйна...**

башҡорт "Шаяниум"ында



4

**Ереүселәрҙең...**

балалары ла ереүсе була



5

**Шайтан хәйләләре**

Күренмәгән дошмандарҙан абай бул



13

14 **ТВ-программа**


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡорттарҙың борон-борондан, Уралға һыйынып, Уралға ерегеп йәшәүе хаҡындағы фекергә нисек ҡарайһығыҙ?

**Ғәлим ХИСАМОВ, яҙыусы:**

-Беҙҙең халыҡ Уралда барлыҡҡа килгән. Беренсенән, миҫалға "Урал батыр" эпосындағы ер-һыу атамаларын ғына алайыҡ. Ғөмүмән, ер-һыу атамаларын ситтән күсереп булмай. Әгәр ҙә башҡорт милләте ҡайҙалыр башҡа ерҙә формалашып, һуңынан Уралға килгән булһа, икенсе урында беҙҙең ер-һыу атамаларының параллелдәре табылыр ине. Икенсенән, шумерҙарҙың "Ғилғәмеш" эпосын "Урал батыр" менән параллель ҡуйып өйрәнеүсе ғалим Салауат Ғәлләмов уларҙың тамырҙары бер үк булыуын иҫбат итә. "Ғилғәмеш"тә: "Беҙҙең тыуған еребеҙ көньяҡта, 10 ай ҡыш, 2 ай йәй булған яҡта", - тип, тап Урал төбәге хаҡында әйтелә. Өсөнсөнән, "Урал батыр" эпосындағы Аҡбуҙат, Һомай, Самрау персонаждары башҡа башҡорт эпостарында ла бар. Улар башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында ла нығынған. Тимәк, әгәр ҙә башҡорттар ҡайҙандыр башҡа яҡтан килгән булһа, "Урал батыр" эпосына оҡшаған әҫәрҙәр донъяның башҡа халыҡтарында ла осрар ине.

**Йәлил СӨЛӘЙМӘНОВ, рәссам:**

-Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр ностратик дәүерҙә, йәғни кешелектең әле ҡәбиләләргә, халыҡтарға бүленмәгән осоронда төшөрөлгән. Шулай булғас, уларҙа беҙҙең ерлекте табыуы ҡыйын. Әммә "Урал батыр" эпосындағы тәүтормош дәүерендәге ваҡиғалар, ундағы исем-атамалар беҙҙең ерлекте һүрәтләй. Ундағы Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең ерҙең тәүкешеләре - Әҙәм менән Һауа икәнлеге һәр аңлы кешегә аңлашыла. Ошолар ғына ла башҡорт халҡының Урал тауҙары ерлегендә яралыуы, аҙаҡтан халыҡ, милләт булып ойошоуы хаҡында һөйләй. Дөрөҫ, һуңынан төрлө дәүерҙәрҙә ерҙең төрлө тарафтарынан айырым ырыу-ҡәбиләләр Уралға килгән, әммә уларҙы ҡабул итеүсе халыҡтың ядроһы барыбер ҙә ошонда барлыҡҡа килгән. Был - бәхәсһеҙ. Мин, мәҫәлән, рәссам буларaҡ, ниндәйҙер ырыуҙың, ҡәбиләнең бүрегә эйәреп Уралтауға килә ятҡанын төшөрә алам, яҙыусы ошо ваҡиғаны һүрәтләй ала, тик тарихсы өсөн был хәл факт була алмай. Был хәл факт ҡына түгел, хатта тарихи фараз да була алмай. Шуға күрә лә башҡорттарҙың Уралтауға ҡайҙандыр күсеп килеүе хаҡындағы уйҙырмаға сик ҡуйырға ваҡыт. Минеңсә, быны беҙҙең ерҙәргә хужа булырға теләүселәр уйлап сығарған.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

МОНОЛОГ

# ҺӨЛДӘЛӘРҘЕҢ ТЕЛЕ БУЛМАҺА ЛА...

## тарихҡа тел аҫҡысы улар

**Тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел, әҙәбиәт институтының этнология бүлеге мөдире, танылған антрополог Ринат Мөхәмәт улы Йосопов беҙҙең гәзиттә сығыш яһағаны, әңгәмәләрҙә ҡатнашҡаны бар. Ул яһаған фәнни асыштарға бәйле әңгәмәләрҙә килтерелгән дәлилдәр, идеялар бик ҡыҙыҡлы, боронғоно яңыртыу булыуы менән айырылып тора һәм, әлбиттә, былар барыһы ла ғалимдың үҙ ғүмерен бағышлаған фән өлкәһенә - антропологияға бәйле. "Баш һөйәгенең теле һаҡланмай...", тип әйткәйне бер мәл уның менән ҡыҙыҡлы бәхәс ҡорған үҙенсәлекле ҡарашлы тарихсыбыҙ, билдәле яҙыусыбыҙ Йыһат Солтанов ("Ҡайһы милләт боронғораҡ, уртаҡ дингә йәбешкәнеме, эпосы булғанымы?" 2005 йыл, 21-се һан). Эйе, был фекерҙәр менән килешәбеҙ, ысынлап та, меңәр йылдар буйы ер аҫтында, таш ҡыуыштарында ятыусы баш һөйәктәренең, әҙәм һөлдәләренең теле булмай. Әммә уларҙың формаһына, төҙөлөшөнә ниндәй типҡа, расаға ҡарағаны яҙыла, йәғни оло фән донъяһына тел аҫҡысы булырҙай үҙенсәлеге, кәлебе һаҡлана. Баш һөйәктәренең, әҙәм һөлдәләренең ана шундай үҙенсәлекле тел аҫҡысын таба белеүсе ғалимыбыҙ ул Ринат Мөхәмәт улы. Был юлы ла ғалим үҙенең антропологияға һәм археологияға бәйле асыштары һәм башҡа тарихи күренештәр хаҡында һүҙ алып бара. Уларҙа башҡорт тарихына ҡарата өрйаңыса ҡараш та төҫмөрләнә. Ҡыҫҡаһы, һүҙ - Ринат Мөхәмәт улы Йосоповҡа.**




(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).

✓ ***Рәсәй Президенты реформа тураһында иғлан итеүенең икенсе көнөнә үк 17 милиция генералын юғары вазифаһынан бушатты, улар араһында ике министр урынбаҫары ла бар.***



*ИҒТИБАР!*

## ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Белеүегеҙсә, гәзит-журналдарға яҙылыу хәҙер, элекке кеүек, тотош йылға түгел, ә ярты йыллап ҡына башҡарыла. Ләкин икенсе ярты йыллыҡ тураһында ла алдан хәстәрләү ғәҙәткә инеп бара. Бына әле лә Федераль почта хеҙмәте 2010 йылдың икенсе ярты йыллығына ваҡытынан алда, тәүге ярты йыллыҡ хаҡтары менән гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итте. "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына һеҙ март аҙағына тиклем 306 һум 84 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары 282 һум 78 тингә яҙыла алаһығыҙ, апрелдән хаҡтар бер аҙ күтәреләсәк.**

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфөматбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, унда бер йылға ла яҙылып була.
- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзанораҡ: ярты йылға - 225 һум.
- Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк. Тик һәр коллектив кәмендә 15-20 дана гәзит алдырырға тейеш, ул саҡта баҫмабыҙ ярты йылға 186 һум 60 тингә генә төшәсәк.

**Өфөлөләргә әйтер тағы бер һүҙ…**

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъезыбыҙҙа почта йәшниге юҡ", - тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡалала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыҡты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" - тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, ғәзиз милләттәштәр!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# МИНЕҢ МИЛИЦИЯМ...

## ҡасан тәртип һәм закон талап иткәнсә эшләй башлар?



**Ҡасандыр Владимир Маяковский: "Һаҡлай мине минең милициям", - тип яҙһа, Сергей Михалковтың милиционер Степа ағайы бәләкәй генә балалар өсөн дә өлгө итеп ҡуйылды. Шуға өҫтәп, Владимир Высоцкийҙың Жегловын һәм Владимир Конкиндың Шараповын да иҫкә алһаҡ, милицияла хеҙмәт итеүселәрҙең хөрмәт һәм оло данға лайыҡ кешеләр булыуына ышанырға була.**

Бөгөнгө Рәсәйҙә сәйәси хәлдәр ҙә икенсерәк, милицияға ла ҡараштар бер төрлө түгел. Ҡырағай капиталистик мөнәсәбәттәр формалашҡан осорҙоң юҡҡа ғына "бөйөк криминаль революция"ға тиңләнмәүенә үҙебеҙ шаһит булдыҡ. Эске эштәр министрлығының төрлө кимәлдәге структураларында һәм подразделениеларында үҙен-үҙе аямай эшләүсе хеҙмәткәрҙәр булмаһа, бөгөн граждандар хәүефһеҙлеге хаҡында тыныс тонда һүҙ алып барыу мөмкин булмаҫ ине. Әммә дәүләт органы булараҡ, бөгөнгө милиция хәҙерге системаға хас булған кире сифаттарҙан арына алманы. Иң хәүефлеһе - тимерҙе коррозия селтәрләгән кеүек, дәүләт системаһын ашап алып барған коррупцияға ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә тейеш булып та, ул үҙе коррупционерҙар "ҡыйығы"на әйләнеп бара. Ваҡыты-ваҡыты менән юғары вазифа биләгән "погонлы әүермән"дәрҙе фашлап торһалар ҙа, ошондай "хирургик саралар" әллә ни һөҙөмтә бирмәне.

Рәсәй Президенты Дмитрий Медведевты милицияның бөгөнгө торошо һис ҡәнәғәтләндермәй, тип әйтергә була. ЭЭМ-ның йыллыҡ киңәйтелгән коллегияһында Рәсәй милицияһында яҡын арала ниндәй үҙгәрештәр буласағы хаҡында сығыш яһап, Дмитрий Медведев дәүләт өсөн үтә мөһим булған был өлкәлә реформаларҙың кисектергеһеҙ булыуын белдерҙе. ЭЭМ реформаһын эҙмә-эҙлекле рәүештә ғәмәлгә ашырыу маҡсатында ул махсус указға ҡул ҡуйҙы, Дәүләт Думаһына бер нисә закон проекты индерҙе.

Һуңғы йылдарҙа милиция хеҙмәткәрҙәренең дөйөм һаны арта барһа ла, енәйәтселеккә ҡаршы көрәштә киҫкен һынылыш булманы. Ошо өлкәләге статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Рәсәйҙә әлегә тиклем 1,3 миллион енәйәт асылмаған, 2 меңдән ашыу кеше үлтереүсе иректә йөрөй, 760 мең урлашыу һәм 124 мең талау осраҡтары буйынса ғәйеплеләр табылмаған. "Ошо һандар үҙҙәре үк ҡурҡыныс. Ә улар артында аныҡ кешеләрҙең - зыян күреүселәрҙең, уларҙың туғандарының яҙмыштары. Статистиканы яҡшыртып күрһәтергә, алмаштырырға теләүгә юл ҡуйырға ярамай. Енәйәтселек менән көрәш саралары уның күләменә ярашлы булырға тейеш", - тип белдерҙе Президент.

Милиция реформаһы үҙәккә буйһоноусы подразделениелар штатының 10 мең кешегә ҡыҫҡартылыуынан башланып, ике йыл эсендә ЭЭМ хеҙмәткәрҙәренең 20 процентҡа тиклем кәметелеүе көтөлә. Әлегәсә милиция өсөн "төшөм сығанағы" булып торған автомобилдәргә техник тикшереү уҙғарыу, медицина айнытҡыстарын контролдә тотоу, законһыҙ рәүештә йәшәүсе сит ил граждандарын һәм гражданлығы булмағандарҙы илдән сығарыу хоҡуғы башҡа ведомстволар ҡарамағына биреләсәк.

ЭЭМ системаһында "генерал" вазифаларын биләүсе етәкселәргә ротация уҙғарыла башлауы ошо реформаның мөһимлегенә һәм кисектергеһеҙлегенә ишара. Рәсәй Президенты реформа тураһында иғлан итеүенең икенсе көнөнә үк 17 милиция генералын юғары вазифаһынан бушатты, улар араһында ике министр урынбаҫары, айырым төбәктәрҙең һәм ҡалаларҙың эске эштәр идаралыҡтары начальниктары бар. "Генерал вазифалары башлыса федераль резервтан комплектланасаҡ, ә ошо вазифаларға һайлау һәм тәҡдим итеү законды һәм граждандарыбыҙ хоҡуҡтарын намыҫ менән яҡларға әҙер булыусы өмөтлө милиция офицерҙары араһынан башҡарыласаҡ", - тине ил башлығы.

Реформа барышында милиция хеҙмәткәрҙәренең шәхси яуаплылығын арттырыу ҙа күҙ уңында тотола. Рәсәй Президенты фекеренсә, хоҡуҡ һаҡлау органдарында эшләгән көйө енәйәт ҡылыу бындай хеҙмәткәрҙең енәйәти яуаплылығын ауырайтыусы шарт булып иҫәпләнергә тейеш. Президент ЭЭМ башлығы Рәшит Нурғәлиевҡа 1 ай эсендә үҙ ҡулы аҫтындағы ведомствоның эшен камиллаштырыу буйынса ентекле план төҙөү бурысын йөкмәтте. Шулай уҡ 2010 йылдың 1 декабренә Дәүләт Думаһына индереү өсөн "Милиция тураһында"ғы Федераль закон әҙер булырға тейеш. Киләсәктә ЭЭМ органдарында хеҙмәт итеү ваҡыты 5 йылға оҙайтылып, хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡын арттырыу мәсьәләһе лә ҡараласаҡ. Иғлан ителгән реформа Рәсәй милицияһының енәйәтселеккә ҡаршы тороу һәм йәмәғәт хәүефһеҙлеген тәьмин итеү мөмкинлектәрен арттырыуға йүнәлтелгән. Дмитрий Медведев ошо реформаны үҙенең шәхси контроле аҫтында тотасағы хаҡында ла белдерҙе. Ил Президентының ошо һүҙҙәре граждандар өсөн бик ҡәҙерле. Эйе, закон талап иткәнсә йәшәүсе ватандаштарыбыҙҙың киләсәктә Маяковский кеүек: "Минең милициям!" - тип, ғорурланып әйтә аласағына ышанғы килә.

**Вәли ИҘРИСОВ.**



Күмертау ҡалаһының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттарына сираттағы Мөрәжәғәтнамә менән сыҡты. Ул "Башҡортостанды артабан модернизациялау: XXI быуатта именлеккә һәм сәскә атыуға илтеүсе юл (Республикалағы хәл һәм 2010 йылда уны үҫтереүҙең төп йүнәлештәре тураһында) тип атала.

✓ Әлеге ваҡытта республиканың юғары уҡыу йорттарында 2472 аспирант уҡый, шуларҙың 87 проценты - 30 йәшкә тиклемгеләр. 2006 йылда йәш ғалимдар өсөн Президент гранты булдырылғайны. Әлегә тиклем ул 59 йәш ғалимға һәм 31 ғилми коллективҡа бирелде. Күптән түгел БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Президент грантын сираттағы 48 йәш ғалимға тапшырҙы.

✓ Башҡортостан Көньяҡ Корея менән иҡтисад өлкәһендә тығыҙ хеҙмәттәшлек итә. Яңыраҡ БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев етәкселегендәге республика делегацияһы унда был илдең етәксе партияһы һәм Милли йыйылышы саҡырыуы буйынса, шулай уҡ ике яҡлы парламент-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләү өсөн биш көнлөк сәфәрҙә булды.

✓ Рәсәйҙә тыуым 2,9 процентҡа артҡан, үлем осрағы 3 процентҡа кәмегән, тәбиғи кәмеү 31,1 процентҡа ҡыҫҡарған, балалар үлеме 3,5 процентҡа кәмегән. Тәбиғи артыу Рәсәйҙең 35 төбәгендә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла күҙәтелә. 2008 йылда бындай төбәктәр 21 булған. Былтыр Башҡортостанда 55720 бала тыуған. Был 2008 йылға ҡарағанда 1227 балаға күберәк. Үлем 3,6 процентҡа кәмегән. Балалар үлеме 2008 йыл кимәленән 25,5 процентҡа кәмерәк тәшкил иткән.

✓ Федераль законға ярашлы, 14 йәшкә тиклемге балаһы булған енәйәт ҡылыусы ирҙәргә хөкөм язаһы кисектерелеүе мөмкин. Элек бындай кисектереү ауырлы һәм 14 йәшкә тиклемге балаһы булған ҡатын- ҡыҙҙарға ғына ҡағыла ине. Ләкин закондың шундай шарты ла бар: хөкөм ителгән атай бала өсөн берҙән-бер яҡын кеше, ә Енәйәт кодексының уға ҡарата ҡулланылған статьяһында ирекtән мәхрүм итеү биш йылдан да артмаған булырға тейеш.

✓ ***Башҡорттар тыныс халыҡ ул. Өндәшмәйҙәр. Улар һиңә французлар түгел. Ваҡытында французлдарҙы тапап йөрөһәлар ҙә, бөгөн, ана, бер генералыбыҙ уларҙы ҡыҫыпмы ҡыҫа. Боҙоҡлоҡҡа әүәҫ. Әле майор ғына.***



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ӘГӘР ПРЕМЬЕР БУЛҺАМ...

## Йәки үткән аҙналағы ҡайһы бер ваҡиғалар буйынса сәйәси әкиәт

**24 февраль көндә Саян-Шуша гидроэлектростанцияһы биләмәләрендә электроэнергетикаға инвестициялар программаһы үтәлеше буйынса ултырыш булып үтте. Рәсәй Федерацияһы Премьер-министры Владимир Владимирович Путин үҙ сығышында дүрт эре эшҡыуарҙың эшмәкәрлеген айырым телгә алды. Түбәндә был юлдарҙың авторы үҙен Премьер-министр урынына ҡуйып ҡарап, олигархтар менән нисегерәк итеп һөйләшеүен күҙ алдына баҫтырырға маташа. Текст тулыһынса авторҙың уйҙырмаһы ғына. Автор, телгә алған исем-фамилиялар һәм һүрәтләнгән ваҡиғалар ысынбарлыҡҡа бөтөнләй тап килмәй, тип раҫлай.**

- Прохоров! Потанин! Вексельберг! Лебедев!

- Мин! Мин! Мин! Мин!

- Бер-икегә иҫәпләшергә!

- Бер-ике! Бер-ике!

- Юҡ! Улай түгел! Дәүләттән алып туҙҙырған аҡсағыҙҙы иҫәпләгеҙ, тим...

- (Үҙ алдына ғына). Өндәшмәйҙәр, суҡынмыштар. Өндәшмәйҙә-ә-әр. Шым ғына торалар. Баштарын баҫҡандар. Йәнәһе, күҙҙәрен йәшерәләр. Яуырындары төшкән. Оялалар, имеш. Кемдән оялалар икән? Минәнме? (Ҡысҡырып ебәрә). Минән нишләп оялырға? Мин һеҙгә кем? Әпсәгеҙ алдында оят булырға тейеш! Бала саҡта ыштанығыҙға "бес" итеп ыҙалатҡанығыҙ өсөн! Йәки, эшкинмәһәгеҙ, һөйәркәләрегеҙ алдында... Минән ҡурҡырға кәрәк! Юғиһә... (Тешен шығырлатып, йоҙроҡ төйә). Бәҙрәфкә тығып һыулап алырмын үҙегеҙҙе. (Үҙ алдына ғына). Быныһы икенсе операнан булды, шикелле. Ҡара әле, берәүһе хатта күҙҙәрен сытырҙатып йомдо. Мин һуғып ебәрер, тип уйлай микән? (Шым ғына. Әммә ҡурҡыныс итеп). Бахыр! Мин һуҡһам, саңығыҙ ҙа ҡалмаясаҡ бит. Хәйер... Саңығыҙ ғына ҡаласаҡ. Магаданда, Норильскиҙа, Комиҙа ундай саң күп. Ел иҫһә, элекке лагерҙар урынында саң бураны күтәрелә, тиҙәр бит. Лагерь саңы.

Йә, ярай, быларҙы нишләтергә? Нишләтәйем һеҙҙе? (Саф буйлап тегеләй-былай йөрөштөргөләй). Тәүгегә ярлыҡайыммы? Кем әйтте быны? Ниңә ауыҙ аҫтынан мығырлап тик тораһығыҙ. Тәүге тапҡыр ғына тотолмайһығыҙ бит инде. Тотолоп тораһығыҙ, ҡотолоп тораһығыҙ. Беҙҙән башҡа был эшкә берәү ҙә эшкинмәй, тимәксеһегеҙме? Эйе, аҡса туҙҙыра беләһегеҙ. Аллаға шөкөр. Өйрәнеп алдығыҙ. Кемегеҙ бында 2004 йылда Фаберже күкәйе менән булашты әле, ә? Витька, һинме? 100 миллион долларға 9 күкәйҙе һин һатып алдың түгелме һуң? Рәсәйгә Фаберже йомортҡаларын ҡайтарҙым, тиһең инде, ә? Дәүләтебеҙгә тарихи ҡомартҡыларын бүләк иттем, тимәксеһеңме? Йылғырһың инде былай. Шилма! (Йылмая). Башҡорттар, ана, күршеләре ултырған ерҙе ҡырып йыуалар, имеш. Күршеләре һеҙ булһағыҙ, ултырған, торған, ятҡан, ғөмүмән, йәшәгән урындарығыҙҙы ни эшләтерҙәр ине икән улар? Һеҙ тыуғанда, башҡорттарҙың күршеләре илап ебәргән, ти хатта. Ысынмы шул? Белмәйһеңме? Ә нимә беләһең? Аҡсаны ҡайҙа итергә? Уныһын мин дә беләм. Йә, ярар, йәшә әлегә. (Яйлап ҡына, ижекләп.) Вексель-берг.

Аҡса тигәндәй, ул хәтлемде ҡайҙа иттегеҙ әле һеҙ? Шул хаҡта һәр берегеҙ яуап бирергә әҙерләнегеҙ. Берҙәм энергосистеманы реформалауға 450 миллиард һум йәлеп иттек. 270 миллиарды инвестиция программаларын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелде, тинегеҙ. Ышандым. Әлегә ышандым. Сөнки ҡайһы берҙәрегеҙҙең пландары ла юҡ. Ә 66 миллиарды ҡайҙа? Күҙ ҙә йоммай алдығыҙ. Ҡайҙа иттегеҙ? Туҙҙырҙығыҙмы? Уныһы аңлашыла. Ә ҡайҙа туҙҙырҙығыҙ? Макдоналдсҡа барып гамбургер алдығыҙмы? Кока-мока эстегеҙме? Асһығыҙмы? Юҡ, тыштан ҡарағанда, туҡ һымаҡ күренәһегеҙ. Кәүҙәләрегеҙ йоморо. Күҙҙәрегеҙҙе генә күрмәйем. Ҡана, ҡара әле миңә. (Кемгәлер берәүгә яҡынлашып, башын эйәгенән күтәреп күҙҙәренә ҡарай). Күҙҙәрегеҙ ас. Ас бүре кеүек ҡарап тораһығыҙ. Һеҙгә аҡса бирергә яраймы һуң? Һеҙ бит аҡсалы ҡулды өҙөп алып ҡуша йоторға әҙерһегеҙ. (Уйлана.Үҙ алдына). Ә кемгә бирергә һуң? Былар, исмаһам, әҙерәк туйған кеүек күренә. Фатирҙары ла бар, йорттары ла. Беҙҙә лә, ситтә лә. Балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен, ғөмүмән, ете быуынды тулыһынса тәьмин иткәндәрҙер, моғайын. Машина-фәләндәрен, самолет-вертолеттарын, яхта-махталарын иҫәпләп-һанап бөтөрөрлөк тә түгел. Утрауҙары ла барҙыр әле. (Ҡаршыһында сафта торғандарға өндәшә). Ишетмәйем, утрауҙарығыҙ бармы? Юҡмы ни? Шуға ла эшкинмәйһегеҙ. Илебеҙгә күкәй ташығансы, Тымыҡ океандағы йәки ана япондарҙың бер нисә утрауын һатып алып, Рәсәйгә ҡушһағыҙсы. Юғиһә, беҙҙең ерҙәргә ҡаныҡып маташалар.

(Туҡтап ҡала. Арлы-бирле йөрөгөләй. Ҡапыл ғына көйөк еҫе сыға. Әсенеп.) Бала-саға һымаҡһығыҙ. Һеҙ бит былай ҙа әҙ генә. Халыҡ башына әллә өс процент, әллә ике. Олигархтарҙы әйтәм. Дәүләтте, ә иң мөһиме, дәүләт аҡсаһын, башҡа кемгә ышанырға мөмкин һуң? Ултыртып та ҡарайбыҙ. Барыбер аңламайһығыҙ. Майлап та, яйлап та ҡарайбыҙ. Шашаһығыҙ. Миша, аҡсаны муллап тотонаһың, кабинеттар буйлап услап аҡса тотоп йөрөгәнһең. Миңә лә инеп сыҡтың. Толҡа тапмай йөрөйһөң инде. Куршевелде онота алмайһыңмы? Аңлайым, йәшһең, ҡыҙҙар һаман ҡаныңды уйната. Һуң бит үҙебеҙҙең Куршевелдәр бар ҙа баһа! Абҙаҡҡа барғаның бармы? Юҡмы ни? Куршевелең ары торһон. Унда ла ҡар күп. Унда ла саңғы шыуалар. Алып бар шунда ҡыҙҙарыңды, әйҙә, рәхәтлән. Башҡорттар тыныс халыҡ ул. Өндәшмәйҙәр. Улар һиңә французлар түгел. Ваҡытында французлдарҙы тапап йөрөһәлар ҙә, бөгөн, ана, бер генералыбыҙ уларҙы ҡыҫыпмы ҡыҫа. Башы шәп эшләй үҙенең. Боҙоҡлоҡҡа әүәҫ. Әле майор ғына. Булмаған, уйламаған ерҙән экстремистарҙы таба. Һеҙ шулайтып булмаған ерҙән аҡса таба алаһығыҙмы? Шулай шул! Теге юлы миңә хәбәр итә - килмә бында, Владимир Владимирович, бында аҙым һайын экстремист, ти. Йөҙөнә борсолоу сыҡҡан. Берәй нәмә эшләп ҡуйһалар, тип, мине ҡурсалай, имеш. Мин башҡорттарҙы белмәйемме? Мин ул генералды яҡшы беләм. Лейтенант булырға ынтыла. Ҡыҫымаған урынды оҙағыраҡ тырнап ятһа, бер урынын тырнармын ҡутаранан. (Шымып ҡала. Үҙ уйҙарына батты, ахыры).

(Ҡапыл ниндәйҙер фекергә килгән кеүек күренә.) Ҡара әле, олигархтар, һеҙгә лә берәй генералды беркетеп ҡуймай булмаҫ. Прохоров, армияла хеҙмәт иттеңме һин? Юҡмы ни? Шуға ла генералдар тураһында белмәйһең инде. Улар булмағанды бар итергә әүәҫ ул.

Володя, һиңә лә һүҙем бар. Һин бит аҙаш. Хатта фамилияң да минекенә оҡшаған. Һинекенең хәрефтәре генә күберәк. Пота-нин. Почти минеке. Володя, һиңә ОГК-3-тө (ОГК - күмәртәләп һатыусы генерация компанияһы, йәғни, энергияны күпләп һатыусы фирма була) биреп ҡуйҙыҡ. Ә һин ни эшләнең? Өҫтәмә эмиссия үткәреп, ошо компанияны һатып алыуға түккән аҡсаны тулайым кире ҡайтарҙың. Һәм вәссәләм. Оят түгелме һиңә? Нишләтергә инде һеҙҙе? Прокурорҙы һөсләтәйемме? Бөтәгеҙҙе лә Ходорковский быҙау ҡыумаған ергә оҙатып бөтһәм, илебеҙҙә байҙар ҡалмай ҙа баһа. Кем менән ғорурланырға ул саҡта беҙгә? Спортсыларыбыҙ эшкинмәй. Хоккейсыларыбыҙ шайбаны күрмәй. Ванкуверҙа ғүмерҙә булмағанса отолдоҡ. Оят та баһа! Оят... О-я-т!

**Ошо урында авторҙың фантазияһы эҫе көндәге күләүек кеүек ҡороно ла ҡуйҙы. Өҫтә әйтеп үтелгән олигархтар менән артабан ни булған икән, тип уйлайһығыҙмы? Күҙәтәйек. Көтәйек. Ил башлыҡтарыбыҙҙың фантазияһы авторҙыҡына ҡарағанда күпкә байыраҡ һәм тәрәнерәк.**

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ӘРУАХТАР ДОҒА ҺОРАЙ...

...башҡорт халыҡ йыры "Тәфтиләү"ҙе тыныс ҡына тыңлап булмай. Был йыр башҡорт халҡы тарихында ҡанлы эҙҙәрен ҡалдырған яһил, йәлләд, Ырымбур экспедицияһы етәксеһе урынбаҫары Ҡотло-Мөхәммәт Тәвкилевкә (суҡындырылғандан һуң Алексей Иванович) ҡарғыш йыры булараҡ сығарылған. Уның әмере буйынса 1736 йылдың 24 ғинуарында Башҡортостандың Себер даруғаһы Балыҡсы олоҫона ҡараған (хәҙерге Аҫҡын районы) Һөйәнтөҙ тигән башҡорт ауылы юҡ ителә. 1000 кешене драгундар ҡылыстан үткәрә, ҡалған 105 кешене амбарға ябып яндырып үлтерәләр. Башҡорттарға ҡаныҡҡан Тевкелев быны менән генә туҡталып ҡалмай: артабан Балыҡсы, Унлар, Ҡыр-Танып олосондағы 51 ауылды көл- күмергә ҡалдырып, кешеләрен үлтерә.

Урындағы халыҡ Һөйәнтөҙ ауылын Һөйәнтүш тип атап йөрөтә. Ауылдың ултырған урыны Һөйән йылғаһының Ҡариҙелгә ҡойған еренә - түшенә урынлашҡанға күрә шулай атағандар ауылды. Һөйән йылғаһының оҙонлоғо бер саҡрымға ла етмәй, башланып та өлгөрмәй, Ҡариҙелгә килеп тә ҡушыла. Йылға башында күл дә бар. Ҡыҫҡаһы, Һөйәнтөҙ ауылы ошо йылғаның яҙмышын ҡабатлаған кеүек.

Беҙҙеңсә, 24 ғинуарҙы Һөйәнтөҙ фажиғәһе, унда һәләк булыусыларҙы иҫкә алыу, йәғни Матәм көнө итеп республика кимәлендә үткәреүҙе рәсмиләштереп ҡуйыу күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Шул уҡ көндә 1739 йылдың 14 мартында икенсе бер йәлләд Саймонов тарафынан яндырып үлтерелгән башҡорт ҡатыны Киҫәкбикәне (Кесебикә) лә, ғөмүмән, башҡорт ихтилалдарында һәләк булыусыларҙы иҫкә алыусылар көнө итеп билдәләү зарурлығы көн кеүек асыҡ бында. Тәүге башҡорт ихтилалынан алып 1917 йылғы күтәрелешкә тиклем миллионлап башҡорт ҡорбан булған. Уларҙың әруахтары беҙҙән доға һорай...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Дүртөйлә ҡалаһында хәләл ризыҡ етештереү индустрияһы үҫеш алды. 6 мартта бында БР мосолмандары диниә назараты эргәһендәге "Хәләл" стандарты буйынса комитет күсмә ултырыш үткәрә. Ултырыш сиктәрендә республика етештереүселәренең хәләл ризыҡтар күргәҙмәһе лә ойошторолаcаҡ.

✓ Мартта Башҡортостанда сусҡа киҙеү көсәйеүе ихтимал. Ҡыштан һуң хәлһеҙләнгән организм был осорҙа сиргә тиҙерәк бирешә, етмәһә, ҡояш нурҙары төшә башлау менән, күптәр еңелсә кейенә башлай. Былар барыһы ла киҙеүҙең көсәйеүенә килтереүе мөмкин. Шуға ла ҡала дауаханаларында киҙеүҙән бушлай прививкалар яһай башлағандар ҙа инде. Үткән аҙнала республикала киҙеү һәм ОРВИ менән 22 мең кеше ауырыған. Эпидемия алты йәшкә тиклемге балалар араһында йышыраҡ күҙәтелә.

✓ "Сәләмәтлек" милли проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә РФ территорияһында 502 Сәләмәтлек үҙәге эшләй башланы, шуларҙың 12-һе - Башҡортостан Республикаһында. Сәләмәтлек үҙәктәре Өфө (дүрт үҙәк), Бөрө, Белорет, Дүртөйлә, Ишембай, Күмертау, Нефтекама, Сибай, Стәрлетамаҡ ҡалаларында бығаса булған дауалау-профилактика учреждениеларында асылды.Уларҙағы заманса аппаратураларҙа тикшерелеү ауырыуға 40 минутта үткәрелә. Һөҙөмтәләр буйынса "Сәләмәт йәшәү картаһы" асыла.

✓ Республикала онкологик сирлеләргә медицина ярҙамы күрһәтеүҙе камиллаштырыуға республика һәм федераль бюджеттан 650 млн һум аҡса бүленде. Был аҡсаға заманса ҡорамалдар, аппаратуралар һатып алынасаҡ. Шулай уҡ республика ҡаҙнаһы иҫәбенә онкология диспансерының хирургия корпусы төҙөлә. Билдәләнеүенсә, башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда, Башҡортостанда онкологик сирлеләр һаны түбәнерәк. Былтыр беҙҙә 100 мең кешегә 275,7 яман шеш менән ауырыу осрағы теркәлгән. Тәүге урында - үпкә, икенсе урында - һөт биҙҙәре, өсөнсө урында ашҡаҙан яман шеше килә.

✓ ВИЧ-инфекция менән сирләүселәр һаны арта бара. Башҡортостанда 7476 кеше иҫәптә тора, 2010 йыл башынан тағы 89 сирле теркәлгән. Ауырыу йоҡтороусыларҙың 70 проценты - 15-30 йәшлектәр.

ЕТЕ РАЙОН

**ОРДЖОНИКИДЗЕ районының халыҡты эш менән тәьмин итеү хеҙмәтенә былтыр 6807 кеше мөрәжәғәт иткән.**

2009 йылдың ғинуарынан декабренә тиклем 4892 эшһеҙ кеше иҫәпкә ҡуйылған, уларҙың 54,3 проценты - ҡатын-ҡыҙ. Йыл аҙағында райондың халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә 2030 кеше иҫәптә торған, уларҙың 58,6 проценты - ҡатын-ҡыҙ, 34,9 проценты 16-29 йәшлек йәш кешеләр булһа, инвалидтар һаны 6,5 процентҡа еткән. 2009 йылда Орджоникидзе районы буйынса эшһеҙлек кимәле 2,09 процент, ҡала буйынса 2,42 процент тәшкил итте.

**Баш ҡаланың КИРОВ районы үҙенең иҡтисади, мәҙәни һәм башҡа өлкәләрҙә лидер булыуын даими раҫлап тора.**

Яңыраҡ район Башҡортостан Республикаһында инновацион эшмәкәрлекте әүҙемләштереү эшен ойоштороу конкурсында еңеүсе тип табылды. "Йәшлек" балалар, үҫмерҙәр һәм йәштәр клубтары берләшмәһе 2009 йылда үҫмерҙәр һәм йәштәр эшен ойоштороу буйынса социаль-мәҙәни проекттар конкурсында еңеү яулағаны өсөн маҡтау гармотаһы менән бүләкләнде. "Вьюговей-2010" ҡала фестивалендә лә Киров районы хакимиәте I дәрәжә дипломға лайыҡ булды. Был райондың Ҡыш бабайы, боҙ ҡаласығы һәм Яңы йыл тамашалары ҡалала иң яҡшыһы тип табылды.

**Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан СОВЕТ районының Еңеүҙең 50 йыллығы скверында Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булыусыларға ҡуйылған стелаға сәскәләр һалыу тантанаһында мәктәп уҡыусылары һәм һуғыш ветерандары ҡатнашты.**

Сарағa йыйылыусылар стелаға ил һаҡсылары ҡанын символлаштырған ҡыҙыл ҡәнәфер гөлләмәләре һалды. Унда шулай уҡ Совет районы хакимиәте башлығы Салауат Бәхтейәров, райондың ветерандар советы рәйесе Валерий Шәрипов, подполковник Ирек Кәлимуллин ҡатнашты. Совет районынан һуғышҡа бөтәһе 20 мендән ашыу кеше киткән, уларҙың 3664-е һуғыш яландарында ятып ҡалған. Еңеүҙең 65 йыллығына арналған юбилей миҙалы Совет районының 4774 һуғыш ветераны һәм тыл хеҙмәткәренә тапшырыласаҡ.

**ОКТЯБРЬ районында төрлө спорт төрҙәре буйынса ярыштар үтә.**

50-се торлаҡ-эксплуатация идаралығында "Спорт - наркотиктарға ҡаршы" акцияһы сиктәрендә И.М. Бикташев иҫтәлегенә шайбалы хоккей буйынса турнир үтте. "Кашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында саңғы эстафетаһы ла мәктәп уҡыусыларын, урта белем биреү уҡыу йорттары һәм һөнәри лицейҙар студенттарын йыйҙы. Бөгөн "Аҡбуҙат" ипподромы тамашасыларҙы сабыш аттарының ярышына саҡыра. 27 һәм 28 февралдә Октябрь районы ойошмалары һәм предприятиелары араһында саңғы ярышы үтәсәк. 136-сы Башҡорт лицейында уҡыусылар араһында өҫтәл теннисы буйынса беренселек башлана. "Трамплин" спорт-һауыҡтырыу комплексында ла саңғы ярыштары үҙә. Райондың мәғариф хеҙмәткәрҙәрен йәкшәмбе "Кашҡаҙан" паркында "Сәләмәтлек" спартакиадаһында көтәләр.

ӘЙҘӘ, ЯРЫШҠА!

# ШАЯР, КӨЛ, УЙНА...

## башҡорт "Шаяниум"ында



**"Яҙын мәктәп уҡыусыларының көтөп алған иң ҙур байрамы нимә?" - тип һораһаң, моғайын да, бер тауыштан "Шаяниум", - тигән яуап яңғырар. Әйе, быйыл да башҡорт телендә үткәрелгән "Шаяниум - 2010" Асыҡ шаяндар һәм отҡорҙар конкурсы үҙ мәлендә старт алды.**

Конкурстың төп маҡсатына килгәндә, ул үҫеп килеүсе быуында рухи-әхлаҡи үҫеш тәрбиәләү, уҡыусыларҙы мәҙәни һәм ижтимағи тормошҡа йәлеп итеү, балаларҙың ижади мөмкинлектәрен асыу һәм артабан үҫтереү өсөн шарттар булдырыу, туған телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү кеүек бурыстарҙы үҙ эсенә ала. "Хеҙмәтенә күрә - хөрмәте" тигән темаға үткән быйылғы конкурстың икенсе этабы 11 марттан 17 мартҡа тиклем уҙасаҡ. Бында ҡала райондарында еңеүсе тип танылған ике команда (башҡорт мәктәбенән - бер команда, башҡорт теле өйрәнелгән рус мәктәбенән - бер команда) ҡатнаша ала. Иң күп мәрәй йыйыусылар финалға үтә. Башҡорт мәктәптәренән командалар "Беҙ үҙебеҙ..." тигән темаға - 3 минутлыҡ "Сәләмләү", "Сәпкә теймәнә - йәпкә" тигән темаға - 7 минутлыҡ "Музыкаль сәнскеләр", "Тырышҡан тапҡан - ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан" тигән темаға "КВН стилендә үҙенсәлекле сәхнә күренеше" конкурстарында һынау тотасаҡ. Шулай уҡ финалда дәғүәселәрҙең һорауҙарына үҙенсәлекле һәм юмор менән тиҙ ҡайтарылған яуаптар баһаланасаҡ "Күнекмә" конкурсы уҙғарыла. Башҡорт теле өйрәнелгән рус мәктәптәренән ҡатнашҡан командалар үҙҙәре һайлаған ике конкурста сығыш яһай һәм улар араһында еңеүселәр айырым билдәләнәсәк.

"Шаяниум - 2010" конкурсының еңеүселәре һәм призерҙары түбәндәге талаптар үтәлеүенә ҡарап баһаланасаҡ: теманы асыу, үҙенсәлеклелек, юмор кимәле, импровизация, башҡарыу оҫталығы, художество һәм музыкаль биҙәү, текстар авторлығы, сығыш регламентын һаҡлау. Командаларға Гран-при һәм призлы урындар бирелеүҙән тыш, ҡатнашыусылар араһында "Тамашасы һөйөүе", "Иң яҡшы ир-егет роле", "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле", "Иң яҡшы шаяры" тигән номинацияларҙа еңеүселәр билдәләнәсәк.

**Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризалар 2010 йылдың 5 мартына тиклем Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 116/1 адресы буйынса урынлашҡан Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғариф идаралығында ҡабул ителә: Телефондар: 235-80-08, факс: 235-80-00.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҠЫҘЫУ ӘҘЕРЛЕК -

## Берҙәм дәүләт имтиханы талабы

**Башҡортостанда 1 мартта БДИ тапшырыу өсөн ғаризалар ҡабул итеү тамамлана. Быйылғы сығарылыш уҡыусылары ғаризаны уҡыу урыны буйынса бирә, ә мәктәптә былтыр тамамлап, башланғыс һәм урта махсус белем биреү йорттарында уҡып йөрөүселәр һәм сит ил граждандары муниципалитеттарҙың мәғариф идаралыҡтарында теркәлеү үтергә һәм шунда уҡ ғариза яҙырға тейеш.**

Быйыл Берҙәм дәүләт имтиханы штаттағы режим буйынса икенсе тапҡыр үтә. Уҡыу йылы аҙағына тиклем өс ай тирәһе ваҡыт ҡалһа ла, мәктәптәрҙә һәм мәғариф бүлектәрендә БДИ-ға әҙерлек күптән башланған. Мәҫәлән, БР Мәғлүмәт эшкәртеү төбәк үҙәге килешеү нигеҙендә рус теле, математика, физика, биология һәм йәмғиәтте өйрәнеү фәндәренән репетициялар үткәрә. БР Мәғариф министрлығы хеҙмәткәрҙәре райондарға сығып, аңлатыу эштәре лә алып бара. Министрлыҡтың белем биреү һәм БДИ сифатын контролдә тотоу бүлеге етәксеһе Зәки Мырҙағәлин әйтеүенсә, БДИ-ға ҡағылышлы мәғлүмәт күп булыу менән бер рәттән, уны үткәреү йәһәтенән һорауҙар ҙа күп тыуа. Бынан тыш, балалар, ата-әсәләр, уҡытыусылар, мәктәп директорҙарына норматив-хоҡуҡи актарҙы аңлатыу ҙа ҡарәк.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: БДИ формаһында ике имтихан - рус теле һәм математика мотлаҡ иҫәпләнә. Был фәндәрҙе уңышлы тапшырыу сығарылыш уҡыусыһына аттестат алыу мөмкинлеге бирә. Биология, химия, география, физика, информатика һәм мәғлүмәти-коммуникацион технологиялар, әҙәбиәт, тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, башҡорт теле, сит телдәр - һайлау буйынса. БР Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, фәндәр буйынса сикләүҙәр юҡ һәм сығарылыш уҡыусыһы үҙенә уҡырға ингәндә кәрәк булған фәндәрҙең барыһынан да БДИ тапшыра ала.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2009 йылдың 29 декабрендә ҡабул ителгән "РФ-да сауҙа эшмәкәрлеген дәүләт көйләүе нигеҙҙәре тураһында"ғы федераль закон хаҡында мәғлүмәт менән Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары М. Ғәлиуллин оператив ултырышта сығыш яһаны. Законға ярашлы, РФ территорияһында сауҙа эшмәкәрлеген хоҡуҡи көйләү буйынса байтаҡ үҙгәрештәр барлыҡҡа килде. Закон нигеҙендә күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу, сауҙа объекты, стационар һәм стационар булмаған сауҙа объекты, сауҙа селтәре, көнкүреш тауарҙары термиңдарына аныҡлыҡ индерелде. Муниципаль райондар һәм ҡала округтарында был закон 2010 йылдың 1 июлендә үҙ көсөнә инә.

✓2009 йылда Өфөлә тормошҡа ашырылған маҡсатлы ҡала программалары һаны 2008 йыл менән сағыштырғанда өс тапҡырға арткан. Дөйөм алғанда, баш ҡалала йыл дауамында 39 программа эшләгән, уларҙың иң ҙур өлөшөн социаль программалар тәшкил итә. Уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн 4,24 миллиард һум аҡса тотонолған. Маҡсатлы программалар ярҙамында Өфөлә ҡала электр транспорты киңәйтелә, яңы троллейбустар, трамвайҙар һатып алына. Ҡала ойошмалары һәм предприятиелары хеҙмәткәрҙәренең эш шарттарын яҡшыртыу, эшһеҙҙәрҙе эшкә урынлаштырыу мөмкинлеге барлыҡҡа килә.

✓Өфөнөң "Олимпик-парк" тау саңғыһы комплексында журналистар менән мәктәп уҡыусыларының йыйылма командалары араһында тау саңғыһы буйынса ярыштар үтте. Бығa тиклем М. Кәрим исемендәге 158-се һәм Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназиялары уҡыусылары журналистар менән шахмат, футбол һәм волейбол уйнағайны. Был юлы улар саңғы ярышы ойоштороҙо. Был ярышта иһә 20-се ҡала башҡорт гимназияһы командаһы еңеүсе булды.

✓Өфөлә тәүге тапҡыр "Эш биреүселәргә ышаныс сертификаты" тапшырылды. Уға "Энергоавтоматика" йәмғиәте һәм БР Стандартлаштырыу, метрология һәм сертификатлау үҙәге лайыҡ тип табылды. Әлеге ышаныс ҡағыҙы хеҙмәткәрҙәрҙең хеҙмәт хоҡуҡын һаҡлау кимәле юғары булған эш биреүселәргә тәғәйенләнә.

АФАРИН!

# ЕҢЕҮСЕЛӘРҘЕҢ...

## балалары ла еңеүсе була

**Үҙенсәлекле спорт төрө шахматты кешелек инде бер нисә мең йыл уйнай. Шулай ҙа, шахмат - еңел генә уйын түгел, ул уйынсыларҙан уйланыуҙы, зирәк, сос, тапҡыр булыуҙы талап итә. Шахмат беҙҙең республикабыҙҙа ла киң үҫеш алған. Күптән түгел баш ҡалабыҙҙа "Шахматтар мәктәптә - 2010" республика фестивале тамамланды. Ошо турала һәм, ғөмүмән, был спорт төрөнөң республикалағы үҫеше, ҡаҙаныштарыбыҙ хаҡында һөйләүҙе һорап, Республика балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбе директоры Наилә ХӘСӘНОВАға мөрәжәғәт иттек. Әйткәндәй, Наилә Хәсәнова ФИДЕ мастеры, халыҡ-ара мастер, Рәсәй спорт мастеры, ҡатын-ҡыҙҙар араһынан беренсе халыҡ-ара гроссмейстер Эльмира Хәсәнованы тәрбиәләп үҫтергән әсә лә.**



### Шахмат мәктәбе тураһында

Республикабыҙҙа һуңғы йылдарҙа спорттың шахмат төрө айырыуса киң үҫеш алды. Бөтә донъяға билдәле шахматсыларыбыҙ бар, көслө шахмат мәктәптәре әүҙем эшләп килә, әленән-әле был спорт төрө буйынса ярыштар уҙғарыла. Мин етәкләгән Республика балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбе 1992 йылдан алып эшләп килә, әлеге ваҡытта мәктәптә 696 бала шөғөлләнә. Үҙенең йәшәү дәүерендә ул халыҡ-ара спорт мастерҙары, ФИДЕ мастеры, спорт мастерлығына кандидаттар, I разрядлы 200 спортсы әҙерләп сығарҙы.

Йыл һайын ҡышҡы һәм яҙғы каникулдарҙа республика кимәлендә балалар араһында шахмат турнирҙары уҙғарыу традицияға әйләнде. Быйылғы "Шахматтар мәктәптә - 2010" республика шахмат фестивалендә республиканың район һәм ҡалаларынан 24 команда һәм 212 йәш шахматсы ҡатнашты. Шундай ҙур ара булыуға ҡарамаҫтан, ғинуар һыуыҡтарынан ҡурҡмай, быйыл тәүге тапҡыр Йылайыр районы үҙенең командаһын алып килде. Беҙ был райондың шундай тырыш, ҡыйыу, аҡыллы йәш тренер-уҡытыусыһын күреп бик ҡыуандыҡ. Тәүге тапҡыр ҡатнашһалар ҙа был командан Илзидә Мостафина (1998 йылғы) ҡыҙҙар араһында II урынға лайыҡ булды. 1994-1997 йылғылар араһында бронза миҙал яулаған Ейәнсура районы егете Азат Мәһәҙиев бик өмөтлө күренә. Баймаҡ һәм Октябрьский ҡалалары командалары йыл һайын ҡатнаша, ул яҡтарҙа көслө шахматсылар үҫеп килә, тип әйтергә була.

### Ҡыҙым - ғорурлығым минең

Эльмираны Башҡортостанда "Беҙҙең ғорурлығыбыҙ" тип йөрөтәләр. Ул башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында Башҡортостан Республикаһын Рәсәй һәм донъя кимәлендә таныҡкан тәүге шахматсы. Эльмира бәләкәй сағынан ғәҙәттән тыш һәләтле бала булды, бәлки, ундай кешеләр йөҙ йылға бер генә тыуалыр. Шахматта өс йәшендә үк яҡшы итеп уйнай белә ине. Юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң, Баймаҡ ҡалаһының 3-сө мәктәбендә уҡытыусы булып эшләп йөрөйөм. Бер көн шулай ҡыҙымды алып ҡалырға кеше булмағас, уны үҙем менән мәктәпкә алып киттем. Бала шунда йөрөп ята, үҙенсә уйнаған була. Бер ваҡыт директор урынбаҫары килде лә: "Беренсе ҡатта шахмат ярышы бара. Әйҙә, Эльмираны ҡатнаштырып ҡарайыҡ", - ти. Мин артыҡ иғтибар ҙа итмәнем, ваҡыт юҡлығына һылтандым. Ул: "Улайһа, үҙем алып барам", - тип, Эльмираны етәкләп төшөп китте. Ә мин ҡабаланып дәрескә инеп киттем.

Дәрес бөтөп кенә барғанда, ишек шаҡынылар. Асһам, муйынына таҫма тағып, ҡулына бәләкәй генә китап менән маҡтау ҡағыҙы тотоп, йылмайып Эльмирам баҫып тора. "Мин еңдем!" - ти. Үҙе йүнләп һөйләшә лә белмәй ине әле. Дәрестән бүленгем килмәне, уны ишек төбөнә баҫтырып ҡуйҙым да, дәресте артабан дауам иттем. Ҡыңғырау яңғырау менән уны уҡыусылар уратып алды. Эй, маҡтаған, хуплаған булалар, нисә йәш, тип ҡыҙыҡһыналар. Дүрт кенә йәш икәнен белгәс, эй аптыранылар.

Дүрт йәшенә тиклем кубиктар менән уйнай ине. Мин уның кубиктарҙы шул тиклем тиҙ йыйғанына аптырай торғайным. Ана шулай бәләкәй саҡтан башҡа балаларҙан айырылып торҙо, математикаға һәләте көслө ине. Уның шундай һәләтле икәнен белеп ҡалғас, тренер Зөлфәр Зөбәйеров Эльмираны шахмат түңәрәгенә йөрөтәүемде һораны. Шулай итеп, мин Эльмираны балалар баҡсаһынан һуң шахмат түңәрәгенә йөрөтә башланым. Һуңынан Республика балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбендә шахмат серҙәренә төшөнөүен дауам итте. Тәүҙә ситтән тороп уҡыһа, һуңынан ҡыҙыбыҙҙың киләсәген уйлап, ғаиләбеҙ менән Өфө ҡалаһына күсеп килдек. Уңыштар шунда уҡ килде: Эльмира ете йәшендә республика чемпионы булһа, артабан 1994 йылда Урал чемпионы исемен яуланы. Был ул ваҡытта беҙҙең өсөн иң ҙур уңыш булды. Эльмираның уңыштарында өләсәһе Мусина Дания Һаҙый ҡыҙының роле ҙур булды (хәҙер мәрхүм инде, ауыр тупрағы еңел булһын). Мин эшләнем, унан һуң өйҙә бәләкәй ҡыҙым менән ултырҙым, шуға күрә ярыштарға уны һәр ваҡыт әсәйем алып йөрөнө. Эльзира ҡыҙым да шахмат уйнай, өс тапҡыр республика чемпионы булды. Беҙҙең шулай өйҙә лә, эштә лә шахмат, шуның тормошто хатта күҙ алдына ла килтереп булмай.

### Ни өсөн ҡытайҙарҙы еңдек?

Донъя кимәлендә шахматта ҡытайҙар көслө уйнай, халыҡ-ара уйындарҙа ҡытай ҡыҙҙарын бығa тиклем бер кем дә еңгәне юҡ ине. 1999 йылда Испанияның Оропеза ҡалаһында үткән донъя беренселегендә Эльмираның ҡытай вәкилен еңеп, уның менән I-II урындарҙы бүлешеүе Рәсәй өсөн шундай ҙур еңеү булды. Бөтәһе лә, ҡытай ҡыҙы еңелмәйәсәк, тип һанай ине. Ҡыҙымдың Вьетнам, Ҡытайҙың көслө шахматсылары менән бер кимәлдә уйнауы мине лә нык тулҡынландырғайны. Ә нисек Эльмира еңеүгә өлгәште һуң? Мин ҡыҙымды алдан уҡ психологик һәм мораль яҡтан еңеүгә әҙерләнем. Уның ҡурҡмауы, еңелермен инде, тиген уйҙы башына индермәүе, төшөнкөлөккә бирелмәүе ҙур еңеүгә алып килде лә инде. Тормошта шулай бит ул: беҙ һәр саҡ нимәнелер эшләргә ҡурҡабыҙ, алдан уҡ эштәребеҙҙе насарға юрап бөтәбеҙ. Кеше үҙендә ана шул эске батырлыҡты уята белергә тейеш, минеңсә.

Бөтә ярыштарҙа ла мин Башҡортостан һәм Рәсәй флагтарын үҙем менән йөрөтәм. Ни өсөндөр, флагтар янымда булғанда, үҙемде ышаныслы тоям. Минә ҡыҙым менән ярыштарға бергә барырға ярҙам иткәне өсөн Хөкүмәтебеҙгә, Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовҡа ... Ғөбәйҙулла улына ҙур рәхмәт белдереп уҙыр инем.

### Шахмат баланың аңын үҫтерә

Шахмат кешенең тормошта кәрәк булған файҙалы сифаттарын үҫтерә, мәсәлән, зирәк хәтер, күҙәтеүсәнлек, логик фекерләү һәм үҙ-үҙеңдә тота белеү, фантазия, тиҙ реакция. Күп кенә дәүләт һәм хәрби хеҙмәткәрҙәр, ғалимдар, музыканттар, яҙыусылар һәм шағирҙар шахматсы булараҡ та танылыу яулаған. Шахмат менән шөғөлләнгән кешеләрҙең холҡонда кире сифаттар юҡ, улар бик аҡыллы, теүәл кешеләр һәм улар менән бәхәсләшеүе ауыр. Улар тормошто шахмат таҡтаһындағы кеүек варианттарға бүлеп ҡарай, йәғни бөтә эште лә уйлап башҡара. Шахмат таҡтаһындағы кеүек, үҙҙәренең дә, ярышҡан кешеһенең дә йөрөштәрен (ысынында, шахмат таҡтаһында һин 25 йөрөштө алдан күрә белергә тейешһең) алдан белеп, нисек ҡулайлы булыуын иҫәпләп тә ҡуялар. Уларҙың тормошто вариантлап ҡарауы, алдан күрә белеүе төрлө ҡатмарлы хәлдәрҙә ярҙам итә.

Беҙҙең тәрбиәләнеүселәр мәктәптә бик яҡшы уҡый, бигерәк тә математика, физика фәндәренән һәйбәт алдыралар. Уларҙы юғары техник уҡыу йорттарына уҡырға саҡырып, көтөп торалар.

Һәр бала талантлы - шуны ата-әсә онотмаһын, ҡолағына киртеп ҡуйһын ине. Бөтә ата-әсәләргә лә, балаларҙың талантына ваҡытында иғтибар итегеҙ, ваҡытында шөғөлләнегеҙ, үҫтерегеҙ, тип өндәшер инем. Эльмираның талантын күреп, ваҡытында шөғөлләнмәгән булһалар, ул ошо уңыштарға ирешер инеме ни? Бәлки, нәҡ һеҙҙең сабыйығыҙ киләсәктә ниндәйҙер өлкә буйынса донъя чемпионы исемен яулар?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шахматтың үҙ ваҡытында ниндәй һуғышсан һәм стратегик әһәмиәткә эйә булғанын әйтеп үтергә кәрәктер. Бөйөк ғәскәр башлыҡтары был уйындың бөтә йөрөштәрен һәм алымдарын белергә тырышҡан, сөнки, шахмат таҡтаһында еңелеү - тормошта ла еңелеү, тип һаналған. Был спорт төрөнөң республикабыҙҙа үҫеш алыуы ла ҡыуаныслы күренеш. Киләсәктә үҙебеҙҙең милләт балаларын тағы ла донъя кимәлендә күрергә яҙһын.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



# ИММУН СИСТЕМАҢ НЫҒЫҺЫН, ТИҺӘҢ...

## дарыу урынына үлән эс

❖ Цинга сирен булдырмау һәм организмды вирустар менән көрәшеү көсөн күтәреү өсөн шыршы ылыҫынан витаминлы эсемлек яһарға була. Бының өсөн 2 ҡалаҡ ылыҫты һалҡын һыуҙа йыуып, өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас менәнябып, 20 минут ҡайнатырға. 30 минут төнәткәндән һуң, һөҙөргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр стакан эсергә. Эсер алдынан аҙ ғына шәкәр, бал йәки тоҙло кәбеҫтә һыуы өҫтәргә була.

❖ 250 грамм һуғанды ваҡ ҡына итеп турап, 200 грамм шәкәр ҡушып, болғатырға. Әҙер массаға 0,5 литр һыу өҫтәп, сәғәт ярым тирәһе талғын утта бешерергә. Һөҙгәс, таҙа быяла һауытҡа һалырға һәм көнөнә 3-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

❖ Иммунитетты нығытыусы тағы ла бер төмлө эсул: 0,5 килограмм иҙелгән мүк еләге (клюква), 1 стакан таҙартылған грек сәтләүеге, шаҡмаҡлап туралған 2-3 йәшел алмаға 0,5 стакан һыу һәм 0,5 килограмм шәкәр өҫтәп, талғын утта ҡайнатып сығарабыҙ. Иртән һәм кисен сәйгә ҡушып, 1 ҡалаҡ ашарға.

❖ Миҙгел эпидемияһы көсәйгән мәлдә иртән һәм кисен ярты стакан торма һәм кишер һутына 1 ҡалаҡ бал йәки лимон һуты өҫтәп эсергә була.

❖ Ошо витаминлы компот та һаулыҡты нығытырға мөмкинлек бирә: мелисса, бөтнөк (мята), каштан сәскәһе, болаунт (иван-чай) үләндәрен 5-әр ҡалаҡ алып, 1 литр һыуға 2 сәғәт төнәтергә. Тундырылған мүк еләге, ҡара ҡарағат, балан, сейә, ер еләгенән айырым компот ҡайнатығыҙ һәм икеһен бергә ҡушығыҙ. Көнөнә ярты литрҙан да кәм эсмәҫкә.

❖ Дарыу үләндәре менән ванна инеү ҙә иммунитетты нығыта: ҡурай еләге, ҡыҙыл көртмәле (брусника), ығанаҡ, ҡарағат, әлморон йәки миләштең япрағы, киптерелгән емеше, ботаҡтарын алып, ҡайнар һыу ҡойоп, 5-10 минут төнәтергә. Килеп сыҡҡан төнәтмәне ваннаға ҡойорға. Бер нисә тамсы эвкалипт йәки кедр майын өҫтәргә лә мөмкин. Ындай ваннаны 5-10 минуттан оҙаҡ инергә ярамай. Ул иммунитетты нығытып ҡына ҡалмаясаҡ, тын алыуҙы еңеләштерәсәк, баш ауыртыуын һәм тән һыҙлауын баҫасаҡ.




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Һөйләшеү ҡағиҙәләре

- Кешенең яңылыш һөйләгәнен белһәгеҙ, "яңылыш һөйләйһең йәки белмәйһең" тимәгеҙ. Дөрөҫтө унын күңелен ҡырмаҫ сүрәттә, йомшаҡ итеп белдерегеҙ.
- Яңылыш һөйләгәнегеҙҙе аңлаһағыҙ, "хаталандым", тип әйтергә тәрләнмәгеҙ. Һөйләгәндәрегеҙ башҡалар тарафынан хата тип күрһәтелһә, ә һеҙ хата булмауын яҡшы белһәгеҙ, ҡаты итеп ҡаршы тормайынса һәм ҡысҡырмай әҙәпле яуап бирегеҙ. Һүҙегеҙҙең дөрөҫлөгөн ҡаты һәм асыулы тауыш менән түгел, ә йомшаҡлыҡ һәм дәлил ҡеүәте менән иҫбат итегеҙ.
- Мәжлестәрҙә кешенең тәнендә булған гәйептәр хаҡында һөйләмәгеҙ, берәһе хаҡында булған һүҙҙе башҡанан ишетеп булһа ла һөйләмәгеҙ.
- Башҡаларға форсат бирмәй, бөтөн ваҡыттыҡ һеҙ генә һөйләп үткәрмәгеҙ. Күңелегеҙҙе тел артынан түгел, ә телегеҙҙе тел артынан йөрөтөгөҙ. Кешелеклелек һүҙҙә түгел, ғәмәлдә булыуға иғтибар итегеҙ.
- Бөйөк кешеләргә мөрәжәғәт итергә тура килһә, "хәҙрәтегеҙ, йәнәбегеҙ, зат ғәлигеҙ, һеҙ" кеүек хөрмәт белдергән һүҙҙәрҙе ҡулланығыҙ.
- Үҙегеҙ һәм балаларығыҙ хаҡында ғына һөйләп, ғүмер үткәрмәгеҙ, ата-баба, нәҫелырыу һәм остаздарығыҙ менән маҡтанмағыҙ. Кеше балаһы бер ҡасан да тулыһынса камиллыҡҡа ирешмәйәсәген белегеҙ.
- Берәйһе әйбер һорағанда, нисек кенә унайһыҙ ваҡытта булһа ла, әҙәпле яуап бирегеҙ, һораған әйбер ҡулығыҙҙа йәки күңелегеҙҙә булмаһа, асыуланмағыҙ. Һүҙегеҙгә яуап ҡайтарырға онотһалар, ҡабаттан һөйләгеҙ. Үҙегеҙ ҙә иһә, ҡабаттан һөйләтеүгә мохтажлыҡ тыуһа, "йәнә һөйлә" тимәйенсә, "мәрхәмәт күрһәтеп, тағы бер ҡабат һөйләһәгеҙ, бәлки, аңлар инем" рәүешендә йомшаҡ һүҙҙәр ҡулланығыҙ.
- Башҡаларҙың һүҙҙәрен яҡшы аңламайса, "дөрөҫ һөйлә" йәки "юҡ, улай түгел" кеүек һүҙҙәр менән яуап бирергә ашыҡмағыҙ.
- Фекерҙәрегеҙҙе иң тәүҙә яҡшы итеп аңлағыҙ, һуңынан әҙәпле генә бәхәскә керегеҙ. Үҙегеҙҙең фекерегеҙгә үҙегеҙ хайран ҡалмағыҙ, һүҙ һөйләгәндә ант итмәгеҙ. Үҙ фекерене хайран ҡалыу - наҙандар ғәҙәте, ант итеү һәм "был һүҙҙе дөрөҫ һөйләйем" тип әйтеү ялғанлыҡ билдәһе.
- Бер кешегә ҡаршы һөйләргә мәжбүр булһағыҙ, "юҡ, улай түгел, былай" тигән кеүек ҡаты һүҙҙәрҙе ҡулланмағыҙ, "һеҙ һөйләгәнсә булыуы ихтимал, ләкин мин, былай түгелме, тип фараз итәм" йәки "минең фекеремсә, былай булһа кәрәк" кеүек һүҙҙәр ҡулланығыҙ. Тулыһынса белмәгән нәмәләр хаҡында башҡалар менән ғауғалашмағыҙ.
- Кәрәкмәгәндә хәсрәтле хәбәрҙәр һөйләмәгеҙ, әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙе, әҙәби аҫәрҙәрҙән алынған булһа ла, ауыҙығыҙға алмағыҙ һәм аманат ителгән һүҙҙәрҙе фаш итмәгеҙ (сер һаҡлау аҡыллы кешеләрҙең сифаты була).
- Берәүгә лә ләғнәт итмәгеҙ, ҡәһәрле доға уҡымағыҙ, берәһен дә һүкмәгеҙ, һис кемде аптыратмағыҙ, хәжәт үтәгән ваҡытта һөйләшмәгеҙ, мөьмин һәм башҡа кешеләрҙе ҡурҡытмағыҙ, өсөнсө кеше булғанда икәүләп йәшерен һүҙ һөйләшмәгеҙ, насар эш артынан йөрөүселәргә юл өйрәтмәгеҙ. Аллаһы Тәғәлә бер тел һәм ике ҡолаҡ биргәндә ишеткән нәмәләрҙең тик яртыһын ғына һөйләргә тейеш икәнлеген әйтеүе тураһында ишарат барлығын белегеҙ.

ӘЙТӘГҮР!

**Үткән аҙнала Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 65 йыллыҡ юбилейы уңайынан "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайында ҙур кисә уҙҙы. Башҡортостандың төрлө төбәктәренән төплө белем алыу маҡсаты менән йыйылған егет һәм ҡыҙҙар был юлы туған уҡыу йортона һағыныуҙы баҫыу, күрешеү, аралашыу теләге менән ашҡынды. Беҙ ошо уңайҙан файҙаланып, уларға: "Гимназияла уҡыу һеҙҙең аҙмышығыҙға ниндәй йоғонто яһаны?" - тигән һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



# ҠУШ ҠАНАТТАРҘЫ...

## интернатыбыҙ үҫтерҙе

**Гәли ҠАҺАРМАНОВ, хаҡлы ялда:** Хөкүмәтебеҙ үҙ ваҡытында ошо башҡорт мәктәбен асмаһа, бәлки, күптәребеҙ бөгөнгө көндәге юғарылыҡҡа өлгәшә лә алмаған булыр ине. Шуға ла был гимназияның республикабыҙға зыялы шәхестәр тәрбиәләп сығарыуҙа өлөшө сикһеҙ ҙур. Беҙҙе бында бушлай ашаттылар, кейендерҙеләр, белемде һоҫоп бирҙеләр. Беҙ, ҡырҡ уҡыусы, гимназияны 1948 йылда икенсе сығарылыш булып тамамланыҡ, 80-90 процентыбыҙ юғары уҡыу йортона уҡырға инде.

Мин гимназияның һәр юбилейына килергә тырышам. Үҙебеҙҙе уҡытҡан уҡытыусыларҙы, тәрбиәселәрҙе әле булһа хәтерләйем. Уларҙың күптәре беҙҙең арабыҙҙа юҡ инде. Мин үҙем Бүҙәк районы Ҡаңлы Төркәй ауылынанмын. Йүнәлтмә буйынса Әбйәлил районына эшкә барҙым һәм тормошомдоң 42 йылын Ташбулат ауылы мәктәбендә балаларға белем биреүгә арнаным, шунын 17 йылын директор вазифаһын башҡарҙым. Ошо ауылда хәләл ефетемде осратып, ғаилә ҡорҙом.

**Нәжибә ӘБСӘЛӘМОВА, хаҡлы ялда:** Бындағы уҡыған йылдар тормошомдоң иң бәхетле осоро. Беҙ уҡыған саҡта ул берҙән-бер башҡорт мәктәбе булды. Әҙһәм ағай Искужин беҙҙе ҡурай уйнап йоҡлатыр, ҡурай уйнап уятыр ине. Туған гимназиябыҙ беҙҙә туғандарса мөнәсәбәт, яуаплылыҡ, тоғролоҡ сифаттарын тәрбиәләне. Беҙгә уҡытыусыларыбыҙ: "Интернатты тамамлаған уҡыусылар тәртипһеҙ була алмай, улар үҙе менән дә, ғаиләһе менән дә бөтәндәргә өлгө булып торорға тейеш", - тип өйрәтә торғайны. Был, ысынлап та, шулай. Мәктәпте тамамлауға 43 йыл тула, беҙ һаман да бергә уҡыған класташтарыбыҙ менән осрашып, күрешеп торабыҙ, араларҙы өҙмәйбеҙ. Беҙ ирем менән дүрт бала тәрбиәләп үҫтерҙек, белем бирҙек. Шулай гимназия биргән һабаҡтарҙы ҡулланып, тормош ауырлыҡтарына бирешмәйенсә, лайыҡлы йәшәргә тырышабыҙ.

**Наил ҒАБДУЛЛИН, "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһының баш табип урынбаҫары:** Ваҡытында милли кадрҙар әҙерләү маҡсатында асылған уҡыу йорто бөгөн дә был изге бурысты оло яуаплылыҡ менән үтәүен дауам итә. Мин гимназия-интернатты 1964 йылда тамамлап, Башҡорт дәүләт медицина университетына уҡырға барғанда ҡала тормошона ярайһы уҡ өйрәнгәйнем, башҡа тиҫтерҙәремдән белем кимәле буйынса ла, башҡа яҡтан да һис ҡалышмай инем. Ауылдан килгән баланың аҡыл үҫешенә лә, аралашыу оҫталығын арттырыуға ла, башҡалар араһында үҙеңде тиң итеп тойоу өсөн кәрәкле сифаттарҙы тәрбиәләүгә, үҫтереүгә лә интернаттың йоғонтоһо ҙур. Үҙеңдең кимәлеңде белеү, тамырҙарың өсөн ғорурлыҡ кисереү, белемле булыу йәш кешелә үҙ-үҙеңә, киләсәгенә ышаныс тыуҙыра. Тап ошо йортта күп дуҫтар таптыҡ, атай-олатай булып бөтһәк тә, әлеге көнгә тиклем матур итеп аралашып, күңелле итеп йәшәйбеҙ.

**Гөлбүләк ҒӘЛЛӘМОВА, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты уҡытыусыһы:** Гимназия-интернатта уҡыуымдың төп әһәмиәте шунда: мин бында белемле генә булманым, ә төрлө яҡлап үҫешә лә алдым. Ул саҡта ла ансамбль бар ине, шунда йырлап-бейеп тә йөрөнөк, спорт менән дә шөғөлләндек, ҡала кимәлендәге ярыштарға ла бара инек. Йәғни, белемгә ынтылыу ҙа, сәләмәт йәшәү рәүеше лә интернаттан, тип әйтә алам. Илһөйәрлек тойғолары ла, милләтең өсөн ғорурлыҡ хистәре лә башҡорт теле дәрестәрендә һалынған. Бөгөн үҙем уҡытыусы, интернатта эшләүсе кеше булараҡ, уҡыусыларымдың күңеленә изгелек орлоҡтары һалыуҙа үҙемде уҡытҡан уҡытыусыларға һәм тәрбиәселәргә оҡшарға тырышып эшләйем.

**Әхәт БАКИРОВ, Өфө Хеҙмәт медицинаһы һәм кеше экологияны фәнни-тикшеренеү институты директоры:** Гимназия-интернатта уҡыған йылдарымды бала сағымдың иң бәхетле мәлдәре тип иҫәпләйем. Биш бала тәрбиәләгән ҙур ғаиләнән, Дәүләкән районынан килгәйнем мин бында. Әгәр ҙә гимназияла уҡымаған булһам, моғайын да, баласаҡ хәтирәләрем ул тиклем сағыу ҙа, дуҫтарым да күп булмаҫ ине. Иң мөһиме: бөгөнгө мин булмаҫ ине, сөнки бөтә башланғыстарҙың башланғысы - интернатта, унда эшләгән уҡытыусылар уҡытҡан дәрестәрҙә, тәрбиәселәр биргән тормош һабаҡтарында, тип иҫәпләйем. Хәҙер 30 йылдан ашыу табип булып эшләйем, бер ҡасан да был йортто ла, унда эшләүселәрҙе лә онотҡаным юҡ һәм уларҙың барыһына ла сикһеҙ рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм. Интернатта белем алған һәр кеше минә бер туғаным кеүек, гел аралашып, бер-беребеҙгә ярҙам итеп йәшәргә ынтылабыҙ.

**Сәрүәр СУРИНА, тележурналист:** Әлеге ваҡыттағы ныҡлы белемем, бер эштән дә ҡурҡмауым, тәүәккәл, ҡыҙыҡһыныусан булыуым өсөн гимназия-интернатҡа рәхмәтлемен. Был сифаттар минә генә түгел, бөтә интернат тәрбиәләнеүселәренә лә хас. Интернатты тамамлаған уҡыусылар донъяға битараф түгел, ҡайҙа ғына эшләһәләр ҙә, ярҙамсыл, бер-береһенә иғтибарлы, кеше хәленә инә белә, тағы ла илһөйәрлек, ил яҙмышына ла битараф булмау хас уларға. Төрлө яҡтан белемгә ынтылып килгән балалар үҙҙәре кеүек яҡтылыҡҡа, белемгә, юғарыға ынтылған кешеләр араһына - иҫ киткес йылы бер даирәгә килеп инә. Гимназия күп нәмәгә өйрәтә, баланы төрлө яҡлап үҫтерә. Шәхестәрҙе шәхес кенә тәрбиәләй, уларға юл күрһәтә, дөрөҫ йүнәлеш бирә, ыңғай йоғонто яһай ала. Беҙҙе нәҡ шундай шәхес уҡытыусылар уҡытты һәм класташтар араһында шәхес булырлыҡ кешеләр күп булды. Арабыҙҙан республикабыҙға, Рәсәйгә танылған билдәле шәхестәр сыҡты. Бер-беребеҙҙе бик яраттыҡ, хаталарыбыҙ булһа, бер-беребеҙҙе тәнҡитләй, өйрәтә торғайныҡ. Әле лә шулай. Йөрәктәребеҙҙәге бер-беребеҙгә булған шундай хисте, шундай йылылыҡты гимназия-интернат тәрбиәләне.

**Әмир ХАЛИҠОВ, хаҡлы ялда:** Беҙ һуғышҡа тиклемге һәм һуғыш осоро балалары шул замандың ауырлыҡтарын иңебеҙҙә татыныҡ, ил күргәнде күрҙек, илебеҙ кисергәнде кисерҙек. Мин Бөрйән районы Байназар балалар йортонда йәшәй инем, 1947 йылда яҡшы уҡығаным өсөн Өфөгә ошо интернатҡа уҡырға ебәрҙеләр. Интернатта төрлө яҡтан йыйылған балалар бергә йәшәнек, бергә ашаныҡ, уҡыныҡ. Арабыҙҙа күбебеҙ етем ине, ошо интернат беҙҙе үҙ ҡанаты аҫтына һыйындырҙы, үҫтерҙе, тәрбиәләне. Беҙҙе шул тиклем үҙ эшенә мөкиббән киткән, балаларҙы кеше итәм, тип тырышҡан, талапсан уҡытыусылар уҡытты. Шуға күрә беҙгә интернатты тамамлағандан һуң юғары уҡыу йортона инеүе ауыр булманы. Беҙ ҡайҙа ғына булһаҡ та ошо гимназиябыҙҙы тамамлауыбыҙ менән ғорурлана торғайныҡ. Интернат беҙҙе үҙ-үҙебеҙгә ышанып йәшәргә өйрәтте, беҙ бер ҡасан да кемдәндер, ҡайҙандыр ярҙам килер, тип көтөп ултырманыҡ, ә тормош һанауҙарына бирешмәҫкә, сабыр булырға, төрлө хәлдәрҙән сығыу юлдарын табырға, ауырлыҡтарҙы үҙ көсөбөҙ менән еңергә өйрәндек, бер ҡасан да башҡа милләттәр араһында үҙебеҙҙе кәм тойманыҡ, гел алдынғылар сафында йөрөнөк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гимназияны тамамлаусыларҙың инде нисәмә йылдар үтеүенә ҡарамаҫтан, бер-береһен туғандарса күреп, ихлас аралашыуҙарына ҡарап, ҡайһылай бәхетлеләр, тип һоҡландыҡ. Уларҙың туған гимназиялары, уҡытыусылары, класташтары тураһында күҙ йәш аша һағынып, яратып, ғорурланып хәтергә алыуҙары ла тап ошо йортта һалынған туғанлыҡ хисенән киләләр, тигән һығымтаға киләнде. Ошо хис уларҙы берләштерә, араларҙы яҡынайта, йәшәүгә көс-дәрт бирә, рухын нығыта, яуаплылыҡ тойғоһон уяталыр.**

АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!

# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?




**Алтынсы фактор. Башҡорттарҙың татарҙар менән бер үк территорияла ҡатнашып йәшәүе ассимилятив процестарҙың көсәйеүенә килтерә.**

Яһаҡ түләүсе , хеҙмәти, сумаҙанлы һәм сауҙа итеүсе татарҙарҙың көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары мөхитенә күсеп килеүе башҡорт ауылдарының кәмеүенә һәм этник яҡтан ҡатнаш ауылдарҙың арта барыуына килтерә.

**Етенсе фактор - башҡорттар, татарҙар һәм типтәрҙәр араһында ҡатнаш никахтарҙың артыуы.**

Типтәрҙәр араһында башҡорттар булыуын ҡатнаш никахтар һөҙөмтәһе, тип ҡараусылар бар. Йәнәһе, типтәрҙәр башҡорт ҡыҙҙарын көләш итеп алһалар ҙа, үҙҙәренең ҡыҙҙарын башҡорттарға кейәүгә һирәк биргән. Ҡайһы бер авторҙар фекеренсә, татар типтәрҙәренән сыҡҡан килендәр башҡорт мөхитендә башҡорттарҙы татарҙарға яҡынайтыусы ролен үтәгән. Ә типтәр араһындағы башҡорт ҡыҙҙарына был хас булмаған, тигән уйҙырма ла ошо рәүешле тарала. Был осраҡта шул уҡ Бөгөлмә һәм Минзәлә өйәҙҙәре типтәрҙәренең этник яҡтан башҡорт сығышлы булыуы бөтөнләйгә иҫәпкә алынмай. Социаль ҡатлам сифатындағы типтәрҙәр милләте буйынса башҡорт булғас, ниндәйҙер ассимиляция тураһында һүҙ йөрөтөү дөрөҫ түгел.

Ысынбарлыҡта көнбайыш башҡорттары ерлегендә эндогамия (бер этнос кешеләренең үҙ-ара никахлашыуы) күренеше боҙолғас, милләттең емерелеүенә юл асыла. XVIII быуатта көнбайыш башҡорттары һәм татарҙар араһындағы никахтарҙың махсус закон менән тыйылыуы ошо күренештең киң таралыуын раҫлай. Ошондай никахтар этносҡа "ят элементтар" ҡушылыуының иң радикаль юлы була. Академик Ю.В. Бромлей сит этник мөхиттә йәшәүселәрҙең тәүге быуыны үҙ ғүмере дауамында үҙенең этник сығышын һаҡлауы хаҡында яҙа. Ә бына уларҙың балалары һәм ейәндәре ҡатнаш никахҡа инеү сәбәпле сағыштырмаса тиҙ арала этник яраҡлашыуға һәм ассимиляцияға дусар була. Ошо ғалим киң күләмдәге ассимиляция процестары барышында йотолоусы этноста ҡатнаш никахтар һанының сағыштырмаса дәүмәле этнос-ассимиляторҙыҡына ҡарағанда күпкә ҙурыраҡ булыуын билдәләй. Йотоусы этноста эндогамия һиҙелерлек кимәлдә кәмемәй. Ысынлап та, көнбайыш башҡорттары татар ҡыҙҙарын ҡатынлыҡҡа күпләп алып, үҙ ҡыҙҙарын татарҙарға кейәүгә аҙыраҡ бирә. Ҡатнаш никахҡа инеү бер нисә быуат дауамында барып, көнбайыш башҡорттарында элек күҙәтелгән эндогамияның юҡҡа сығыуына һәм тел ассимиляцияһы менән бергә уларҙың татарҙар тарафынан тулыһынса йотолоуына килтерә. Һөҙөмтәлә заманында 166 мең тәшкил иткән Минзәлә һәм Бөгөлмә башҡорттары үҙҙәренең этник асылын юғалтып, татар халҡы составына инеп китә. Шулай булһа ла, башҡа этник мөхиттә тороп ҡалған бөгөнгө көнбайыш башҡорттары үҙҙәренең этник тамырҙарын белергә теләй.

Ҡатмарлы этник-ара процестарға ҡарамаҫтан, XVIII-XIX быуаттарҙа башҡорт халҡының арта барыуы күҙәтелә. 1795 йылда башҡорттарҙың дөйөм һаны 250 меңгә етһә, 1816 йылда - 328 мең, 1859 йылда 545 мең була. 1897 йылғы тәүге Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙа 1 миллион 311 мең кеше башҡорт, тип теркәлгән. Был осраҡта 300 меңләп типтәр һәм мишәрҙең башҡорттар составына индерелеүен иҫәпкә алһаҡ, башҡорттарҙың ысынбарлыҡтағы һанын 1 миллион тирәһе, тип ҡарау дөрөҫөрәк булыр.

1917 йылғы Октябрь революцияһы, граждандар һуғышы, аслыҡ, "продразверстка", крәҫтиән хужалыҡтарының бөлгөнлөккә төшөүе һөҙөмтәһендә һәм башҡа емергес сәйәси һәм иҡтисади шарттарҙа йәшәүгә дусар булған башҡорт халҡы 1926 йылға иҫ киткес ауыр демографик хәлдә аяҡ баҫа: халыҡ иҫәбен алыу БАССР-ҙа башҡорттарҙың 584,8 меңгә тиклем ҡырҡа кәмеүен күрһәтә. Совет осоронда демографик процестарҙың кире яҡтары халыҡтан йәшерелеп килде, халыҡ иҫәбен алыу барышында тупланған мәғлүмәттәр, уның дөйөм һөҙөмтәләренән башҡа, дәүләт серенә тинләнеп, дөйөм ҡарамаҡҡа сығарылманы.

Совет осоронон ауыр тормош шарттарына, Бөйөк Ватан һуғышындағы оло юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, 1979 йылға тиклем башҡорт халҡының арта барыуы күҙәтелә. 1939 йылда Башҡортостанда 671,2 башҡорт теркәлһә, 1979 йылда ул 935,9 меңгә етә. Әммә 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса халҡыбыҙ 72,1 меңгә кәмеп, республикала йәшәүсе башҡорттарҙың һаны 863,8 мең генә ҡала. Унан һуң, республиканан сит төбәктәргә китеүсе башҡорттарҙың күбәйә барыуы ла бик хәүефле хәлгә әйләнә: 1926 йылда Башҡортостандан ситтә башҡорттарҙың 12,4 проценты ғына йәшәһә, 1979 йылда ул - 31,8 процент, 1989 йылда - 40,4 процент тәшкил итә. Был һандар башҡорт халҡының этник яҙмышына ниндәй хәүеф янағанын асыҡтан-асыҡ күрһәтеп тора. Ошондай кире демографик күренештәрҙе совет осоронда төбәктәрҙең тигеҙ булмаған социаль-иҡтисади шарттарҙа йәшәүе менән генә түгел, ассимиляцияға илтеүсе факторҙарҙың көслө йоғонтоһо менән дә аңлатыу раҫ. Халыҡтың этник яҡтан көсһөҙләнеүенә ул йәшәгән территорияларҙың административ бүленеш буйынса Рәсәйҙең төрлө өлкәләренә ҡарауы ла кире йоғонто яһаны. Әле лә Башҡортостандан ситтә йәшәгән йөҙәрләгән мең башҡорт кешеһе үҙ милли мөхите менән рухи-мәҙәни бәйләнеше сикләнгән хәлдә булып, теленән дә, милли асылынан да алыҫлаша барыуға дусар.

Башҡорттарҙың бер өлөшөнөң башҡа этностар тарафынан ассимиляцияланыуының башҡа объектив сәбәптәре лә бар. Мәҫәлән, башҡорт халҡының тарихын һәм мәҙәниәтен маҡсатлы рәүештә боҙоп күрһәтеүсе күп тиражлы баҫмаларҙы һәм брошюраларҙы бушлай таратыу кеүек ғәмәлдәрҙе көнбайыш һәм төньяҡ башҡорттарының этник үҙаңына баҫым яһау, тип ҡарарға кәрәк. Үҙҙәренең күршеләре - татарҙар, марийҙар, удмурттар, сыуаштар һәм башҡа халыҡтар менән уртаҡ тарихи яҙмыш кисереп, уҙған быуаттарҙа уларҙың үҙ араларына күсеп килгәндәренә ер һәм йәшәү сығанаҡтарын йомарт өләшкән ерле халыҡ бөгөн үҙе башҡа ҡәүемдәрҙән дөрөҫ аңлау, яҡшы ҡараш һәм мөнәсәбәт булыуға хаҡлы рәүештә дәғүә итә ала.

Заманында көнбайыш башҡорттары диалектының башҡорт әҙәби теленән ситләтелеүе милләтебеҙ берҙәмлеген һаҡлау юлында үтеп сыға алмаҫлыҡ кәртә булды. Был факт бөгөн дә милли консолидацияға ҡамасаулыҡ итә. Күренекле тарихсы-этнолог, академик Р. Ғ. Кузеевтың башҡорт милләтенең халыҡ-ара стандарттар буйынса ике телле булыуы хаҡындағы фекерен иҫәпкә алып, башҡорт милләтенең бөгөнгө конфигурацияһын яныса билдәләй алыу мөһим. Уның ошо фактты танырға теләмәү Башҡортостанда башҡорт милләтенең башҡа халыҡтар менән сағыштырғанда һан нисбәтенең артабан да кәмей барыуына сәбәп булып, этнос сиктәренең тарайыуына килтерәсәге тураһындағы һығымтаһы менән килешмәйенсә булмай. Милләт киләсәге өсөн үтә мөһим булған ошо проблеманың ыңғай хәл ителеүе өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләү зарур.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Аҙағы. Башы 4 - 8-се һандарҙа).**
**Гәзит вариантын Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ӘБЕЙ МЕНӘН БАБАЙҘЫҢ

## улдары тыуған, имеш...

**- Борон-борон заманда бер әбей менән бабай булған. Уларҙың бер улдары тыуған. Уға Оморҙаҡ тип исем ҡушҡандар...**

**- Апай, ә ниңә әкиәттәрҙә гел генә кешеләрҙең әбей менән бабай булғас ҡына балалары тыуа? Ҡартайғас, бала тыуамы ни ул? - тип, ҡыҫҡырып уҡый башлаған сираттағы әкиәтемде башынан уҡ бүлә бәләкәй һылыуым.**

Көтөлмәгән һорауҙан албырғап ҡалдым. Яуап табырға тип, батырҙар тураһындағы башҡа әкиәттәрҙе барлай башлайым: "Борон-борон заманда бер бабай менән әбей йәшәгән. Улар бик бай булғандар, тик балалары ғына юҡ икән. Илай-илай, Алланан бала һорағандар. Алла быларға бер ул биргән ("Яңғыҙаҡ батыр")". Бәй... Ысынлап та, батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙең күбеһендә геройҙар атаәсәһе әбей менән бабай булғас ҡына тыуа, йә булмаһа... Мәҫәлән, "Арпа батыр" әкиәтендә яңғыҙ ғына йәшәгән әбей, бер арпа бөртөгө ашап, ауырға ҡалһа, "Ҡамыр батыр", "Ҡамыр батыр менән убырлы ҡарсыҡ" кеүек әкиәттәрҙә әбей менән бабай уларҙын ҡамырҙан әүәләп ҡатыра. Ә "Аҡъеләк" әкиәтендә бер әбей менән бабай ҡара һыйырҙы һуйғанда ҡаны өй ҡыйығына сәсрәп китә лә, берҙән-бер көндө өй ҡыйығында бала илаған тауыш ишетелә. Ҡараһалар, бер ир бала ултырған була. Тағы ла... Балалары булмау сәбәпле, әбей менән бабайҙың бағымсыға мөрәжәғәт итеүе, уның ҡарттарға йомортҡа биреүе һәм бер йыл буйына ҡулдарынан төшөрмәскә ҡушыуы тураһындағы сюжеттар ҙа осрай. Аҙаҡ ошо йомортҡаны әбейгә ашарға ҡушыла, һәм уларҙың улдары тыуа... ("Тимербулат" әкиәте).

Элекке замандарҙы күҙ алдынан үткәрһәк, күп әсәләр, иртә кейәүгә сығыу сәбәпле, бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда, үҙҙәре лә бала ғына булған. Шуға күрә балаларҙың иртә өлгөрөп, үҙҙәре ғаилә ҡороп, балалар тәрбиәләгәндән һуң, 35-40 йәштәр самаһында иһә өләсәй, олатай тип иҫәпләнеүенә һис аптырарлыҡ түгел. (Бәләкәй балаға башҡорт халҡының боронғо йәмғиәт ҡоролошон ябай итеп аңлатырға инде хәҙер!) Тик ҡайһы бер эпос, әкиәттәрҙә бала табып, тәрбиәләүсе әбей менән бабайҙың аныҡ йәше лә атала: "Борон-борон заманда күрше булып Әйләр хан менән Аҡкүбәк хан йәшәгән, ти. Был ике хан, бер-берә менән дуҫ булып, һунарға сығып, бәйгеләр үткәреп, күңел асып, кәйеф-сафа ҡороп көн иткән, ти. Тик уларҙың балалары булмауҙан ғына күңелдәре китек булған, ти. Берҙән-бер көндә туҡһан йәшлек Аҡкүбәк хандың һикһән йәшлек әбейе ул тапты, ти. Унан күп тә үтмәй, тағы бер ҡыҙ тапты, ти. Аҡкүбәктең теләге ҡабул булып, күңеле теүәлләнде, ти. Бәхет Әйләр ханды ла урап үтмәне, ти. Уның һикһән йәшлек әбейе бер бите көн, бер бите ай һылыу ҡыҙ тапты, ти. Әйләр хандың шатлығының сиге булмай" ("Алпамыша" эпосы). Йә булмаһа, "Мең башлы аждаһаны еңгән егет" исемле әкиәттә бәләкәй генә ауылда йәшәгән бер бабай менән бер әбейҙең етмеш ете йәшкә еткәс кенә улдары тыуа! Ғәжәп бит!

**Шулай итеп, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, һылыуымдың сетерекле һорауына һеҙ нисек яуап бирер инегеҙ? Бигерәк тә фольклор белгестәренең фекерен белеү ҡыҙыҡлы булыр ине.**

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**

*✓ Башҡорт халҡының генетик фонды төбәктә иң көслөһө, сөнки улар үҙҙәренең ата-олаталарының, сарматтарҙың, савроматтарҙың, ҡыпсаҡтарҙың һәм башҡаларҙың генофондын үҙҙәрендә берләштергән.*

# Һөлдәләрҙең теле тарихҡа тел

(Башы 1-се биттә).

## Баш һөйәге табылды…

Тарих фәндәре кандидаты, палеолит дәүерен өйрәнеүсе археолог Вячеслав Котов ун биш йылдан ашыу көньяҡ Уралдағы мәмерйәләрҙе тикшерә. Уның 40-100 мең йыл элек йәшәгән кешеләрҙең хеҙмәт һәм һунар ҡоралдарын тапҡаны бар. Былтыр ул Шүлгәнташ мәмерйәһендә тәүге тапҡыр әҙәм баш һөйәгенә юлыҡты. Ғалим тапҡан баш һөйәген быға тиклем 2008 йылда ғалимә О.Я. Червяцова күргән булған, тик иғтибарға ғына алмаған. В.Г. Котов баш һөйәген Өфөгә алып ҡайтып, миңә күрһәтте. Ул тәүҙән үк хәҙерге заманда йәшәгән кешенең баш һөйәгенә тартым булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итте. Тикшереүҙәр шуны күрһәтте: баш һөйәге һуңғы ике мең йыл эсендә йәшәгән 17-19 йәшлек ҡыҙ баланыҡы. Маңлайының бер ситендә яра эҙе лә бар. Был яра ҡыҙҙың төрлө сәбәптәр арҡаһында үлтерелеүе йә ниндәйҙер йола менән ҡорбан ителеүе хаҡында һөйләй. Баш һөйәге Бөрйән төбәгендә борон-борондан йәшәгән кешеләрҙең Урал тибына-расаһына ҡарай. Был тип башҡорт халҡы араһында иң боронғо антропологик тип иҫәпләнә. Урал тибы бигерәк тә башҡорт ҡыҙ-ҡатындары араһында киң таралған. Был факт ҡыҙҙың ситтән килгән ҡәбилә йә ырыу вәкиле булыуын тулыһынса инҡар итә. Әле минең уҡыусым, антрополог А. Нечвалода менән баш һөйәгенең график формаһын эшләп, гипстан скульптураһын әүәләү өҫтөндәбеҙ. Әҙер булғас, беҙ уны матбуғатҡа бирә алырбыҙ, тип уйлайым.

Әлегә шуны ғына әйтеп булалыр: был ҡыҙ мәмерйә эсендә йәшәмәгән, сөнки унда ул заманға бәйле торлаҡ эҙҙәре юҡ. Шүлгәнташ стенаһындағы һүрәттәрҙең йәше лә ҡыҙ йәшәгән дәүергә тура килмәй. Һүрәттәр бынан 14-15 мең йыл элек төшөрөлгән. Беҙҙә ул дәүергә ҡараған антропологик материал бөтөнләй юҡ. Иң боронғоһо - Дәүләкән районы территорияһында Отто Николаевич Бадер тапҡан әҙәм һөлдәһе. Һөлдә усаҡ яҡҡан ерҙең аҫтында табылды. Ул мезолит һәм неолит дәүере араһында йәшәгән кешенең һөлдәһе, йәғни бынан 6-7 мең элекке дәүер. Шуныһы характерлы: Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр Франция мәмерйәләрендәге һүрәттәргә ныҡ оҡшаған. Икенсенән, Дәүләкәндә табылған һөлдәгә ҡарап, көньяҡ сығанаҡты билдәләп була. Былар барыһы ла Уралдың төп халҡы булған башҡорттарҙың этногенез мәсьәләһенең ике тарафына бәйле үҙенсәлеген билдәләй. Башҡорттарҙың бер үк ваҡытта европеоид та, азиат та булыуы, әлбиттә, уларҙың барлыҡҡа килеүендәге төрлө тарафтар үҙенсәлеге берҙәмлеге хаҡында ла һөйләй. Францияләғы һәм Шүлгәнташтағы мәмерйәләрҙәге һүрәттәрҙе бер үк кешеләр төшөргән, тик ошоға бәйле тарихи ваҡиғалар ниндәй ағыш алған? Әллә мезолит дәүере һуңында Уралтауҙа боҙлоҡ ирей башлағас, көнбайыш кешеләре был яҡҡа килеп, кире киткәнме, йә булмаһа, киреһенсә булғанмы? Был мәсьәлә тарихсылар өсөн асыҡ килеш ҡала.

## Тәбиғи һайланмыш ҡануны

Боронғо Урал тибы күберәген беҙҙең ҡыҙ-ҡатындарҙа һаҡланып ҡалған. Популяцион генетика күҙлегенән ҡарағанда, беҙҙең ҡыҙ-ҡатындар милләттең иң боронғо генетик мәғлүмәтен үҙендә йөрөтә. Милли сифаттар ҙа балаларға ҡыҙ-ҡатын аша күсә. Көньяҡ Урал климатында яралған һәм шуға ҡулайлашҡан был мәғлүмәтте йөрөтөүсе ҡыҙ-ҡатындарҙың генетик үҙенсәлеге улдарына һәм ҡыҙҙарына тыумыштан уҡ күсә. Башҡорт ирҙәренең бер өлөшө лә Урал тибына ҡарай, әммә улар бик аҙ ғына. Урал тибына ҡараусы ҡыҙ-ҡатындарҙың, ирҙәрҙең сәләмәтлеге лә ныҡ була. Улар ауырыуҙарға бирешеп бармай һәм оҙағыраҡ йәшәй. Төрлө көтөлмәгән тәбиғи һәләкәттәр, катаклизмдар, эпидемиялар ваҡытында, аслыҡ кисергәндә күбеһенсә ирҙәрҙең үлеүе лә ошо фактҡа бәйле. Хәҙерге заманда ирҙәр араһында тәбиғи һайланмыш күренеше бара: тәбиғәт уларҙың көсһөҙөн юҡ итеп, көслөләрен генә ҡалдыра. Хәл аңлашыла - балалар көслөләрҙән генә тыуырға тейеш.

Тәбиғәттең үҙендә, хайуандар, йәнлектәр араһында тәбиғи һайланмыш ҡануны тулыһынса тиерлек үтәлә. Әйтәйек, ҡасыу мәле еткән һыйыр, хужаһынан, көтөүҙән ҡасып китеп булһа ла, көслө үгеҙ янына бара. Йә булмаһа, йылҡы өйөрөн генә алайыҡ. Унда бер нисә айғыр өйөр айғыры булырға дәғүә итеп алыша. Был алышта иң көслөһө еңеп сыға һәм бейәләр уның ихтыярына буйһона башлай. Ситкә тибелгән айғырҙы көйҙөрәләр ҙә, ҡәҙимге ат итеп, егә-менә башлайҙар. Йә булмаһа, бал ҡорто иләүендә инә ҡорттоң нисек итеп аталаныуы миҫалын ғына алайыҡ. Мөҙҙәте еткәс, инә ҡорт оянан осоп сыға һәм бик юғарыға, һауаға күтәрелеп, шәп тиҙлектә оса. Уның артынан ҡыуа төшкән ата ҡорттарҙың иң көслөһө, иң ҡеүәтлеһе генә уны ҡыуып етә һәм аталандыра, үҙе шунда уҡ һәләк тә була. Иғтибар итегеҙ: тәбиғәт уны тағы ла тоҡом ҡалдырыу хоҡуғынан мәхрүм иткән, йәғни был юл менән яҡын ҡандарҙың ҡатнашыу ихтималлығын юҡҡа сығарған. Ҡалған ата ҡорттарҙың йәғни көсһөҙҙәрҙең дә иләүгә әйләнеп ҡайтырға хоҡуғы юҡ, ҡайтҡан хәлдә лә уларҙы кире индермәйҙәр. Тәбиғәттә һайланмыш ҡануны бына шулай бик аяуһыҙ, әммә ғәҙел итеп ҡуйылған. Кешелектә лә матриархат дәүерендә ошоға оҡшаш йолалар булған, йәғни тыуасаҡ балаһының атаһын ҡыҙ үҙе һайлап алған. Батшалар, хандарҙың ҡыҙҙарына кейәүҙәр һайлағанда ла уларҙы төрлөсө көс һынаштырып ҡарау йолаһы ла "бала көслө атанан тыуырға тейеш", тигән принципҡа таянғаны көн кеүек асыҡ.

Патриархат дәүерендә инде төрлө ырыуҙарҙан бер нисә ҡатын алған ир был юл менән үҙенең ырыуын көсәйткән. Революцияға тиклем башҡорттарҙа ла өс ҡатын алыу рөхсәт ителгән. Өстән артыҡ ҡатынға өйләнеү инде ир-аттың хәленә ҡарап башҡарылған. Беҙҙең халыҡта киленде алыҫтан төшөүенә ҙур әһәмиәт биргәндәр, алыҫтаныраҡ төшкәне ҡәҙерлерәк тә булған. Был да юҡҡа ғына түгел. Аралар алыҫайған һайын ҡан яҡынлығы ла алыҫлаша.

## Ырыуҙар йәғни күп төрлөлөк феномены

Һәр бер халыҡтың генетик мәғлүмәтен ҡыҙ-ҡатындар йөрөтһә лә, генетик популяция ирҙәр арҡаһында ҡеүәт йыя. Шул уҡ ваҡытта ирҙәр аша күскән иң көслө үҙенсәлекте, генетик мәғлүмәтте ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәрендә алып ҡала. Тап ошо рәүешле көсәйеү арҡаһында беҙҙең башҡорт халҡында биш антропологик тип формалашҡан. Быны 1967 йылда Мәскәү антропологы Мария Степановна Акимова иҫбат итеп: "Башҡорт халҡының генетик фонды төбәктә иң көслөһө, сөнки улар үҙҙәренең ата-олаталарының, сарматтарҙың, савроматтарҙың, уғыҙҙарҙың, ҡыпсаҡтарҙың һәм башҡаларҙың генофондын үҙҙәрендә берләштергән", - тип белдерҙе. Беҙҙең халыҡтың милләт булараҡ көсө лә тап ошонда, сөнки төрлө климат шарттарында йәшәгән төрлө халыҡтарҙың, ҡәбиләләрҙең генетик үҙенсәлектәре беҙҙең халыҡтың генофондын тәшкил итә. Ундай үҙенсәлек төрҙәре беҙҙең ирҙәрҙә йәшәй, ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙа иһә асылда ике генә - Урал һәм боронғо Урта Азия тибы һаҡлана. Ә ирҙәребеҙҙә иһә, ошо ике типтан тыш, көньяҡ Себер, понтик, Алтай, Каспий, Алғы Азия һәм башҡа типтар йыш осрай. Типтарҙың төрлө-төрлө булыуы тоҡомдо көсәйтә, генофондты арттыра.

Аҙаҡҡы өс йөҙ йыл эсендә, бигерәк тә башҡорттарҙың ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, төркмән халыҡтары менән элеккесә киң һәм даими аралашыу мөмкинлеге юҡҡа сыҡҡас, күберәген этник берәмек эсендә генә ҡан аралашыуы күҙәтелә. Шулай ҙа боронғо сарматтар, савроматтар йәшәгән ерҙәрҙә йәшәүсе башҡорттар һаман да иң боронғо генетик кодты йөрөтөүселәр булып иҫәпләнә. Шул уҡ бөрйән, үҫәргән, түңгәүер ырыуҙары башҡорттары көньяҡ Европа расаһының понтик тибына ҡарай. Шулай уҡ ҡыпсаҡтар менән тамъяндар ҙа күберәген европеоид расаһына ҡарай. Көньяҡ Себер тибы, йәғни монголоид расалылар беҙҙең халыҡҡа Алтын Урҙа заманында килеп ҡушылған.

Беҙҙең милләттә ырыуҙарҙың күплеге һәм уларҙың донъяның дүрт тарафы менән бәйле булыуы башҡорттоң этник тотороҡлоғон барлыҡҡа килтереүсе фактор ҙа булып тора. Башҡорт милләте донъялағы бик күп халыҡтарҙың, ҡәбиләләрҙең иң көслө һәм күркәм сифаттарын үҙендә берләштерә алған. Беҙ үҙебеҙ генә ошо феноменды баһалап бөтөрмәйбеҙ һәм милләтебеҙҙең ырыу-ара никах потенциалын файҙаланыу урынына, милләт-ара никахтарға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Милләт-ара никахтар иһә, һәр осраҡта ла беҙҙең файҙаға түгел, сөнки милләт-ара никахлы ғаиләләрҙә ҡала шарттарында башҡорт позицияһы көслө түгел. Беҙҙең милләттең милләт эсендәге ырыу-ара никах потенциалы милләтебеҙгә яңы һулыш бирер ине. Бер типҡа ҡараған халыҡтар ҙа бар, уларҙа беҙҙеке кеүек никах потенциалы бөтөнләй юҡ, шуға ла, бигерәк тә себерҙәге аҙ һанлы халыҡтар араһында, яҡын туғандарҙың өйләнешеүе арҡаһында уларҙың кәгезләнеүе күҙәтелә.

## Антропология нимәгә һәләтле?

Хәҙерге Башҡортостандың административ сиктәре тарихи факторға ҡарап билдәләнмәгән. Бында шундай бер үҙенсәлек хаҡында әйтеп китергә кәрәк: тарихи Башҡортостан ерендә хәҙерге Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәгән башҡорттарҙың урыҫ халҡы менән сиктәш йә күршеләш булғандары үҙ телен һәм милли рухын һаҡлап ҡала ала, ә Татарстанға күрше һәм Ҡаҙан йоғонтоһонда булғандары яйлап үҙ милли асылынан ситләштерелә. Төрлө сәбәптәр арҡаһында кешенең теле, менталитеты, ғөрөф-ғәҙәттәре, милли аңы үҙгәрергә мөмкин, тик бына антропологик күрһәткестәре үҙгәрешһеҙ ҡала. Ошо факторҙарға ҡарап, антропология фәне, бер ниндәй яҙма сығанаҡтарға таянмайынса ла, ҡайһы төбәктә ниндәй халыҡ вәкилдәре йәшәгәнен аныҡ билдәләй ала. Минең әле ике аспирантым Минзәлә башҡорттары проблемаһы менән шөғөлләнә. Киләсәктә, Алла бойорһа, улар үткәргән ғилми тикшеренеүҙәр аныҡ һөҙөмтәләрен күрһәтәсәк. Уларға ҡарап, саралар проектын да төҙөргә була. Беҙгә, ғалимдарға, боронғо башҡорттарға ҡараған понтик йә Урал тибындағы башҡорттарҙың үҙ асылдарынан ситтә йәшәүен һәр яҡлап аңлатыу, үҙ асылдарына табан юл башлатыу фарыз. Беҙ башҡа милләттәр өлөшөнә дәғүә итмәйбеҙ, бары милли асылын юғалтҡан халҡыбыҙҙың ҙур бер өлөшөнә үҙ тарихын аңлатырға ғына теләйбеҙ. Ысынлап та, баш һөйәгенең теле булмай, әммә күп кенә ғилми асыштар яһарлыҡ, сер ишектәрен асырлыҡ тел асҡыстары була.

Әйтергә кәрәк, көнсығыш Татарстан райондарында башҡорт милләтенең боронғо тоҡомдары Минзәлә башҡорттары исеме менән һаман булһа ла йәшәй. Уларҙы үҙ милли асылына ҡайтарып булмаған хәлдә лә, беҙ был тарихи факттан баш тарта алмайбыҙ. Яңыраҡ билдәле тарихсы Әнүәр Әсфәндийәровтың Минзәлә башҡорттары хаҡында бик төплө һәм кәрәкле китабы баҫылып сыҡты. Унда көнбайыш башҡорттары тураһында етди һәм тулы тарихи мәғлүмәт тупланған.

90-сы йылдар башында Палдиски ҡалаһы портында ремонт эштәре барған саҡта төрлө йәштәрҙәге ике кешенең һөлдәһе табылған. Уларҙың аяҡ-ҡулдарында бығау эҙҙәре һаҡланған һәм һөлдәләрҙең Салауат Юлаев менән атаһы Юлай Аҙналиндыҡы булыу ихтималлығы ла әйтелде. Был хаҡта Салауатты өйрәнеүсе ғалимә Инга Михайловна Гвоздиковаға Палдискиҙа хеҙмәт иткән 1-се ранг капитаны әйткән. Ул саҡта Советтар Союзы тарҡалып, элекке союздаш республикаларҙа сыуалыш барған заман ине. Беҙгә был хаҡта еткерҙеләр, миңә лә әйттеләр, тик эстондар беҙҙе унда индерергә теләмәне. Ул һөлдәләрҙе ҡайҙа иткәндәрҙер, берәү ҙә белмәй. Әгәр ҙә ул һөйәктәр табылһа, уның тибын, йәшен билдәләп, М.М. Герасимов ысулы менән һындарын да, йөҙҙәрен дә асыҡларға мөмкин булыр ине. Быға тиклем бөйөк шағирыбыҙ Шәйехзада Бабичтың баш һөйәген табып, шундай уҡ эштәрҙе башҡарып, уның, ысынлап та, Бабичтыҡы икәнлеген иҫбат иттек бит инде. Был йәһәттән антропологияның мөмкинлектәре бик күп.

## "Башҡорт" атамаһы ҡайҙан?

XX быуат башында Сергей Иванович Руденко башҡорттар араһында ғилми тикшеренеүҙәр үткәреп йөрөгән. Шул ваҡыттан ул төшөргән бик күп фотоһүрәттәр һаҡланып ҡалған. Ғилми күҙәтеүҙәрендә ғалим башҡорттар араһында төрлө антропологик типтар билдәләп үтә һәм был типтарҙы ул фотолар ярҙамында дәлилләй. Шул фотоларҙы ҡарап, ул саҡтағы башҡорттарҙың бөгөнгөләре менән антропологик яҡтан айырылмауы асыҡ беленә. Айырма шунда ғына: йөҙ йыл элек йәшәгән башҡорттар кәүҙәгә бик ҙур, физик яҡтан һау һәм ғәйрәтле булған. Боронғо һө-

***✓ Беҙгә, ғалимдарға, боронғо башҡорттарға ҡараған понтик йә Урал тибындағы башҡорттарҙың үҙ асылдарынан ситтә йәшәүен һәр яҡлап аңлатыу, үҙ асылдарына табан юл башлатыу фарыз.***

йәктәрҙе өйрәнеү ҙә ошоно раҫлай. Былдай айырмалыҡтарҙың төп сәбәбе, әлбиттә, бар кешелек үҫешенә хас булғанса, боронғо башҡорттарҙың тәбиғәткә яҡын тороуында, экологик яҡтан таҙа тәбиғәт шарттарында үҫеп, меңәр йылдар буйы күнегелгән сифатлы милли ризыҡ менән туҡланыуында.

Сарматтар, савроматтар дәүерендә Дәүҙәр (беҙҙеңсә - алпамышалар) ырыуы йәшәгән. Дәүҙәр, йәғни Дағтар күбеһенсә хәҙерге Төркмәнстанда, Арал диңгеҙе буйында һәм көньяҡ Уралда көн күргән. Уларҙың йылғаһы Яйыҡ (Дәү-ыҡ) булған. Дәүҙәр антропологик яҡтан башҡорттар кеүек каспий, понда мәйет менән мөмкин тиклем ерҙе бысратмаҫҡа тырышыуҙы аңларға була. Ислам динендә былар юҡ, унда кәфенгә уралған мәйетте ләхет эсендәге ергә шул килеш ҡиблаға ҡаратып һалалар.

Ләхет алыу башҡорттарҙа Ислам дине килгәнгә тиклем үк булған. Бында ла шулай уҡ ерҙе, тупраҡты мәйет ҡалдыҡтары менән бысратмау күҙ уңында тотолған. Боронғонан ҡалған йола буйынса башҡорттарҙа ҡәбер өҫтөн таш йә ағас менән бурау әле һаман да һаҡланып ҡалған. Был йола бигерәк тә Пермь өлкәһендә йәшәүсе ғәйнә ырыуы башҡорттарында һәм көньяҡ (Бөрйән, Йылайыр, ошондай ерләү традицияһына бәйле "Ҡарға туйы", "Ҡарға бутҡаһы" байрамдары үткәреү башҡорттарҙа әле лә һаҡланып ҡалған. Әле ул йола буйынса ер ҡарҙан әрселгәс, тау итәктәренә сығып бутҡа бешереп ашайҙар ҙа, ашауҙан ҡалған бутҡаны шундағы асыҡ урындарға ҡалдырып китәләр, ағас ботаҡтарына төрлө төҫтәге сепрәк ярпылары тағалар. Урынлы һорау тыуа: ни өсөн был байрам "Ҡарға туйы" тип атала һуң? Саҡтармәсәғуттәр заманында көньяҡ Уралда емтек ашаусы ҡоштарҙың батшаһы гриф-ҡарғастар бик күпләп йәшәгән һәм уларҙы бура эсендәге мәйетте ашарға саҡырыуҙы ул замандағы беҙҙең

Боронғоса ерләүгә бәйле һүҙҙәр беҙҙең телдә лә һаҡланып ҡалған. Донъялыҡ менән бәхилләшер алдынан иң яҡын кешеһенә ризалыҡты әле лә шундай итеп биреүселәр бар: "Мин һиңә ризалығымды бирәм. Һөйәгемә лә һин етерһең инде..." Бында, әлбиттә, ошондай зороастризм дәүеренән килгән ерләү йолаһына бәйле аңлатма ята. Быны икенсе төрлө итеп әйткәндә: "Ҡарға туйы"мды һин үткәрәһең!" - тип тә аңларға була бит. Былар барыһы ла беҙҙең халыҡтың тарихының боронғолоғо тураһында һөйләй, сөнки зороастризм дәүеренә 3-4 мең йыл үткән.

Әлеге йола буйынса ла мәйет йыуыусыларҙы "һөйәккә инеүселәр" тип атайҙар. Ҡоҙғон ҡысҡырыуын хәүефкә, кемдеңдер үлеменә юрау ҙа юҡҡа түгел. Ошоларҙан сығып, ҡарғауҙың, ҡарғыштың, йәғни кешегә үлем теләүҙең нисек барлыҡҡа килеүен аңлатырға була.

### Дин - яулап алыу сәйәсәте

Һәр бер диндең теге йәки был халыҡҡа таралыуы, үтеп инеүе иң тәүҙә сәйәси маҡсаттарҙан сығып башҡарылғаны ла мәғлүм. Күп халыҡтар һуңғы диндәрҙе үҙҙәре уйлап сығармаған, уларҙы ерҙәрен, илдәрен баҫып алырға теләүселәр идеологик ҡорал итеп файҙаланып, башҡаларға көслөк менән индергән. Был йәһәттән донъя тарихы

Сыңғыҙ хан тоҡомдары ул заманда ҡайһы халыҡтарҙы үҙенә нығыраҡ буйһондора алған, Ислам дине лә уларға нығыраҡ һеңеп ҡалған. Минең уйымса, башҡорттар хатта Алтын Урҙа заманында Мөйтән бей башланғысы менән 1219 йылдан бирле Сыңғыҙ хандың үҙе менән килешеү төҙөй алған. Башҡорт иле шунан бирле Алтын Урҙа дәүләтендә вассаллыҡ шарттарында йәшәгән. Тарихтан белеүебеҙсә, Сыңғыҙ хан хатта яһаҡ түләү, ғәскәренә яугирҙәр ебәреп тороу шарты менән килешеү төҙөргә мәжбүр булған. Башҡорттар был осорҙа ерен, кейемдәрен, йолаларын саф көйө һаҡлап ҡала алған. Шуға күрә лә, Ислам дине лә беҙгә ул заманда ныҡлап ҡағылмаған. Ислам дине бары Рәсәй батшалығы осоронда ғына беҙгә көслөк менән индерелә башлаған. Ауылдарҙа мәсеттәр һалынған, имамдар, хәлфәләр ебәрелгән. Беҙҙең халыҡ боронғо - тәбиғи динен үҙ асылында һаҡлап ҡала алған, милли үҙенсәлегебеҙ ҙә шуға бәйле. Ислам динен мин бик хуплайым, унын милләтте ойоштороу, кешене хаҡ йәшәргә өйрәтеү асылын танығым. Шул уҡ ваҡытта халҡыбыҙ һаман да үҙенең тәбиғи асылына тоғролоғон һаҡлай икән, бында Тәүдинебеҙҙең дә ролен танырға кәрәк. Был - булмышыбыҙҙағы боронғолоғобоҙҙо һаҡлай, яҡлай белеүҙән дә килә.

Минеңсә, беҙҙең тел Исламға тиклем хәҙерге телдән айырмалы булған. Әммә Алтын Урҙа дәүләтендә, сығатай теленә оҡшағаныраҡ уртаҡ төрки теле дәүләт теле иҫәпләнгән. Ваҡыт үтә килә, телебеҙ Ислам дине йоғонтоһонда үҙгәрештәр кисергән. Кемдәр Исламға бирелмәгән, Алтын Урҙа дәүләте осоронда улар тәүтелдәрен дә һаҡлай алған. Мәҫәлән, сыуаштарҙы ғына алайыҡ. Улар бөгөн дә боронғо төрки телендә һөйләшә. Шулай уҡ Ислам динен алмаған яҡуттар, алтайҙар боронғо төрки телен һаҡлаған. Ә инде башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, үзбәк һәм башҡа халыҡтарҙың уртаҡ төрки теленең диалекттарында һөйләшеүе Ислам дине йоғонтоһонан килә.

# БУЛМАҺА ЛА...
## асҡысы улар

тик тибына ҡараған. Һәр бер халыҡтың боронғолоғон понтик тибы күрһәтә. Минең фаразым буйынса, беҙҙең милләттең атамаһы төрки яңғырашҡа тиклем "башгурд" булғандыр. Фарсы телендә "бача" бала, тоҡом тигәнде аңлатһа, "гурд" баһадир, тип тәржемә ителә. Әгәр ошо ике атаманы ҡушып әйтһәк, "башгурд" "баһадирҙар тоҡомо" тигән төшөнсәне аңлата булып сыға. Башҡорт - баһадирҙар тоҡомо булғас, тимәк, улар Дәүҙәр тоҡомо ла. Дәүҙәрҙе Дағтар-Дактар тип тә атағандар, тинек. Шулай булғас, "иштәк" атамаһы беҙҙең милләттең боронғо атамаһы булып сыға. "Иштәк", тимәк, "Дағтарға иш" йәғни Дәүҙәрҙең, Дағтарҙың тоҡомо. Тимәк, бер үк боронғо дәүерҙә (сарматтар заманы) башҡорттарҙың бер йөкмәткеле ике атамаһы "иштәк" менән "башгурд" төрки дәүергә тиклем бергә йөрөгән.

Баймаҡ, Ейәнсура, Әбйәлил, Күгәрсен һәм башҡа районлар) башҡорттарҙа һаҡланған. Ләхет алыу, ҡәбер өҫтөн бүрәнә менән бурау боронғо сарматтарҙа ла булған. Зороастризм традициялары буйынса мәйетте шул килеш ергә күмергә бөтөнләй ярамаған. Сөнки ул саҡта ер, һыу, ут, һауа иң изге төшөнсәләр һаналып, уларҙы бысратыу оло гонаһ һаналған. Тәүге осорҙа мәйетте яндырыу йолаһы булған, һуңынан үлгән кешенең мәйетен ҡая-тау, ағас ботаҡтарына һалып, йыртҡыс ҡоштар, ваҡ йәнлектәр ашап бөтөүен көткәндәр. Ҡәбер өҫтөндәге бүрәнә бура ла шундай һәндерә ролен үтәгән. Буралар һаман да шул традиция нигеҙендә яһала, йәғни бүрәнәләрҙең араһында ҡош-ҡорт, сысҡан-ҡомаҡтар, башҡа йәнлектәр инерлек ярыҡтар ҡалдырыла. Буралар бүре, төлкө һымаҡ йыртҡыс хайуандар мәйетте ситкә алып китмәһен өсөн дә ҡуйылған.

ата-бабалар "Ҡарғас туйы" тип атаған да инде. Гриф-ҡарғастар, биологтар әйтеүенсә, көньяҡ Башҡортостанда әле осрай. Бөгөнгө беҙ үткәргән "Ҡарға туйы", "Ҡарға бутҡаһы" байрамдары тап шул традицияның дауамы ғына. Әлбиттә, байрамдың нисек барлыҡҡа килеүе сәбәптәре, Ислам дине таралғас, бөтөнләй онотолған, уны шуға күрә лә яҙ килеүгә, ҡоштарға һыйланыу туйы үткәреүгә бәйләп кенә аңлаталар. Минең уй-



ымса, элек ҡыш үлгән кешеләрҙең дә мәйетен ерләмәгәндәрҙер, уларҙы яҙға сыҡҡансы тундырып һаҡлап, ҡоштарға, йәнлектәргә ашарға биргәндәрҙер. "Ҡарға туйы"ның яҙ үткәрелеүе лә был осраҡта аңлашыла төшә. Икенсенән, "ҡарға", тигәндән, хәҙерге башҡорттарҙың бер өлөшө шундай уҡ емтек ашаусы ҡоҙғондо ла ниңәлер ҡарға тип атай. Бында ла уйланырға урын бар.

***Мөҙҙәте еткәс, инә ҡорт оянан осоп сыға һәм бик юғарыға, һауаға күтәрелеп, шәп тиҙлектә оса. Унын артынан ҡыуа төшкән ата ҡорттарҙың иң көслөһө, иң ҡеүәтлеһе генә уны ҡыуып етә һәм аталандыра, үҙе шунда уҡ һәләк тә була. Иғтибар итегеҙ: тәбиғәт уны тағы ла тоҡом ҡалдырыу хоҡуғынан мәхрүм иткән, йәғни был юл менән яҡын ҡандарҙың ҡатнашыу ихтималлығын юҡҡа сығарған. Ҡалған ата ҡорттарҙың йәғни көсһөҙҙәрҙең дә иләүгә әйләнеп ҡайтырға хоҡуғы юҡ, ҡайтҡан хәлдә лә уларҙы кире индермәйҙәр. Тәбиғәттә һайланмыш ҡануны бына шулай бик аяуһыҙ, әммә ғәҙел итеп ҡуйылған. Кешелектә лә матриархат дәүерендә ошоға оҡшаш йолалар булған, йәғни тыуасаҡ балаһының атаһын ҡыҙ үҙе һайлап алған. Батшалар, хандарҙың ҡыҙҙарына кейәүҙәр һайлағанда ла уларҙы төрлөсө көс һынаштырып ҡарау йолаһы ла "бала көслө атанан тыуырға тейеш", тигән принципҡа таянғаны көн кеүек асыҡ.***

### Ҡайһы бер йолалар, йәғни "Ҡарға туйы" тураһында

Төрлө халыҡтарҙа мәйетте ерләү төрлөсә башҡарыла. Беҙҙә ләхет алыу бар. Пермь башҡорттарындағы ерләү йолаһын тикшереүҙәр мәғлүмәттәре буйынса, мәҫәлән, ләхет таҡтаһы өҫтөнә артыш, мәйет аҫтына туйыҙ йә аҡбур һалғандар. Бынмәйеттән тороп ҡалған һөйәктәрҙе генә йыуып, таҙартып, аҙаҡтан шул урында ҡәбер ҡаҙып, ләхет эсенә һалғандар.

Ә инде бура эсендә ятҡан мәйеткә ҡоҙғон, ҡарғас кеүек емтек ашаусы ҡоштарҙы ылыҡтырыу өсөн шул тирәләге ағас ботаҡтарына, махсус ҡоролмаларға ҡан, мәйет төҫөндәге сепрәктәр элер булғандар, бура өҫтөнә ит киҫәктәре лә һалғандар. Зороастризм осорондағы бик күп тәре походтары булғанына шаһит.

Беҙҙең халыҡ тәбиғәткә яҡын торған. Шуға күрә һәр бер әйберҙең йәне бар тип уйлап, шуға табыныр булған. Динен дә тәбиғәткә ҡарата булған мөнәсәбәте йүнәлешендә үҙе уйлап сығарған. Зороастризм һундар килеүе менән юҡҡа сыҡһа ла, беҙҙең йолаларҙа, хатта Ислам дине йолаларында һаман да һаҡланып килә ул. Ислам динендәге башҡа мосолман өммәттәре араһында беҙҙең үҙенсәлекле булыуыбыҙ ҙа ана шул йолаларҙың һаҡланып ҡалыуына бәйле. Ислам дине Сыңғыҙ хандың ейәндәре Үзбәк һәм Йәнебәк хандар заманында ғына башҡорттар араһында әүҙем тарала башлаған. Ул иң башта беҙҙе яулап алыу сәйәсәте генә булған, минеңсә. Бер телдә һөйләшкән, бер дин тотҡан халыҡтарҙы бер ҡул аҫтында тотоу булған уларҙың төп маҡсаты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғалимдың Шүлгәнташта табылған бер баш һөйәгенә ҡарап башланған әңгәмә юҫығы ана ниндәй төшөнсә-күренештәр хаҡында мәғлүмәттәр килтереүгә, төрлө ҡыҙыҡлы һығымталар яһауға алып килде. Былар барыһы ла, "Урал" йырында әйтелгәнсә, бер хәҡиҡәтте раҫлай:**

**Ай, Уралым, һинән ҡырҡып алһам**

**Ат ҡыуарҙай яңғыҙ ҙа талдарың,**

**Тамып та ғына ҡала ҡырҡҡан саҡта**

**Яуҙа үлгән батырҙар ҡандары...**

**Эйе, тыуған еребеҙ - Уралтауыбыҙ халҡыбыҙҙың ҡаны, данлыҡлы тарихы менән һуғарылған. Күпме тарих биттәре әле асылмаған, күпме тарихыбыҙ әле һөйләнелмәгән, йәш быуындың аңына барып етмәгән, күңеленә һеңдерелмәгән, йөрәктәрен елкендермәгән...**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

***✓ Туйҙан һуң миңә әллә нимә булды. Ағайымдарға барам, көноҙоно ситтән генә еңгәмә һоҡланып ҡарап ултырам. Ҡарашымды айырып ала алмайым.***





Рәйлә САБИТОВА

# Төҫө барҙан төңөлмә

(Хикәйә)

"Ниңә ошо үҙе бай, үҙе дәрәжәле ирҙәр өҫтәүенә төҫкә лә сибәр була икән?" - тип, кемдеңдер күҙ ҡамаштырғыс итеп һүрәтләнгән тормошонан өҙөк-тәтек мәлдәр тупланған сираттағы ялтыр журналға көнләшеп тә, һоҡланып та текәлдем.

- Нимә тиһең? - Алғы яҡта эш менән мәшғүл еңгәмдең ҡолағы ҡарп иткән.

- Бынауыны әйтәм, үҙе фирма директоры, үҙе бай, нимәгә инде уға, етмәһә, ошо тиклем сибәрлек, ә?

- Төҫө барҙан төңөлмә, тигән боронғолар, ҡана, күрәйем әле... - еңгәм ҡулын алъяпҡыһына арлы-бирле генә һөртөп, журналға йәбеште.

Сәйнүктең даҙырҙап ҡайнап сыҡҡанын ишетеп, түрбашҡа ыңғайланым. Еңгәмдең йыуа башлаған һауыт-һабаһын сайҡап түңкәргәс, икмәк һауытына күҙ һалдым. Һәр ваҡыттағыса, буп- буш. Ҡыҙыҡ ҡына инде ошо еңгәм! Ҡырылмаһа-ҡырҡ яҡта эше ҡырылып ятһын, йә берәй китап-фәләнгә, йә берәй ҡул эшенә мауығып, бар донъяһын онота. Өйҙөң йыйнаҡлығына бик иҫе китеп бармай, төшкө ашты ла ваҡытына өлгөрткәне бик һирәк. Ҡиәфәте лә үҙе генә белгән тәртипкә бойһона: бер ҡараһаң, кәүҙәһенә кипсәлеп кенә торған кейемдә, сәсендә - прическа, икенсе ҡараһаң, һәпрәнең-һәпрәһе - тубығы һәленгән трико, өҫтөндә ағайҙың төҫө бөткән футболкаһы һәм тырым-тырағай ялбыраған сәс...

"Ялҡау килен" тип йөрөтөр ине өләсәй уны күҙ артында. Хәйер, киленен ул баштан уҡ яратманы. Һоратырға барып ҡайтҡас, малайын өйләндерә һалырға, тигән дәрте буйтым кәмегәйне. Мин ул саҡта мәктәптә алтыламы-етеләме уҡып йөрөгән бала, уның бер туҡтауһыҙ уфылдағанының сәбәбен аңлап та бөтмәнем. Өләсәй ниңә улай ризаһыҙ ғына йөрөй икән, тиеүемә әсәйем, ғәҙәтенсә, ҡырыҫ ҡына: "Өләсәйеңдең ҡасан берәй нәмәгә ҡәнәғәт булғаны бар?" - тип кенә ҡуйҙы. - Мин килен булып төшкәндә лә ҡашы-күҙе емерек ине..."

Әсәйем йәш сағында ҡәйнә йортонда нисек ыҙа сиккәнен һөйләй башлаһа, әкиәт кеүек тыңлайым. Әлләсе, беҙҙе, ейәндәрен, арҡанан тапап-һөйөп торған өләсәйҙе "яуыз ҡәйнә" ролендә һис күҙ алдына килтереп булмай. Әсәйемә лә килен дә килен тип өлтөрәп торасы. Ниндәй мәшәҡәт булһа ла, иң тәүҙә әсәйемә йүгереп килә, иң беренсе уға кәңәшә, ярҙам кәрәкһә, уға таяна, ҡунаҡ-төшөмгә әйтмәй ҡалмай. Туй тигән оло-ҡара мәшәҡәт сығырға торғанда бигерәк тә әйләнгән һайын килеп етеп, хәбәрен еткереп тора. Хәйер, еткереп түгел инде, уның һөмһөрө ҡойолғанын күреп-аңдып торған әсәйем өләсәйемдә ауыҙы асылмаҫ борон көйләү-сөйләү яғын ҡарай. Хәбәрҙе әллә ҡайҙан, ауыл осондағы Мәхмүт малайының, эсеп, тракторы менән күперҙән осҡан, тигән берәй төрлө ваҡиғанан башлай ҙа, егет-еләнде сәпсим эсергә өйрәнеп, аҙып-туҙып өлгөрмәҫ борон өйләндергән хәйерле инде ул, тигән фекергә әйләндереп килтереп еткереп ҡуя. Сәйҙе шөпөрләтеп эсеп, өндәшмәй генә тыңлаған Гөлбаҙыян өләсәйҙең, уйланып ултыра торғас, ҡаштары бер аҙ яҙылғандай була. Әсәйемдең осло күҙенә был үҙгәреш салынмай ҡалмай. Ул инде уратып ҡына һүҙҙе ҡоҙа булаһы кешеләрҙең арыу ғына нәҫелдән икәненә бора. Килен булаһы ҡыҙҙың да аҙып-туҙып, кеше теленә төшөп йөрөмәгәненә ҡыялата. Иплəп кенә Иршат ағайымдың да инде күптән бәлиғ булғанын, дискотека-фәләндән һуҡмыш ҡайтҡылаған саҡтарын иҫенә төшөрә. Бынһыны инде иң көслө ҡорал: өләсәйем йыуашыраҡ улының киләсәге өсөн бөтөнләй хәүефкә ҡала. Уҫал бисәлегә ҡарағанда, буйҙаҡ алкаш булып йөрөү, Алла һаҡлаһын, бик күпкә аламараҡ икәнен тойомлай.

- Яра, йә анау Һәлкәстең Рәзиме кеүек, "Шул Әнифәне алып бирмәнең, ғүмерлеккә бәхетһеҙ иттең" - тип, һаҡалы ағарғансы илап йөрөр, тәүбә әстәғәфирулла. Аллаһы Тәғәләгә тапшырып, башлы-күҙле итеп ҡуймай булмаҫ Иршатты. - Өләсәйем бер аҙ үҙ уйҙарына батып ултырғас, өҫтәп ҡуя: - Бәлки, йәшәп тә китерҙәр, яҙған булһа, кем белә, шайтан ғына өмөтһөҙ ...

- Тыумаған ҡолондоң биле һынғанына ҡайғырып ултырма инде, ҡәйнәм. Йәшәрҙәр, йәшәмәй ҡайҙа барырҙар, тиһең ...

- Йәшәү менән йәшәү бер төрлө булмай бит әлеү. Анау Шәриф менән Рәзимә лә йәшәп ята. Улар ҙа ғаилә тип атала дөкәмит буйынса. Ире өҫтөнән кем менән генә типтермәне, албаҫты. Тегеһе түҙә, беләкүрә тора шул бисә менән.

- Тора инде, нишләһен. Уның йәшендә ҡапыл айырып, яҡшырағын ҡайҙан табаһың! - Әсәйем өләсәйҙең әллә ниндәй Рәзимәләр, теләһә кемдәр тормошон сәйнәй башлауына арҡыры төшә, тағы һүҙ теҙгенен үҙ ҡулына ала.

- Хәҙер ауылда ҡалып, һыйыр һауып, сөгөлдөр утап йәшәй торған ҡыҙҙар бармы ни, барыһы ла ҡала яғын ҡайыра. Иршатҡа ла тиң-тош ҡыҙ табылған икән, етмәһә, ауылдан да. Йөҙ сөйөрмәй, ҡәйнә йортона төшәм, тип ҡурҡмай икән, тимерҙе ҡыҙыуында һуғалар!

- Яра, кеше күргәнде күрербеҙ әле. Мин таныштырмаған, үҙҙәре табышҡан икән, теләһә нишләһендәр ҙә...

Өләсәйҙең икеләнеүҙәренә ҡарамаҫтан, туй билдәләнгән көнгә бер ни булманы. Таш та яуманы, Иршат ағайым да кире уйламаны, кәләш тә ҡасып китмәне. Буласаҡ еңгәмде күргәс тә, мин "аһ" иттем. Минең үҫмер генә аңыма ул матурлыҡтың үҙе булып күренде. Ауылдағы башҡа кәләштәр киң итәкле, әллә ниндәй ҡаҡ та ҡот әберкәле, сәсәкле, тағы әллә нимәләр менән биҙәлгән ҡабартмалай күлдәктәр кейгән булһа, еңгәм уларҙың кипмә-киреһе ине. Һомғол, нәҙек кенә билле, хәс тә Грецияның иң матур ҡорамынан йәнләнеп, ҡубып килеп сыҡҡан антик һын, тиерһең. Ҡап-ҡара матур бөҙрәләр биленә тиерлек төшөп тора. Эҫе ҡояш аҫтында үҫкән көньяҡ һылыуҙарыныҡы кеүек йөҙҙә ҡап-ҡара керпектәр менән ҡаймаланған йәм-йәшел күҙҙәр. Бешкән сейә, тип, шундай ирендәрҙе әйтәләрҙер инде. Етмәһә, йылмайғанда биттәре лә соҡорайып тора, имеш. Ошондай алиһә кеүек һылыуҡай беҙҙең төпкөл генә ауылда тыуып үҫһенсәле, һис ышанып булмай. Ниндәйҙер модалы журнал тышында ғына торорға тейеш ине бит был йөҙ. Ә һыны иһә иң билдәле модельерҙар теккән кейемдә иң бейек подиумда ғына йөрөргә тейеш ине...

Туйҙан һуң миңә әллә нимә булды. Ағайымдарға барам, көноҙоно ситтән генә еңгәмә һоҡланып ҡарап ултырам. Ҡарашымды айырып ала алмайым. Миңә берәй төрлө һүҙ ҡушһалар, тыртайып, ҡайтып китәм, йә ап-арҡыры яуап бирәм, юҡҡа-барға үсегәм... Холҡомдо электән дә маҡтамайҙар ине инде, хәҙер бөтөнләй ғәжиз булдылар. Мин үҙем дә аңламай инем нимә булғанын. Аптырағас, өләсәйемдәргә бармаҫ булдым. Шулай бәргеләнеп-һуғылып йөрөгәндә әсәй менән атайҙың үҙ-ара мығырҙашҡанын ишетеп ҡалдым. Холҡомдо тикшерәләр икән.

- Артыҡ иркәләттең, буғай, атаһы, - тигән була әсәйем. Ҡасан иркәләнгәнде күргәне барҙыр.

- Яратҡан ағаһын көнләй, шикелле, Сулпан. Бәләкәй сағынан Иршаттың елкәһендә генә йөрөнө лә һуң...

Башҡаса тыңлай алманым, ҡастым. Үҙең хаҡында хәҡиҡәт ишетһәң, күтәреүе ҡыйын икән. Атай үҙе лә һиҙмәҫтән минең нимә кисергәндең өҫтөнә баҫты. Үлеп көнләй инем, үлеп. Тик Иршатты түгел. Бер кәмселеге булмаған еңгәмде көнләй инем мин ысынында. Нисек шулай? Миңә ҡапыл идеал булып күренгән фәрештә нисек ошо ябай ғына ауылда минең ябай ғына ағайыма ҡатын булып йәшәп ята ала һуң? Һүҙ юҡ, Иршат ағай насар кеше түгел, әлбиттә, уңғанлығы ла бар, буйға ла нисауа. Ләкин ул ябай ауыл малайы. Хәйләһеҙ, эскерһеҙ, ябай ауыл малайы. Ә еңгәм бит артыҡ нәфис һәм артыҡ нәзәҡәтле. Ул ауылға ғына түгел, гөмүмән, Ер йөҙөнә аҙашып килеп сыҡҡан фәрештә. Уның урыны ҡайҙалыр телевизор экраны артында, бүтән донъяла...

Күп кенә осраҡта өләсәйем себендән дә фил яһай торғайны. Бер заман аһ та ух килеп кереп, хәле бөтөп, диванға тәгәрәне.

- Был килен беҙҙе үлтерергә уйлай, ахрыһы, әпәйгә лә тоҙ һалмаған, - тип илай. Тағы әллә нимәләр тип һөйләп бөткәйне, башҡаһы онотолған. Ошо "оло" ғәйеп ташлауы нык иҫтә ҡалған. Еңгә тоҙһоҙ ашарға өйрәнгән инде, салатҡа ла һалғаны юҡ. Беҙгә килгән сағында ла аш ашамай, сәй менән генә сикләнә. Ә өләсәй ул яҡтан сама тигәнде белмәй торған кеше. Ул тоҙлаған ҡыяр-фәләнде бөтөнләй ашап булмай. Ҡурылған бәрәңгене иһә, ашайым, тиһәң, янына берәй стакан һыу алып ултырырға кәрәк. Еңгә йөккә ҡалғас, нык йонсоно. Һурпа еҫенә туҡтауһыҙ уҡшый. Түрбашҡа өләсәй хужа булғас, бер ни ҡыла алмай - ҡәйнә көн һайын ҡаҙан тултырып ит бешерә. Үҙе яратҡанса, тоҙон да йәлләп тормай. Ә еңгәм, бахыр, өйҙә тағы тауыш сыҡмаһын, тип, бер һүҙ ҙә өндәшмәй. Тәрилкәне ҡалағы менән арлы-бирле бер-ике болғай ҙа, шым ғына сығарып Аҡбайға түгә. Өләсәйгә мыжырға тағы бер сәбәп: ашағаны нисек - эшләгәне шулай, йәнәһе. Килен мыҙыҡа, ялҡау, ҡулынан эш килмәй, шуға аппетиты ла юҡ. Атаәсәһе йортона барып килһә, хет өйгә кермә - өләсәйем ағас игәү алып, тағы тыжырға тотона. Йәнәһе, йүнле килен атайинәй тупһаһын онота, ә бының кеүек ҡәйнәһен-ирен барып ошаҡлап йөрөмәй һәм башҡалар, һәм башҡалар... Иршат ағайымдың да кәләшен яҡлап, бер ни әйткәнен иҫләмәйем. Икеһе лә эш боҙған бала һымаҡ, өләсәйемде баш баҫып тыңлайҙар ҙа, икенсе бүлмәгә ҡасыу яғын ҡарайҙар. Ниңә үҙҙәрен яҡлап бер һүҙ ҙә әйтмәйҙәрҙер? Улар аулаҡҡа ҡасһа, өләсәй тағы нығыраҡ еннәнә бит инде, әллә ниҙәр әйтеп бөтә. Әсәйемдең ҡәйнә этлектәре хаҡында һөйләгәненә ышандым инде шунда. Беҙҙе иркәләткән, иғтибарлы, ҡайғыртыусан өләсәй, баҡтиһәң, бына ниндәй була ала икән...

Ағайым менән еңгәм башҡа сыҡҡас та, өләсәйем: Аана, эштән ҡастылар, мине яңғыҙымды ҡалдырҙылар", - тип ыңһырланы. Әммә йәшәй торғас, тынысланды, Иршаттың бер-бер артлы тыуып торған, тәпәй баҫып, теле асылып ләпелдәп торған һөйкөмлө малайҙарын да беҙҙе иркәләткән һымаҡ иркәләтте. Әсәләренән йәшереп кенә кәнфит-мәмәй менән һыйланы, әллә нисә тәтәй-машина ваттырҙы, йыртылған ыштандарын яманы. Ә еңгә үҙ йортонда иркенгә сыҡты. Һәр аҙымын ҡарап-тикшереп тороусы булмағас, рәхәт шул. Теләһә йыуа иҙәнен дә, һауыт-һабаһын да, көйө килмәһә - юҡ. Икмәк һалырға бөтөнләй яратмай. Еңгәмдең шул ғәҙәтен белгәнгә күрә лә үҙем килгәндә сәйгә берәй нәмә - крәндилме, печеньемы, алып килергә ғәҙәтләнгәнмен.

Сәй һыуына ла башланы. Был еңгә һаман шул һүрәттәге иргә текләп ултырмайҙыр инде. Берәй ҡыҙығырак ҡорған фасоны күрҙе микән әллә? Төшкән төймәһен тегә һалып ҡуймай айҙар буйы яҭҡырһа ла, еңгәнең ҡулы оҫта ул былай. Ана бит, мейес алдында көл һаман һөртөлмәгән килеш ятһа-ята, ә тәҙрәләрҙә ҡала өйҙәренән былайыраҡ ламбрикендар тора! Һис йыбанмай, һәр бер һыры текемләп бөкләнгән, үҙ-ара килешеп торған әллә нисә төҫ, әллә нисә фактура. Ниндәй стиль икәнен әйтеп тә һөйләгәйне инде, онотҡанмын. Матурмы - матур, ҡалғанын тикшерергә белгес түгелмен. Мин аңламаһам да аңлаусылар барҙыр инде, еңгәмде өй матурларға әллә ҡайҙарға алып китәләр. Яҡшы-яҡшы урында ултырған дәү-дәү кешеләрҙең өйөндә ул - көтөлгән ҡунаҡ.

Сәйнүкте өҫтәп ҡуйҙым да, еңгә янына сыҡтым. Ни ғәжәп, ул, ысынлап та, һаман журналға текәлгән.

-Нимә, ғашиҡ булдың мәллә, ағайыма ошаҡлайым!

- Сулпан, ҡара әле, ҡара, - еңгәм әпәт-тәки фотолағы ҡорғандарға күрһәтә. - Һәм бына был яҡҡа күҙ һал.

Алмаш-тилмәш бер бай йортона, бер еңгәмдең тәҙрәләренә ҡарап торам да, ҡапыл аңлап, эсем ҡатып көләм.

-Ха-ха-ха, бер-бер иш! Шул һәтле крутой мужик, ә ҡорғандары бер төпкөл ауыл өйөнөкөнән айырылмай!

Сәйнүктең тағы дөһөрҙәп ҡайнауын ишетеп, түрбашҡа ынғайланыҡ. Сәй янында юҡ-бар һөйләшеп, мин килтергән перәниктәр менән сәй эсеп, һәүетемсә ултырҙыҡ. Еңгәм һаман минән кейәү таптыра. 14-15 йәшемдән бирле егеттәрем хаҡында тыңлауҙан нисек ялҡмайҙыр? Хәйер, уның менән дә серләшмәгәс, кем менән уртаҡлашаһың уйҙарыңды? Юҡҡа ғына Гөлбаҙыян киленеме ул - егеттәрҙең мин күрмәгән кәмселеген табып, күңелдә кире ҡайтара ла тора. Тәүҙә асыу килһә лә, аҙаҡ еңгәмә эстән генә рәхмәт уҡыйым мин: әйткәне гел раҫҡа сығып, йә ваҡсыл, йә ялҡау, йә тәккәббер, йә осоҡ булмыштары ҡалҡып килә лә сыға бит кейәүлеккә кандидаттарҙың. Аҙаҡ еңгәгә "шул саҡта дөрөҫ әйткәнһең", тиһәң, тағы оҡшатмай. Имеш, мин артыҡ максималист, кешенән күпте талап итәм, ә идеал был донъяла юҡ һәм башҡалар, һәм башҡалар... Йәнәһе, ул минең хисте һынар өсөн генә әйткән, әгәр ысынлап яратһам, эргәлә "ул - балаҡ, ухылый һәм хәйерсе", тип хор йырлап торһа ла, мин ишетмәҫ һәм кейәүгә сығыр инем!..

Шулай ҙа, нимә булды был еңгәгә, ә? Күҙәһе, теле эргәмдә һымаҡ, ә күҙҙәрен ситкә тарта. Нимә хаҡындалыр минән йәшереп кенә уйлағыһы килә, буғай. Үпкәләргә лә иттем, шулай ҙа ни ғәләмәт, сабырлыҡ тигән нәмә килтереп төрттө, тел ҡысыһа ла, һорашманым, иғтибарһыҙлығы өсөн үсекмәнем, ҡайтырға ҡуҙғалдым. Еңгәм журналымды инәлеп тигәндәй алып ҡалды: "Журналымды бир" тигән һылтау менән тағы килеп сығырһың. Тик ошолай аулаҡта кил, йәме, ағайың эштә саҡта..." - тине үҙе серле генә итеп.

Уның һөйләшендәге "Әйтер һүҙем бар" тигән әйтелмәй ҡалған өләшөн эстән генә үҙем өҫтәп ҡуйҙым. Был уй тынғы бирмәй, күңелдә өс көн өйкәп тороуға, еңгәмдән саҡырыу хәбәре килде. Ниндәйҙер сер сәтләүеген ватып, татлы емешен ашарымды ҡуҙаллап, осоп ҡына киттем ауылдың арғы осона. Барһам, еңгәм тынысланған, хәрәкәттәрендә тулҡынланыу ҙа һиҙелмәй, ҡараштары яҡты. Ҡабалан ғына туғылған ҡамырҙан ваҡ ҡына ҡоймаҡтар ҡойоп бөтөп, соланға сәй эсергә сыҡҡас, минең түҙемһеҙләнеп көткән минуттарым етте - серләшеү мәле башланды.

- Рәхмәт журналыңа, - еңгәм йылмайҙы. - Яҙмышын белдем, тормошон күрҙем. Нисектер, күңелем баҫылып ҡалды.

-Кемдең, тинең?

-Һуң, күрһәтә инең бит әле. Үҙе бай, үҙе дәрәжәле, үҙе сибәр, тип. Сәғит Сафич Баймырҙинды әйтәм. Ул ваҡытта, әлбиттә, уның сибәрлеге һәм дәү амбициялары ғына бар ине. Ҡыйбатлы костюм кейеп, затлы машинала ғына елдереп, бай офиста түрә булып ултырыусы итеп күҙ алдына килтерә ине үҙенең яҙмышын. Әйтәм бит, тынысландым.

-Ә бығаса нишләп тыныс түгел инең? Әллә минең ағай менән йәшәп, шул кеше хаҡында уйлап йөрөнөң мәллә?

-Юҡ, улайтып бәхеткә өлгәшеп булмай ҙа инде. Ә минең бәхет ошонда, өйрәнгән ерҙә ғаиләм менән һәүетемсә генә йәшәү. Иршатты һайлағаныма үкенгәнем булманы. Яҙмыштан ҡасып булмай...

- Ә Сәғит?..

-Ул минә ғашиҡ ине бит. Алдыма теҙләнеп, ҡулын һәм йөрәген тәҡдим итте. Ҡыҙыу ҙа егет ине инде үҙе. "Кире һуҡһаң, атылам да үләм!" - тип үк ебәрҙе. Эй, ҡурҡтым. Әҙме ни инде ҡыҙҙар өсөн иҫәрләнеп, үҙ-үҙенә ҡул һалыусы егеттәр! Бер яҡтан, Сәғит ныҡ оҡшай ине оҡшауын. Икенсе яҡтан, "әгәр шулайтмаһаң - үләм, былайтмаһаң, тағы үләм" тип, ғүмер менән, минең күңелем менән шаярырға әҙер егет кәрәкмәй ине миңә. Етмәһә, Сәғит менән икебеҙ ике донъя кешеһе. Ул үҙен фәҡәт ҡалала, ниндәйҙер завод директоры итеп күҙ алдына килтерә. "Техника", тип үлеп бара. Ә мин, бахыр, әйтергә лә оят - ат тире ҡатыш бесән еҫен яратам. Автобус-машинала уҡшып йонсойом. Таңғы ысыҡта яланаяҡ йөрөйөм, тауҙар араһынан һарҡып ҡына томан яуғанын яратам. Ә ҡала күгендә, исмаһам, йондоҙҙар ҙа янмай бит. "Ярар, эйе, мин риза", - тип ынғайына ғына һыпырҙым да, иртәгәһенә үк уҡыуымды ташлап, ҡасып ҡайттым да киттем...

-Яҙмыштан ҡасып булмай, тип, нимә әйтергә теләгәйнең һуң, еңгә?

-Бәлки, ысынлап яҙмыштыр, бәлки, минең иҫәрлек кенәлер, кем белә. Күрһәттем дә һуң үҙенә - Сәғиттең йортондағы ҡорғандар минекеләрҙән бер нәмәһе менән дә айырылмай. Шундай мөхиттә йәшәргә тейеш булғанмын, тимәк. Әсәһенең фотоһына иғтибар иттеңме? Бигерәк яһилға оҡшаған, ибет? Сәғитте һайлаһам да, шул ҡайнә тигән есемдәрҙән ныҡ эләнеп йәшәгән булыр инем, моғайын. Бәлки, шулай кәрәк тә булғандыр. Киләсәктә, Алла бирһә, үҙем дә өс киленгә ҡайнә буласағым бар бит. Уларға яһил булма, үрнәк бул, тип, яҙмышым мине алдан уҡ түпәләп алғандыр...

Кис шәмгә ут алғас ҡына сыҡтым еңгәмдең йортонан. Бер аҙ атлағас, боролоп ҡараным. Тәҙрәләрҙән төшкән яҡтылыҡты тәрлә сихри төҫкә манып елберҙәп торған ҡорғандар ниндәйҙер әкиәти донъяны ышыҡлап тора кеүек. Шул әкиәт эсендә бер тылсымлы кеүек минең еңгәм йәшәй.

"Төҫө барҙан төнөлмә". Ҡайҙа ишеттем әле мин был һүҙҙәрҙе беренсе тапҡыр? Ә-ә-ә, бишалты йыллап элек, "Баламды бала буғына батырҙы", тип, сираттағы ейәне тыуған һайын киленен кешегә яманлап илауларған өләсәйемдән, йәшәй торғас, кәйефе үҙгәреп: "Уңған килен - ул табыр", - тип, тауышына ҡәнәғәтлек ноталары сығара башлағас, әсәйем: "Төҫө барҙан төңөлмә", - тип юҡҡа әйткәндәр тиһеңме ни?" - тип, ҡәйнәһен йөпләп ҡуйғайны бит әле...

**Рәми ҒАРИПОВ**

# Табыныу

**1937**

**(Поэма)**

*Алла ла, батша ла, батыр ҙа -*
*Азат итмәҫ бер кем беҙҙе.*
*Бары үҙ ҡулдарыбыҙ менән*
*Яуларбыҙ үҙ иркебеҙҙе.*
*"Интернационал"*

I

Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етелә
Миң туғыҙ йөҙ Ун Етене ҙурлап,
Илем минең изге ителә.
Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етелә,
Миң туғыҙ йөҙ
Ун Етене хурлап
Илем минең етем ителә.

Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!
Әйт дөрөҫөн, заман үтенә:
Миң туғыҙ йөҙ утыҙ ете һуйыл
Мираҫ инеме Ун Етенән?..

Әкиәттәге серле ҡурай һымаҡ,
Әйт, был ниндәй ҡанлы тантана?
Бер осонҙан һинең балың тамһа,
Бер осонҙан ниңә ҡан тама?..

II

Бер ҡараһаң, утыҙ етелә
Ҡотопторға осоп етелә;
Бер ҡараһаң, утыҙ етелә
Ҡоштар осоп етмәҫ ерҙәргә,
Баштар ҡайтып етмәҫ гүрҙәргә
Аҫыл ирҙәр алып кителә...
Бер ҡараһаң, утыҙ етелә
Оло байрам, һабан туйындай;
Бер ҡараһаң, утыҙ етелә,
Урман йыҡҡан ҡара ҡойондай,
Аҙмы аҡыл харап ителә,
Күпме күңел нахаҡ кителә!..
Бер ҡараһаң, утыҙ етелә
Бөтә илем сәскә атҡандай,
Хөр емештәр өҙөп ҡапҡандай;
Бер ҡараһаң, утыҙ етелә
Аяҙ көндә йәшен атҡандай,
Аҙмы өйҙән мәйет сыҡҡандай...
Бер ҡараһаң, утыҙ етелә
"Тымыҡ Дон"дар ижад ителә;
Бер ҡараһаң, утыҙ етелә
"Тәрән тамырҙар" юҡ ителә...
Әкиәттәге серле ҡурай һымаҡ,
Әйт, был ниндәй ҡанлы тантана?
Бер осонҙан һинең балың тамһа,
Бер осонҙан ниңә ҡан тама?..

III

Бала сағым - ҡолон сағым минең,
Был афәткә ниңә юлыҡтың?
"Халыҡ дошманы" тип ил улдарын
Иң ҡаһарман халҡым батырҙарын -
Тарихтан мин ниңә йолоҡтом?
Сабый күңелемде, йәйгор һымаҡ,
Биҙәп торған тәүге йондоҙҙар -
Илтеүселәр еңеү байраҡтарын -
Ниңә минең кескәй бармаҡтарым,
Күҙегеҙҙе соҡоп, юйҙылар?
Кескәй йөрәгемә шик-шом һалып,
Ниңә аҡты ҡара тинеләр?
Тәү ятлаған шағир дуҫҡайҙарым -
Хөр халҡымдың тәүге Туҡайҙары -
Улармы һуң дошман инеләр?
Күҙҙә асҡан тәүге китаптарым,
Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етелә -
Ниңә һеҙҙе, ҡулдан тартып алып,
Урта быуат уттарына һалып,
Яндырҙылар, һәләк иттеләр?
Ниңә шул саҡ, бер әүлиә булып,
Дөрөҫлөктө илем белмәне?
Күрер ине тоғро улдарының
Ленинсылар булып үлгәнен,
Бирер ине илем үҙ йәнен!..

IV

Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етелә
Ҡан һуғарған, ут эсендә тыуған,
Саҡ-саҡ әле егермеһе тулған
Ярты баҡсабыҙ юҡ ителә,
Балта менән ҡырып кителә...
Яңы ҡыуаҡ ҡалҡып, тын алмайса,
Егерменсе йыйын йыйылмайса,
Бикле ята беҙҙең күп эштәр, -
Әйтерһең дә, ут-ғәрәсәт үтеп,
Урау юлдан тура юлға етеп,
Балҡымаған ерҙә Бабичтар!..
Әйтерһең дә, Туфан ҡал(ы)ҡмаған.
Булмаған да Һәҙиә, Юлтыйҙар!..
Юҡ, булмаған, тиеп, егерме йыл,
Миң ялғанды беҙгә тылҡыйҙар...
Әкиәттәге серле ҡурай һымаҡ,
Әйт, был ниндәй ҡанлы тантана?
Бер осонҙан һинең балың тамһа,
Бер осонҙан ниңә ҡан тама?..
Шулай ине, тиҙәр, заманы...
Ә ҡайҙа һуң кеше иманы?
Ә бит күптәр, һатып иманын,
Ҡалҡан итте шул саҡ заманын.
Әкиәттәр хаҡты әйткеләй:
Күптән булған ерҙә Әпкәләй.
Салауатты һатҡан Ҡолойҙар
Һәр заманда сығып олойҙар.
Яңғыҙ ағас урман булалмай,
Һапһыҙ балта урман ҡыралмай;
Балтаһынан бигерәк урманды
Кем һуң белмәй һабы ҡырғанды?
Хәҙер мәғлүм юха ялғаны
Утыҙ етелә ни ҡылғаны...
Улар миң туғыҙ йөҙ Ун Етелә,
Яҡтылыҡтан ҡасты, өкөләй;
Ә миң туғыҙ йөҙ илле етелә
Эҙен юйҙы күҙҙән, төлкөләй...
Тик ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң даҠырҡ төҫкә кермә - беленә:
Ил күҙенән эҙен юйғандың да
Ил ҡаны бит тама еңенән!
Юҡ, был һүҙҙәр ҡон юллауҙан түгел,
Ҡоно ҡайтырлыҡмы был ҡандың?..
Ете йәшәр ләкин күреп торһон
Етмеш йәшәр ниҙәр ҡылғанды!
Бармаҡ тәртәп уға күрһәтмәйек,
Тик ҡылғаны, бүлеп йөҡоһон,
Миң туғыҙ йөҙ утыҙ ете ҡабат
Ярты төндә ишек шаҡыһын!..

VI

Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Ниңә хәҙер һинең яманат?
Юҡ, туйҙан һуң дөмбөр ҡағыу түгел,
Килер быуынға был - Аманат.
Биҙәмәйек беҙ ҙә үҙебеҙҙе,
Асылғас та алда бар томан, -
Ни мәғәнә хәҙер ул саҡтағы
Һуҡыр күҙгә һөрмә тартыуҙан?
Ул саҡта ла беҙ бит тере инек,
Тик күтәргән инек Алланы.
Ә алланың - ҡайһы алланың һуң -
Дөрөҫ булғаны бар ялғаны?
Эй табыныу, һуҡыр табыныу һин,
Ни әшәке һинең ишенән?
Һәр әҙәмдә зиһен йоҡламаһа,
Ни көслө һуң ерҙә кешенән?
Беҙ бит донъя ҡыл өҫтөндә саҡта,
Ҡурсып уны ерҙә уттан-йоттан,
Еңеп сыҡтыҡ аҙмы дошманды?
Бит үлемдән ерҙе юлып алып,
Ерҙә тәүге Ирек Юлын һалып,
Аткарҙыҡ беҙ Тарих ҡушҡанды!
Бөтә йыһан беҙгә табынғанда,
Ниңә һуң беҙ уға табындыҡ?
Гүйә беҙ юҡ инек!.. Ниңә шулай,
Ер аҫтына һеңеп аҡҡан һыуҙай,
Хаҡлыҡ өсөн һуңлап табылдыҡ?..
Бер Аллаға барыһын япһармайыҡ,
Беймәйек кәбер өҫтөндә.
Хурламайыҡ уға ышанғанды,
Тарих төҙәлмәй ул өс көндән.
Ышанғандың күҙен йылдар асыр,
Еңел түгел Юлдар үтеүе,
Еңел түгел хатта бер өйрәнгән
Таяҡты ла ташлап китеүе...
Ә ул маяҡ ине! Ул киткәндә,
Аҙмы күҙ йәшебеҙ ҡойолдо!
Күкрәктәрҙән йөрәктәрҙе үлем
Һурып алған һымаҡ тойолдо.
Ләкин Тормош үҙе килеп тапты
Тарих ижадсыһы - халыҡты.
Ҡулдан инде бер кем алмаҫ тартып
Ҡорбан биреп алған Хаҡлыҡты -
Ленин васыят иткән Хаҡлыҡты!

VII

Миң туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Онотма һис уны һин, кешем.
Миң туғыҙ йөҙ Ун Етене һаҡла,
Мансылмаһын ҡанға емеше!
Ер күтәрмәҫ ауыр был вәхшәтте
Ил күтәрҙе, төшкәс башына.
Килер быуындарға ғибрәт итеп,
Яҙ һин уны Тарих ташына.
Был вәхшәтте Тарих онотмаһын,
Онотмаһын тыуыр быуындар,
Ерҙә тағы берәй алла тыуһа,
Ул алланы ерҙән ҡыуһындар!
Был донъяла бер йыл оҡшамаһын
Утыҙ етенсе йыл ишегә,
Бер аллаға кеше табынмаһын,
Табынһын тик кеше кешегә:
Батшаларҙы йыҡҡан кешегә,
Аллаларҙы йыҡҡан кешегә,
Ай-йондоҙға баҫҡан кешегә,
Ураҡ-Сүкеш тотҡан кешегә!..

*1964 йыл, сентябрь. Дубулты - Өфө.*

ИНТЕРНЕТТАН



# БУЛАСАҠ ҺАЛДАТТАР...

## ун йәштән иҫәпкә алынасаҡ

■ Ванкуверҙағы олимпиадала Канада йыйылма хоккей командаһы Рәсәй командаһын 7:3 иҫәбе менән еңде. Шулай итеп, башлыса КХЛ-дың иң һәләтле уйынсыларынан торған Рәсәй командаһы ирҙәр хоккейы буйынса миҙалһыҙ ҡалды. Рәсәй йыйылма командаһы 1998 йылдағы олимпиадала көмөш миҙал яулағайны, ә олимпиаданың алтын миҙалы беҙҙең уйынсыларға әлегә бер тапҡыр ҙа тәтегәне юҡ.

■ РФ ВС Генштабы етәксеһе, армия генералы Николай Макаров белдереүенсә, Рәсәй ғәскәрҙәрҙә контракт буйынса хеҙмәт итеүселәр менән генә тулыландырыуға күсергә йыйынмай. "Беҙ контракт нигеҙенә күсмәйбеҙ. Профессиональ әрме төҙөү маҡсаты әлегә үтәлмәгән, шуға ла саҡырылыш буйынса хеҙмәт ҡалырға тейеш, тип иҫәпләйбеҙ", - тип белдерҙе генерал. Макаров фекеренсә, контракт нигеҙендә бары тик сержанттар ғына алынасаҡ һәм улар мотлаҡ ике йыл ярым әҙерлек үтәсәк. Ошо рәүешле яйлап контракт әрмеһенә күсеү мөмкинлеге тыуасаҡ. Шуға ла сираттағы саҡырылышта ваҡытлыса хеҙмәт итеүселәр һаны тағы ла артыуы көтөлә.

■ Рәсәй Хөкүмәте 2020 йылға тиклем хәрби хеҙмәткә әҙерлек Концепцияһын раҫланы. Быйтыр хәрби комиссариаттар тарафынан һәр өсөнсө йәш кешенең хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ булыуы асыҡланған, быныҥ төп сәбәбе булып малайҙарҙы әрме хеҙмәтенә физик әҙерләү системаһы булмауҙан килә. Шуға лә хәҙер мәктәптәрҙә физкультура дәрестәренә һәм сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалауға ҙур иғтибар бүлеү талап ителәсәк. Шулай ҙа төп ауырлыҡ ДОСААФ-ҡа төшәсәк. Буласаҡ һалдаттарҙың сәләмәтлек торошон 10 йәштән иҫәпкә аласаҡтар, ә 2013 йылдан һәр малайҙың электрон паспорты барлыҡҡа киләсәк. Был саралар 2020 йылға үҙенең һөҙөмтәләрен бирер, тип көтөлә, был ваҡытҡа хеҙмәткә яраҡлы егеттәр һаны 15 процентҡа тиклем артасаҡ.

■ Рәсәйҙә һуңғы аҙнала халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәрендә теркәлеү үткән эшһеҙҙәр һаны 1,4 тапҡыр артҡан һәм бөгөнгө көнгә 2,263 миллион кеше тәшкил иткән. Эшһеҙҙәр һаны Федерацияның 75 субъектында, мәҫәлән, Тыва, Мордова, Төньяҡ Осетия-Алания, Сахалин өлкәһендә һ.б. күбәйгән. Төмән өлкәһендә эшһеҙҙәр һаны үҙгәрешһеҙ ҡалған, ә Мәскәү, Магадан, Орлов өлкәләрендә кәмегән.

■ Рәсәйҙә иң кәрәкле иҫәпләнгән дарыуҙарға хаҡтар менән дәүләт идара итә башланы. 1 апрелгә тиклем бар етештереүселәр ҙә дарыуҙарға хаҡты күрһәтеп, документтар тапшырырға тейеш. Әлеге мәлгә 3 мең препаратты теркәү өсөн документтар тапшырылған да инде, исемлектәге тағы ла 2 мең дарыу билдәләнгән ваҡытҡа тиклем теркәлеү үтергә тейеш, юғиһә дарыуханаларҙа бындай дарыуҙарҙы һатырға рөхсәт булмаясаҡ. Дарыуға хөкүмәт билдәләгән хаҡты интернеттан табып буласаҡ, дарыухана селтәрҙәрендә лә исемлек эленеп торорға тейеш.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Өфөнөң 21-се ҡала клиник дауаханаһын баш ҡалала ғына түгел, республикала ла яҡшы беләләр. Бында электән иң яҡшы белгестәр эшләй, ауырыуҙарға мөнәсәбәт тә бик яҡшы, тип иҫәпләнә. Бөгөн был дауахана ошо изге традицияларға тоғро ҡаламы, уның эшмәкәрлегенең төп үҙенсәлеге нимәлә, ниндәй ҡатмарлы дауалау төрҙәре үҙләштерелә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға 21-се дауахананың баш табибы, медицина фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Нәзир Хәсән улы ХАФИЗОВ яуап бирә.**

# СИРҘЕ ТЕЛӘП АЛЫУСЫЛАР...

## тәбиғи рәүештә ауырыусыларҙан күберәктер ҙә әле...

### Күп профиллелек - төп үҙенсәлегебеҙ

21-се ҡала клиник дауаханаһы Өфөнөң иң эре дауалау учреждениеларының береһе һанала. Һандар үҙе үк күпте һөйләй. Бөгөн дауаханала 551 табип, 890 медицина туташы эшләй, башҡа техник персоналды ла иҫәпкә алһаҡ, хеҙмәткәрҙәр һаны 1710 кешегә етә. Дауахананың төп үҙенсәлеге булып күп профиллелек торалыр, моғайын. Ул 1070 урынға иҫәпләнгән, поликлиника бер сменала 800 кешене ҡабул итә ала, травма пункты 3000 кешене хеҙмәтләндерә. Быйтыр стационар аша ғына ла 55 мең ауырыу үткән, уларҙың 31 меңе госпиталләнгән, 18 меңдән ашыу операция яһалған. Ауырыуҙарҙың 24 меңе ҡабул итеү бүлегендә хеҙмәтләндерелгән, бында төрлө гәҙәти анализдар алына, рентген тикшереүе үткәрелә. Шуны ла әйтергә кәрәк: ҡабул итеү бүлегендә яһалған ваҡ операцияларҙың иҫәбе 9 меңдән ашып китә. Дауахана табиптары көн һайын ике йөҙҙән ашыу кеше ҡабул итә, был һанға тиҙ ярҙам хеҙмәте буйынса ҡабул итеүҙәр ҙә инә. Ҡала һаулыҡ һаҡлау составында башҡарылған бындай ҙур эш, әлбиттә, күп профилле булыу иҫәбенә эшләнә.

Эндокринология, аллергология, токсикология, проктология кеүек бүлектәр ҡаланың башҡа дауаханаларында юҡ, шуға ла беҙгә барыһын да хеҙмәтләндерергә тура килә. Бынан тыш, йылдан-йыл республика районларынан мөрәжәғәт иткән ауырыуҙар һаны арта, мәҫәлән, быйтыр 9 ай эсендә беҙҙә дауаланған ауырыуҙарҙың 22 проценты райондан булды. Ауырыуҙарҙың баш ҡала дауаханаһына ынтылыуы район үҙәктәрендә койкалар селтәре ҡыҫҡарыуы менән дә бәйле, әммә күбеһен дауахана ҙур, белгестәр күп, тигән өмөт, ышаныс баш ҡалаға алып киләләр һәм улар, кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә, беҙгә әләгергә тырыша. Был оло көсөргәнешлек тыуҙырһа ла, беҙҙең сирлеләрҙе ҡабул итмәскә хаҡыбыҙ юҡ.

Ярҙамсы бүлектәрҙән компьютер томографы тәүлек әйләнәһенә эшләй, уның туктап торған мәле лә юҡ. Быйна яңыраҡ ҡына икенсе томографты эшләтеп ебәрҙек. Күп сирҙәрҙе, бигерәк тә ҡан тамырҙары, йөрәк-ҡан тамырҙары патологияһын асыҡларға ярҙам итеүсе гамма-камералар эшләй башланы. Был бүлектәрҙә түләүле хеҙмәтләндереү ҙә бар, сөнки ҡорамалдар биш йылға кредитҡа һатып алынған, улар хаҡының яртыһын бюджет ҡаплаһа, яртыһын түләүле хеҙмәттәр ярҙамында дауахана үҙе ҡапларға тейеш. Шуныһын да әйтергә кәрәк: был ҡорамалдарҙы халыҡҡа түләүле хеҙмәт күрһәтеү һөҙөмтәһендә һатып алғанбыҙ.

### Медицина сығымдарһыҙ үҫешә алмай

21-се дауахана һирәк осрай торған операциялар яһалыуы менән дә данлыҡлы. Был йәһәттән дә яңылыҡтарыбыҙ бар. Мәҫәлән, яңыраҡ республика беренселәрҙән булып эскәкә эндоскопик операция яһауҙы ғәмәлгә индерҙек. Микрохирургтар әҙәлгән ҡул, аяҡ суғын имплантациялау кеүек операцияларҙы уңышлы башҡара. Дауахананың неврология бүлеге базаһында ҡан тамырҙары үҙәге лә асылды.

Дауахана юл-транспорт фажиғәләрендә үлемесле осраҡтарҙы иҫкәртеүсе төбәк үҙәге һанала. Трасса үҙ эсенә Өфөнән Үрге Йәркәйгә тиклемге 160 саҡрымды ала, беренсе кимәлдәге үҙәк 21-се дауахана булһа, икенсеһе - Дүртөйлөлә, өсөнсөһө Үрге Йәркәйҙә урынлашҡан. Әйтергә кәрәк, был йүнәлеш буйынса эшләй башлауыбыҙға күп булмаһа ла, тәүге һөҙөмтәләр бар. Был программа буйынса 116 млн һумға яңы ҡорамалдар һатып алыуға өлгәштек, хирургия бүлегенең реанимацияһын, бәйлән (шок) хәлендәгеләр өсөн блок, нейрохирургия, травматология бүлексәләрен ремонтланыҡ һәм үҙгәртеп ҡорҙоҡ.

Әлбиттә, ауырлыҡтар ҙа юҡ түгел. Медицина үҫеше оло сығымдар талап итә. Ә аҡса һәр ваҡыт етмәй. Билдәле балалар табибы, йәмәғәт эшмәкәре Рошаль әйтеүенсә, аҡса менән етеш кимәлдә тәьмин ителгәндә генә медицинаға зарланыусылар булмаясаҡ. Мин уның һүҙҙәре менән тулыһынса килешәм. Финанслау етешмәү арҡаһында, ысынлап та, сирлеләрҙең ҡайһы бер талаптарын үтәп булмай. Беҙ барыһына ла юғары кимәлдәге медицина ярҙамы күрһәтелеүен теләйбеҙ, әммә табип Алла түгел, ҡайһа саҡта уның ҡулынан килмәгән осраҡтар ҙа була.

### Беренсе урында - суицид

Баш ҡалала 21-се дауаханала ғына булған хеҙмәттәрҙең тағы ла берәүһе - токсикология бүлексәһе. Токсикология, тиһәң, кеше ни өсөндөр араҡы эсеп, йә наркотик ҡулланып ағыуланыуҙы ғына күҙ алдына килтерә. Әммә был бүлексәлә киҫкен ағыуланыу осраҡтарының барыһында ла - дарыу һәм бөшмәк менән ағыуланыусыға ла, бал ҡортонан һәм йыландан сағылыусыға ла ярҙам күрһәтелә. Әйткәндәй, быйтыр йыландан сағылып мөрәжәғәт итеүселәр күп булды, хатта май айында ла бындай хәлдәр осраны.

Бөгөнгө көндә ағыуланыуҙарҙың иң күп өлөшө медикоментоз сараларға тура килһә, икенсе урында алкоголь һәм суррогат менән ағыуланыу килә. Медикоментоз ағыуланыуҙарҙың 48 проценты үҙ-үҙенә ҡул һалырға теләүселәргә тура килә. Суицид йәмғиәттәге төрлө социаль факторҙар менән бәйле. Әгәр ҙә бынан 7-8 йыл элек йәштәр һөйгәне менән үпкәләшеү сәбәпле үҙ-үҙенә ҡул һалырға маташһа, бөгөн был "һөйөү нигеҙендәге суицид" 7-се урынға күсте. Беренсе урында - эш урынын юғалтыу, аҡса эшләргә мөмкинлек булмау, ғаиләне ҡарай алмау кеүек сәбәптәр. Суицид өсөн, уйлап ҡараһаң, сәбәп тә юҡ кеүек, тик ҡайһы саҡта ябай ғына осраҡ та йәш кешене ошо юлға этәрә ала. Егете менән үпкәләшеп ҡайтҡан ҡыҙҙы өйҙә әсәһе әрләп ҡаршы алһа, уға бар донъя кире яғы менән әйләнгән кеүек тойоласаҡ. Шуға ла мәктәптә, башҡа төрлө уҡыу йорттарында ауыр хәлдән сығыу юлдарын өйрәтеүсе методика уҡытылһа, яҡшы булыр ине. Тормошта ауыр хәлдәр булып тора, ҡайһы саҡта беҙ әләгеп йығылып та китәбеҙ. Баланы хистәре менән идара итергә, уларҙы контролдә тоторға, аңларға өйрәт, шул саҡта барыһы ла яҡшы буласаҡ.

Суицид - ул йәмғиәттең насар булыуы йәки йәшәү кимәле түбәнлекте генә аңлатмай. Мәҫәлән, сағыштырыу өсөн Швецияны алайыҡ. Минең белеүемсә, унда йәшәү кимәле лә, суицид осраҡтары ла бик юғары. Суицид, киреһенсә, ниндәйҙер кимәлдә яҡшы йәшәүҙән килеп тыуған хәлдер ул. Мин беҙҙә үҙ-үҙенә ҡул һалыу осраҡтары юғары, тип әйтә алмайым, был һандар һәр ваҡыт булды. 13 йыл токсикология бүлексәһендә эшләнем, әле лә күҙәтеп барыуыма, был процент нисбәте, бәхеткә күрә, әллә ни артмай. Өфө буйынса ла суицид күбәйгән тип әйтеп булмай.

Алкоголле эсемлектәр менән ағыуланыу ҙа йыш осрай. Һуңғы арала был теманан нисек кенә ситләшергә, уны урап үтергә тырышмайыҡ, миңә ҡалһа, йәмғиәттә хәҙер күберәк эсәләр. Бөгөн бер рәсәйлегә йылына 18 литр таҙа спирт тура килә, йәғни, 100 йәшлек бабаймы, ике айлыҡ сабыймы, быныһы мөһим түгел. Иң күп эскеселәр иҫәбе 23 йәштән 48 йәшкә тура килә. Элек был йәш 26-нан 52-гә тиклем ине, күреүегеҙсә, ул яйлап "йәшәрә" бара. **Әлбиттә, Рәсәйҙән күберәк эскән илдәр ҙә бар, тик беҙҙә барыбер ҙә процент нисбәте буйынса һан иҫ киткес юғары. Сит илдә урыҫ араҡыһын эсәләрҙер, тик уны һыу, һут, боҙ менән болғатып эсәләр. Ә Рәсәйҙә нисек һуң? Рәсәйле өсөн ике төшөнсә генә бар: беренсеһе - эскәс, аяҡтан йығылғансы эсеү. Икенсеһе: башланған шешә - боткән шешә, йәғни беҙҙәкеләр өсөн шешәнең ярты литрлыҡмы, литрлыҡмы икәне мөһим түгел, уны башлағас, эсеп бөтөргә кәрәк. Яңы йыл байрамдарын ғына иҫкә төшөрәйек, ғибрәт алырлыҡ күренеш бит: халыҡ үткән йылдың 20 декабрендә эсә башланы һәм байрамдар үтеп киткәнсе, 11 ғинуарҙан һуң да эсеүҙе дауам итте. Был көндәрҙә токсикология бүлексәһе нигеҙҙә спиртлы эсемлектән ағыуланған кешеләр өсөн генә эшләне, тиһәм дә яңылышмаҫмын.**

Ни өсөндөр, күп сирҙәрҙең эскелектән барлыҡҡа килеүенә иғтибар итмәйбеҙ. Был турала күп яҙыла, тик быны кеше ни өсөндөр ысынға ҡабул итмәй, ә статистика ярайһы уҡ билдәле: 55 процент инфаркт, 65 процент инсульт, 85 процент ашҡаҙан-эсәк тракты сирҙәре спиртлы эсемлектәр мән "дуҫ булыу" һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Нәзир Хәсән улы һөйләүенән аңлашылыуынса, беҙҙең дауаханалар, ысынлап та, сирләүсене генә түгел, ә сирҙе үҙе теләп, һатып алыусыларҙы үлемдән ҡотҡарыуға ла күп көс сарыф итә. Баш табип һөйләгәндәрҙән ошо факт бигерәк тә иғтибарҙы йәлеп итте, һарыуҙы ла ҡайнатты. Әгәр медицина көсө тәбиғи ауырыуҙарҙы дауалауға ғына йүнәлтелһә, ҡалай отор ине кешелек. Ул саҡта яман шеш, СПИД һымаҡ ҡурҡыныс сирҙәрҙе енер саралар ҙа тиҙерәк табылыр ине. Уйлап ҡарағыҙ әле шул турала, алкоголле эсемлек, тәмәке яратыусылар.**

Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*



# ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

## Күренмәгән дошмандарҙан абай бул

**Аллаһы Тәғәлә кешене был донъяға һынау өсөн ебәргән. Ә һынау өсөн төп сара итеп Ул ныҡыш, хәйләкәр, кешене оҫта итеп юлдан яҙҙырыусы шайтанды барлыҡҡа килтергән. Аллаһ Әҙәм Бәйғәмбәрҙе (ғәләйһиссәләм) ерҙә үҙенең Илсеһе булараҡ яралтҡан һәм фәрештәләр менән шайтанға: "Әҙәмгә ғибәҙәт ҡылығыҙ!" - тип бойорған. Бар фәрештәләр сәждә ҡылған, тик шайтан ғына үҙенең тәкәбберлеге арҡаһында әмергә буйһоноуҙан баш тартҡан.**

-Һин ниңә ғибәҙәт ҡылманың?" - тип һораған унан Аллаһ.

-Мин бит - уттан, ә Әҙәм тупраҡтан яратылған. Ут тупраҡтан яҡшыраҡ, - тип яуап биргән шайтан.

Аллаһы Тәғәлә фетнәсе, тәкәббер шайтанға асыуланған һәм уны ожмахтан ҡыуған. Ошо ваҡыттан алып шайтан мәңгелеккә Аллаһтың мәрхәмәтенән мәхрүм ителгән. Ергә ҡыуылған шайтан тәүбә итмәгән һәм һуңынан Әҙәм бәйғәмбәрҙең (ғәләйһиссәләм) дошманы булып киткән.

"Кеше минең ожмахтан ҡыуылыуыма сәбәпсе булды. Шуның өсөн мин уны тура юлдан яҙҙырасаҡмын. Мин уға уңдан да, һулдан да, алғы яҡтан да, арҡа яғынан да бәйләнәсәкмен. Мин уны гонаһ эшләргә һәм Аллаһҡа ҡаршылашырға мәжбүр итәсәкмен. Әйҙә Аллаһ уға асыуланһын һәм мине ҡыуған кеүек, уны ла ожмахтан мәхрүм итһен", - тип ант иткән.

Аллаһ уға быны Ҡиәмәт көнөнә тиклем рөхсәт иткән. Шунан алып шайтан Әҙәмдең улдарын яуызлыҡ һәм төрлө хәшәрәтлектәр ҡылырға, хаҡ юлдан баш тартырға ҡоторта. Әммә ул ҡоторта ғына ала. Ҡалғанын кеше үҙе башҡара.

Был аяуһыҙ алыш һәм дошманлыҡ, Аллаһ ихтыяры менән, Ҡиәмәт көнөнә тиклем дауам итәсәк. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе һәм үҙенең Илсеһен шайтандың яман ҡылыҡтары һәм уның хәйләһенә ҡаршы торорға кәрәклеге тураһында иҫкәртә:

**"Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Барығыҙ ҙа Ислам диненә инегеҙ! Шайтан юлынан бармағыҙ! Ул һеҙгә асыҡтан-асыҡ дошман бит!" (Әл-Бәҡара, 208).**

**"Шайтан һеҙгә фәҡирлек вәғәҙә итә, һәм боҙоҡлоҡҡа бойора, ә Алла һеҙгә ярлыҡауын һәм рәхмәтен вәғәҙә итә. Ысынлап та, Алла бар нәмәне биләүсе, белеүсе!" (Әл-Бәҡара, 268).**

Иншалла, был яҙмаларыбыҙҙа беҙ уҡыусыға шайтандың кешегә ҡарата ниндәй тоҙаҡтар ҡороуы, был күҙгә күренмәгән дошмандан нисек һаҡланырға һәм уға нисек ҡаршы торорға икәнлеге тураһында әйтербеҙ. Һис һүҙһеҙ, бының өсөн беҙ Изге Ҡөрьәндең һәм Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәтенең кире ҡаҡҡыһыҙ хәҡиҡәтенә мөрәжәғәт итербеҙ.

**Шайтан - һуғышсан һәм агрессив йән эйәһе.**

Кешегә булған көнләшеүе һәм нәфрәте уны кешеләргә ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып барырға мәжбүр итә. Ул Аллаһы Тәғәләнән кешенең юлына ҡапҡандар һәм тоҙаҡтар ҡорорға рөхсәт һораған һәм Аллаһтың хикмәте менән уға рөхсәт бирелгән. Шул ваҡыт шайтан ҙур көс һалып һәм һиҙгер аҡылын ҡулланып, кешене хаҡ юлдан сығарыр һәм иманһыҙлыҡҡа төшөрөр өсөн уның артынан туҡтауһыҙ күҙәтә башлаған.

Шайтан бик тәкәббер. Шайтан фәҡирлек һәм хәйерселек менән ҡурҡыта, гонаһ ҡылыуға этәрә. Шайтан Бөйөк Аллаһы Тәғәлә тураһында бәхәсләшергә саҡыра:"Кешеләр араһында наҙан килеш Аллаһ хаҡында бәхәсләшергә әүәҫ кешеләр бар. Улар - аҙғын шайтанға эйәргән кешеләр", - тип яҙылған Ҡөрьәндең "Әл-Хаж" (22/3) сүрәһендә. Шайтан мосолмандарҙы талаштырырға тырыша: "Кешеләремә әйт, иң татлы һүҙҙәр генә һөйләһендәр. Юғиһә шайтан улар араһында ғауға сығарыусы. Шайтан кешенең иң хәтәр дошманы" (Әл-Исра). Шайтан малын әрәм-шәрәм итеүселәрҙең ҡәрҙәше: "Малын әрәм-шәрәм итеүселәр - шайтандың ҡәрҙәше" - тип яҙылған Ҡөрьәндең -"Исра" сүрәһенең 27-се аятында. Әгәр кеше малын әрәм-шәрәм итә икән, был эштә уға шайтан иш булыр. Шайтан әйберҙәрҙең исемен юрый үҙгәртә һәм аҙаштыра. Шайтан Аллаһы Тәғәлә билдәләгән хәҡиҡәтте йәшерергә, уны ялған менән алмаштырырға тырыша: Ҡөрьәндең "Ән-Ниса" сүрәһенең 119-аятында былай тип әйтелә: "Уларҙы, һис шикһеҙ, тура юлдан яҙҙырырмын һәм күңелдәрендә нәфсе-хыялдар тыуҙырырмын, һәм уларға Аллаһ яралтҡанды үҙгәртергә бойорасаҡмын".

**Шайтан бөтә нәмәне лә һул ҡулы менән эшләй:** Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Һеҙҙең барығыҙ ҙа уң ҡулы менән ашаһын, уң ҡулы менән эсһен һәм әйберҙе уң ҡулы менән бирһен. Ә шайтан һул ҡулы менән ашай, һул ҡулы менән эсә, әйберҙе һул ҡулы менән ала һәм бирә", - тигән (Хәҙистән, Ибн Маджа).

**Шайтан намаҙҙы йәмәғәттән айырылып яңғыҙ уҡыған кешене ыҙалата:** Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Әгәр ауылда йәки икенсе берәй мәсеттә өс мосолман булып та, улар йәмәғәт менән намаҙ уҡырға тормаһалар, уларҙы шайтан уратып алыр. Бергә ныҡлы тотоноғоҙ. Бүре лә бит көтөүенән айырылған һарыҡты ашай", - тигән (Хәҙистән, Әбү Дауыт).

**Шайтан намаҙ ваҡытында мосолманға бәйләнә:** Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Шайтан һеҙҙе намаҙ ваҡытында ыҙалатыр. Һәм намаҙ ҡылыусы яңылышмайынса йәки намаҙҙың нисә рәҡәғәтен уҡығанын онотмайынса сигенмәй. Әгәр шулай була ҡалһа, һуңғы ултырышта әт-Тәхийәтте уҡығандан һуң ике тапҡыр сәждә итегеҙ һәм һуңынан сәләм бирегеҙ", - тигән (Хәҙистән, Әбү Дауыт).

**(Дауамы бар).**

*ӘЙ, ЯҘМЫШ...*

# ХӘМЕР БӘЛӘЛӘРЕ ЯМАН

-Әсәй, мин ҡараңғынан ҡурҡам... Кемдер ишектән инеп килгән кеүек... Әсәй!..

Ҡыйғас ҡашлы, матур ҡыҙсыҡтың көн дә шулай һаташыуын ишеткән һәр кемдең йөрәге әрнер, һыҡтар ине. Балаһы өсөн өҙөлгән әсә дауаханаға барып, бар табиптарҙы тиерлек аяҡҡа баҫтырыр, шул уҡ ваҡытта мәсеткә лә, им-томсо әбей-һәбейгә лә алып барып өлгөрөр ине. Тик был балаға әсәһе түгел, ә апаһы һаҡ ҡына ҡағыла: "Уян, аҡыллым, тағы һаташа башланың".

Ҡыҙсыҡ тертләп, ырғып тороп ултыра. "Әсәйемде төшөмдә күрҙем. Ул мине тиҙҙән килеп алам, тине. Беҙҙең үҙ йортобоҙ буласаҡ. Унда әсәйем менән сәскәләр ултыртырбыҙ, ул миңә көн дә тәмлекәстәр бешерер..." Бала яҡшы төшөн онотоп ҡуймайым тигән кеүек, тиҙ-тиҙ генә һөйләй ҙә, тағы йоҡоға тала.

...Ҡасандыр йәшлек нурҙары бөркөлгән был ҡатындың йөҙөнә хәҙер ҡарағы ла килмәй. Бына нисәмә йылдар инде ул балаларын әле бер, әле икенсе кешеләргә ташлап, эсеп йөрөй. Аҙналап түгел, айлап юғалған был ҡатын үҙ йортона кеше индергән. Тик йорт өсөн түләүҙән килгән аҡса уның аҙып-туҙып йөрөүенә китә. Балаларының асмы-туҡмы, сит кешеләр ҡыйырһытмаймы икәнлегендә эше лә юҡ. Бар уйы - нисек булһа ла хәмерҙән өҙөлмәү. Балалар пособиеһы ла йәйге кафеларҙа туҙҙырыла. "Һәр кем үҙе теләгәнсә рәхәтләнеп йәшәргә тейеш. Балаларҙы ҡайны-ҡәйнә ҡарашырға тейеш инде ул. Был уларҙың ейәндәре алдындағы бурысы",-тип кенә ебәрә ул.

Әлбиттә, балаларҙың кәрәкмәгән әйберҙәй яҙмыш еленә ташланыуында ата кешенең дә ғәйебе бар. Тик уның уйында ла бер нәмә-көмөшкә. Оҙон ҡышҡы төндәрҙә улар ҡатыны менән икәүләп эске ойоштороғанда балалар өсөн ысын тамуҡ башлана. Сөнки бында уларҙы яҡлашыр, һуғышып киткән ата-әсәһен айырыр, тәмле ҡаймаҡ айыртып ашатҡан өләсәләре юҡ. Бер ниҙән тартынмаған ир менән ҡатын рәхәтләнеп ете ҡатлап һүгенә, бер-береһенә бысаҡ менән киҙәнә.

Эйе, кемдер Хоҙайҙан йылдар буйы бала һорап ялбара, кемдер алмалай ул һәм ҡыҙҙарының ҡәҙерен белмәй. Шул уҡ ваҡытта ошо балаларҙың ата-әсәһенән ваз кисмәүе, уларға бер ҡасан да насар һүҙ тейҙермәүе ғәжәпләндерә. Күрәһең, йәндәре наҙға һыуһаған был малайҙар һәм ҡыҙҙар йөрәгендәге бар мөхәббәтен тик ата-әсәһенә бүләк итәлер. Бәлки, был ата-әсә берҙән-бер көндө хәмергә ҡарағанда, бала һөйөүенең күпкә ҡәҙерлерәк булыуын аңлар. Тиҙерәк килһен ине ул көн...

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Уңышһыҙлыҡтар ҙа уңышҡа килтерә ала

Бәләкәй генә Африка ҡәбиләһендә аборигендар араһында йәшәгән миссионер Роберт Ливингстон тураһында шундай бер риүәйәт йәшәй. Ул һирәк осрай торған ҡан сире менән ауырыған һәм сәләмәтлеген бер кимәлдә тотоу өсөн уға көнд дә яңы һауылған кәзә һөтө эсеп торорға кәрәк булған. Бер саҡ ул йәшәгән ауылға ҡәбилә башлығы килә һәм Ливингстондың кәзәһен оҡшата. Ә был ҡәбиләлә ауыл халҡының бөтә әйберен башлыҡтың милке итеп ҡарау йолаһы булған. Ҡәбилә йолаһын күҙәтеүҙән башҡа сара ҡалмағас, миссионер үҙенең ғүмере өсөн мөһим булған әйберҙән яҙыуын аңлаһа ла, башлыҡҡа үҙенең кәзәһен тәҡдим иткән.

Башлыҡ Ливингстондың был изге ғәмәлен баһалап, ауылдан китер саҡта уға һәр ваҡыт үҙе менән йөрөткән оҙон таяғын бүләк иткән. Өйгә ҡайтҡас, Ливингстон үҙенең көндәлек эскән кәзә һөтө булмағас, үлеп ҡуйыуҙан ҡурҡыуын ҡолона һөйләп, көйәләнергә һәм зарланырға тотонған. Ҡоло тулҡынланыуҙан өҙөк-өҙөк тауыш менән: "Әфәндем, башлыҡ һеҙгә нимә бүләк иткәнен аңлайһығыҙмы һеҙ? Был уның скипетры, йәғни хөкөм билдәләй торған семәрле таяғы, хәҙер уның биләмәһендәге һәр әйбер - һеҙҙеке!"

Ә беҙҙең эштәге коллегаларыбыҙҙы, ғаилә ағзаларыбыҙҙы аңламауҙан хәтеребеҙ ҡалған йәки бошонған саҡтарыбыҙ күпме? Ниндәй генә ауырлыҡтар кисерергә тура килһә лә, беҙгә булған ыңғай ҡараш бөтәһен дә үҙгәртергә, хатта таяҡты скипетрға әүерелдерергә һәләтле булыуын аңлау мөһим. Хатта эштә беҙгә бирелгән бәләкәй генә баһа ла хеҙмәт баҫҡысы буйынса өҫкә үрләргә булышлыҡ итә ала.

Тарихҡа күҙ һалһаҡ, донъяға нимәлер иҫбат итергә тырышып та, уңышһыҙлыҡ кисергән, уның ҡарауы, күпкә мөһимерәк әйберҙе тапҡан билдәле ғалимдар һәм тикшеренеүселәр тормошонан әллә күпме миҫал килтерә алабыҙ. Мәҫәлән, Христофор Колумб Һиндостанға яңы сауҙа юлы табырға тырышҡан. Азия ярына килеп туҡтау урынына, алыҫ саҡрымдарҙа ятҡан әлегә билдәһеҙ, аҙағыраҡ Америка тип аталған ҙур ер ситенә барып сығыуы уны ниндәй күңел төшөнкөлөгө кисерергә мәжбүр иткән! Әммә ошо уңышһыҙлығы арҡаһында тарихта тәүге ер асыусы булараҡ билдәлелек яулаған ул.

Уйҙарыбыҙҙы йөҙ ҙә һикһән градусҡа бороп, беҙ ҙә тормошобоҙҙо яңыса ҡора алабыҙ. Әгәр беҙ аңыбыҙға кире уйҙар һәм ҡурҡыу инеп урынлашыуға юл ҡуябыҙ икән, беҙҙең пландарыбыҙ уңышһыҙлыҡ кисерәсәк, һәм үҙебеҙҙе ышанысһыҙ һәм яҡлауһыҙ итеп тоясаҡбыҙ. Әммә тирә-йүнгә кире мөнәсәбәт беҙҙе ни тиклем сикләй икәнен аңлау менән беҙ фекеребеҙҙе ыңғай уйҙарға туплай башлайбыҙ. Даими ыңғай мәғлүмәт таяҡты - скипетрға, тормошҡа ашмаҫтай хәл-ваҡиғаны бәхет һәм уңыш өсөн яҡшы мөмкинлеккә әүерелдереүгә һәләтле.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 1 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20, 04.30 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 71-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Жди меня"
21.00 Время
21.30 "Попытка Веры", 1-я серия. Сериал
22.30 "Владислав Листьев. Мы помним". Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Познер"
01.10 "Гении и злодеи"
01.40, 03.05 "В тылу врага: ось зла"
03.00 Новости
03.40 "За секунду до катастрофы: цунами в Альпах"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 08.30, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
06.25 Церемония закрытия XXI Зимних Олимпийских игр в Ванкувере. Прямая трансляция
09.05 "Единственная..." Мелодрама
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Сладкая женщина". Мелодрама
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Найденыш". Драма
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.30 "Вести-Башкортостан"
17.35 "Ефросинья", 10-я серия. Сериал
18.35 "Дворик", 1-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине", 30-я серия. Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Котовский", 1-я и 2-я серии. Сериал
22.50 Церемония закрытия XXI Зимних Олимпийских игр в Ванкувере
00.50 "Олимпийское спокойствие. Секреты безопасности"
01.45 "Игра на выживание". Боевик
03.40 "Комната смеха"

### НТВ

06.05 "Графиня де Монсоро". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-2". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал, 1-я часть
21.30 "Тульский - Токарев", 1-я и 2-я серии. Остросюжетный сериал
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Роковой день"
01.45 "Заткнись и поцелуй меня"
03.35 "Охота на призраков"
05.35 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории". Мультфильм

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.10 Погода**
**10.15 "Полезные новости"**
**10.20 "Виктория"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.35 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыкальная шкатулка"**
**13.35 "На своей земле"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 Финальный тур чемпионата Ассоциации студенческого баскетбола**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Наш мир"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Трудом умножая красоту..." С. Сулейманова**
**21.00 "Здоровье"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Спортивный интерес"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Дневник "Хылыукай"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 2 МАРТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 72-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Попытка Веры", 2-я серия. Сериал
22.30 "Ванкувер. Проверка на прочность". Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.20 "На ночь глядя"
01.00 Ключ от всех дверей". Триллер
03.00 Новости
03.05 "Отскок". Комедия

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.45 "Территория красоты". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов". Сериал
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.35 "Ефросинья", 11-я серия. Сериал
18.35 "Дворик", 2-я серия
19.00 "Слово женщине", 31-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Котовский", 3-я и 4-я серии
22.50 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий"
23.50 "Вести+"
00.10 "Почтальон". Фантастический боевик
03.50 "Люди в деревьях-2"

### НТВ

06.05 "Графиня де Монсоро". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-2". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
21.30 "Тульский - Токарев", 3-я и 4-я серии. Остросюжетный сериал
23.35 "Главный герой"
00.20 "Главная дорога"
00.55 "Холостой выстрел". Детектив
02.40 "Огонь из ниоткуда". Триллер
04.10 "Доза". Детектив
05.25 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории". Мультсериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Магариф"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.35 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 "Слово о матери"**
**15.50 Мультфильм**
**16.00 "Родные напевы"**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Теплый дом"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 "Аплодисменты". Х. Яруллин**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Дневник "Хылыукай"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**23.50 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 3 МАРТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 73-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Попытка Веры"
22.30 "Школа". Сериал
23.00 Ночные новости
23.30 Футбол. Товарищеский матч. Сборная России - сборная Венгрии. Прямая трансляция из Венгрии
01.30, 03.05 "Август". Драма
03.00 Новости
03.20 "Ящер"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Главная тайна. Республика ШКИД"
10.00 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.45 "Территория красоты"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов". Сериал
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Ефросинья", 12-я серия
18.35 "Дворик", 3-я серия
19.00 "Слово женщине", 32-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Котовский", 5-я и 6-я серии
22.50 "Исторические хроники" с Николаем Сванидзе"
23.50 "Вести+"
00.10 "Бабье царство". Драма
02.00 "Кинескоп" с Петром Шепотинником". Берлинский кинофестиваль
03.05 "Люди в деревьях-2"
04.00 "Пропавший"

### НТВ

06.05 "Графиня де Монсоро"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Первая кровь"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-2". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
21.30 "Тульский - Токарев", 5-я и 6-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Поздний разговор"
00.25 "Незнакомка". Боевик
02.20 "Пчелы-убийцы". Триллер
04.05 "Обмороженные". Комедия
05.25 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.30 "Действующие лица"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.30 "Дочь Иргиза". Ф. Мустафина**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.50 Мультфильм**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Виктория"**
**17.55 "Сэнгелдэк"**
**18.10 Новости (на башк. яз.)**
**18.35 "Родословная малой Родины"**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Москва). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Историческая среда"**
**23.40 Хит-парад "Хрустальный соловей-2010". По окончании: погода**

## 4 МАРТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 74-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Попытка Веры". Сериал
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Школа"
00.00 Ночные новости
00.20 "Судите сами"
01.10, 03.05 "Гол!" Драма
03.00 Новости
03.30 "Акула"
04.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 Тайны следствия". Сериал
12.45 "Территория красоты"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов"
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Ефросинья", 13-я серия. Сериал
18.35 "Дворик", 4-я серия
19.00 "Слово женщине", 33-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Котовский", 7-я и 8-я серии
22.50 "Ледоруб для Троцкого. Хроника одной мести"
00.00 "Вести+"
00.20 "Жизнь взаймы". Драма
02.55 "Люди в деревьях-2"
03.50 "Пропавший"
04.35 "Городок"

### НТВ

06.05 "Графиня де Монсоро"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Первая кровь"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00, 23.15 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-2". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
21.30 "Тульский - Токарев", 7-я и 8-я серии
23.35 "Ограбление на Бейкер-Стрит". Детектив
01.45 "24-й день". Драма
03.35 "Та же любовь, тот же дождь". Драма
05.25 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.45 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.50 Мультфильм**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Учим башкирский язык"**
**18.20 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Крестьянский двор"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Атайсал"**
**21.00 "Галерея изящных искусств"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Действующие лица"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Дневник "Хылыукай"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 5 МАРТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо", 184-я серия
16.20 "Спальный район", 75-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Криминальные хроники"
18.50 "Поле чудес"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Любовь в большом городе". Романтическая комедия
23.10 "Переводчица". Триллер
01.30 "Чай с Муссолини"
03.40 "Еще один день"
05.10 "Акула"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия"
12.45 "Территория красоты"
13.40, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов"
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Ефросинья", 14-я серия
18.35 "Дворик", 5-я серия
19.00 "Слово женщине", 34-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время.Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Кривое зеркало"
23.40 "Монро". Мелодрама
01.35 "Блэйд-3: Троица". Мистический триллер
03.50 "Горячая десятка"
04.55 "Честный детектив"

### НТВ

06.05 "Графиня де Монсоро". Исторический сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Особо опасен!"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур!-2". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Суперстар" представляет". "Александр Серов. Я люблю тебя до слез"
22.50 "Мамма миа!" Мюзикл
01.05 "Женский взгляд"
01.40 "Ледяное сердце". Триллер
03.25 "Сердца". Драма
05.25 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.30 "Телекомпас"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.35 "Конь мой верный, конь мой вороной - Керчь"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Судьбы радужные нити"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.30 "Райхан"**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Народные мелодии"**
**17.30 "Йома"**
**17.55 "Сэнгелдэк"**
**18.10 "Новости" (на башк. яз)**
**18.35 "Родословная малой Родины"**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Минск). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Дневник "Хылыукай"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**23.50 Художественный фильм". По окончании: погода**

## 6 МАРТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Десять негритят"
07.30 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 Дисней клуб: "Чип и Дейл спешат на помощь", "Черный плащ"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Счастье есть!"
11.00 "Римма Маркова. Характер не сахар, душа - рафинад"
12.10 "Как стать принцессой". Комедия
14.10 "Однажды в Париже. Далида и Дассен"
15.30 "Женщины". Мелодрама
17.30 "Кто хочет стать миллионером?"
18.30 "Клуб веселых и находчивых"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы"
23.30 "Хороший год". Мелодрама
01.40 "Афера". Боевик
04.10 "Пенелопа"

### РОССИЯ 1

05.25 "Родная кровь". Драма
07.10 "Вся Россия"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00, 11.00, 14.00 "Вести"
08.10, 11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.25 "Соломенный бычок"
09.35 "Шла собака по роялю". Музыкальный фильм
11.20 "Качество жизни"
11.35 "Дела и люди"
11.45 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Телохранитель". Сериал
16.10 "Ты и я"
17.05 "Субботний вечер"
19.00 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Леший". Мелодрама
01.20 "Любовь с уведомлением". Романтическая комедия
03.25 "Настоящее преступление". Триллер

### НТВ

06.05 "Двадцать чудесных лет". Сериал
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
11.00 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Кремлевская кухня"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Адвокат". "Недопустимая самооборона". Детективный сериал
17.25 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.50 "Ты не поверишь!"
22.40 "Бандитки". Детектив
00.30 "Держи ритм"
02.55 "Рой". Триллер
05.25 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Доброе утро!"**
**08.40 Погода**
**08.45 Мультфильм**
**10.10 "Советы садоводам"**
**10.30 "Волшебный курай"**
**11.00 "Хрустальный соловей-2010"**
**12.00 Впервые на экране ТВ. П. Мэриме "Разыскивается Кармен". Спектакль Башкирского государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Сулпылар"**
**14.40 "Дарю песню"**
**15.55 Мультсериал**
**16.25 "Позитив"**
**16.55 Чемпионат России по волейболу. "Урал" (Уфа) - "Газпром-Югра" (Сургутский район). Прямая трансляция**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.20 "Дарю песню"**
**20.20 "Сэнгелдэк"**
**20.40 "Автограф". С. Валеева**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На сон грядущий"**
**22.40 "Дневник "Хылыукай"**
**23.05 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 7 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 Мультфильм
06.30 "Десять негритят"
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб": "Кряк-бригада", "Клуб Микки-Мауса"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Смак"
11.00 "Моя родословная"
12.00 Новости
12.20 "Блондинка за углом". Комедия
13.50 "Ералаш"
14.20 "Две звезды"
16.00 Футбол. Суперкубок России. "Рубин" - ЦСКА. Прямая трансляция (в перерыве - Новости)
18.00 "Золотая пара. Счастливы вместе"
18.40 "Красотка". Мелодрама
21.00 Воскресное "Время"
21.15 "Жестокие игры"
22.40 "Прожекторперисхилтон"
23.20 "Вавилон нашей эры". Боевик
01.10 "Крупная рыба"
03.30 "Погоня". Приключения

### РОССИЯ 1

05.45 "Будьте моим мужем". Комедия
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.35 "Утренняя почта"
09.10 "Что хочет девушка". Комедия
11.00, 14.00 "Вести"
11.10, 14.15 "Местное время. Вести-Башкортостан. События недели"
11.50 "Городок"
12.20 "Черчилль". Детективный сериал
14.25 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Честный детектив"
15.30 "Красная бурда" и ее друзья"
17.20 "Танцы со звездами". Сезон-2010"
20.00 "Вести недели"
21.00 "Превратности судьбы". Мелодрама
23.00 "Евровидение-2010"
01.50 "Вся правда о любви". Романтическая комедия
03.50 "Комната смеха"

### НТВ

06.05 "Двадцать чудесных лет". Сериал
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 QUATTRORUOTE
10.55 "Спасатели"
11.25 "Первая кровь"
12.00 "Дачный ответ"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Алтарь победы"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Адвокат". "Кавалергарда век недолог". Детективный сериал
17.25 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.55 "Чистосердечное признание"
20.25 "УГРО". "Шантаж". Сериал
00.00 "Авиаторы"
00.40 "Любовь к собакам обязательна". Комедия
02.35 "Благословенная Мария". Мелодрама
04.20 "Удар". Драма
05.45 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 "Для вас, ветераны!"**
**08.45 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**10.00 "Автолегенды"**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семэр"**
**12.05 "Байтус"**
**12.30 "Артылыш"**
**13.00 "Ледовые площадки Уфы"**
**13.15 "Дарю песню"**
**14.10 "Через годы, через расстояния..." Юбилейный концерт Г. Родионова**
**15.40 "Салям". Воскресный выпуск**
**16.00 "Дарю песню"**
**16.55 Открытый чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Рига). Прямая трансляция**
**19.30 "Уральский самородок"**
**20.05 "Любимые мелодии"**
**20.45 "Новое кино"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.40 Погода**
**22.45 "Самым любимым, дорогим..."**
**23.20 Художественный фильм. По окончании: погода**





**"Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәте "Башҡорт энциклопедияһы"ның (рус телендә) 1,2,3,4-се томдарын; "Салауат Юлаев" энциклопедияһын; "Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге"н һәм башҡа китаптар һата. Адрес: Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 55. Телефондар: 250-00-56; 250-03-92.**

ҺУҒЫШТЫ ҠУРАЛМАЙЫМ...

# ҺЕҘҘЕ ҠОЛ ИТӘСӘГЕМ ЮҠ,

## башым ҡайтмаһа, ҡайтмаç...



**Беҙ, һуғыш йылдары балалары, ошо афәт михнәттәрен үҙ елкәбеҙҙә татыған кешеләр. Минең атайым Йәнбулатов Зиннәт Сәмерхан улы ла, бөтә Башҡортостан ирҙәре кеүек, һуғыштың тәүге көндәренән үк яуға китә. Ул үҙенең эшләп йөрөгән тракторын танкыға алмаштыра, һуңғы һулышына тиклем шул танкыһынан айырылмай, Сталинград янында башын һала.**

Атайым һуғышҡа киткәндә мин тыумай ҙа ҡалғанмын. Әсәйем ауырлы көйө, тағы ла дүрт бала менән тороп ҡала. 1942 йылда хәрби комиссариаттан: "Ирегеҙ хәбәрһеҙ юғалды" - тигән ҡағыҙ килә. Шунан һуң беҙҙе "Һатлыҡ йән балалары" тип үсекләй торған булғандар. Әсәйебеҙ атайыбыҙҙы гүргә ингәнсә көттө. Минең хәтеремдә бер ваҡиға нык уйылып ҡалған. Бер көн әсәйемде контораға саҡырттылар. Унан әсәйем илап ҡайтты, ләкин беҙгә бер нәмә лә һөйләмәне, беҙ ҙә һораманыҡ. Унда ниндәй һөйләшеү булғанын бер нисә көн үткәс кенә белдек. Баҡтиһәң, Шәмсиямал инәйҙең бер йомғаҡ майы юғалған булған һәм шуны әсәйемдән күргәндәр икән. Милиционер: "Алдым, тип әйт, юғиһә башынды төрмәлә серетәм, һатлыҡ йән бисәһе", - тип, әсәйемдең күкрәгенә наганын терәгән, әсәйем, "алманым", тигән. Һуңынан ғәйепле кешене тапҡандар, май бурҙары май эйәһенең үҙенең улдары булған. Әсәйемдән хатта ғәфү ҙә үтенмәгәндәр...

Һуғыш михнәттәрен һөйләй китһәң, әллә нисәмә том китап яҙырға булыр ине. Атайымдың һуғыштан яҙған хаттары һаҡланмаған, ул ваҡытта әсәйемдә хат һаҡлау ҡайғыһы ла булмағандыр. Биш баланы нисек тә аçырарға, ашатырға кәрәк булған бит. Атайым хатҡа яҙған бер нисә шиғырҙы ул ваҡытта хат ташыусы булып эшләгән Хәлиҙә апай ауыҙынан ишеттек. Бына уларҙың бер нисәүһе:

Беҙ барабыҙ ҡырҙарҙан,
Оҙон-оҙон юлдарҙан.
Немец эте пуля ала
Беҙҙең ҡорос ҡулдарҙан.

Иртән тороп, кискә инһәк,
Фашистарҙы атабыҙ.
Быйыл ҡыштың буйы менән,
Ҡар өҫтөндә ятабыҙ.

Ел ҡапҡаны кемдәр эшләй,
Уны елдәр күп аса.
Беҙҙең көскә сыҙай алмай,
Дошмандар кире ҡаса.

Тыумай ҡалған балаҡайым,
Атай, тип әйтә алмаç.
Һеҙҙе ҡол итәсәгем юҡ,
Башым ҡайтмаһа, ҡайтмаç.

Ғүмер буйы "Атай" тигән һүҙҙе әйтә алмай йәшәнем. Ошо бәхеттән мәхрүм итте мине һуғыш. Шуға мин һуғышты ҡуралмайым.

Балаларым "атай", тигән һайын,
Һине, атай, иҫкә төшөрәм.
"Атай" һүҙен әйтә алмай үҫтем,
Шуға ауыр уйҙар кисерәм.

"Атай" һүҙен әйтә алмай үҫтем,
Ҡыуанамын, әйтһә балалар.
Атаһынан улар айырылмаһын,
Имен генә торһон донъялар.

**Файҙа БУЛАТОВА-ЙӘНБУЛАТОВА.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

# БАЙРАМ ТҮГЕЛ ЕҢЕҮ КӨНӨ...

## ә күҙ йәшле хәтирәләр көнө

**Бына тағы Еңеү байрамы етеп етә. Һуғыш күрһәткән михнәттәрҙе ҡабат-ҡабат иҫкә төшөрөргә тура килә шулай. Һуғыш эсендә йөрөмәһәк тә, уның бөтә ауырлығы беҙгә, тылда ҡалғандарға төштө. Ҡәһәрле һуғыш күптәребеҙҙе тол ҡалдырҙы, һөйгән йәрҙәребеҙҙән айырҙы, балаларыбыҙҙы етем итте.**

Әсәйем мин бала саҡта уҡ (10 йәштә) үлеп ҡалһа, һуғыш атайымдан да айырҙы. Ул, өлкән булыу сәбәпле, һуғышҡа барманы. 1944 йылда Иҫке Монасип ауылынан Ырғыҙлы яҡтарына эшкә ебәрәләр. Айҙан ашыу эшләп, ҡайтырға сыҡҡан сағында һыуыҡ тейҙереп, ауылына саҡ ҡайтып йығыла һәм шунан мандый алмай, үлеп ҡалды. Ике ағайым һуғышта, ә янымда 7-8 йәшлек Сәмсүрә һеңлем. Үҙем 16 йәшлек кенә сағымда Ғариф тигән егеткә кейәүгә сыҡтым. Уға ла ни бары 17 йәш ине. 1943 йылда һуғышҡа китте. Ике хаты килеп ҡалды, өсөнсөгә "ҡара ҡағыҙ" алдым.

1946 йылдың декабрь айында Килдеғол ауылына һуғыштан ҡайтҡан Көмөшбаев Шәһит Исмәғил улына димләү буйынса кейәүгә сыҡтым. Ирем һеңлем Сәмсүрәне лә үҙ ҡыҙылай ҡарап үҫтерҙе. Үҙебеҙ биш балаға ғүмер бирҙек. Насар йәшәмәнек, балалар ҙа йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне. Әммә һуғыш һалған тән һәм йән яралары һәр саҡ үҙен һиҙҙереп торҙо. Иремдең аяғына пуля тейеп ямалған, операциянан һуң бер аяғы һыҙлап ыҙалатыр ине. Маңлайын һыҙып үткән пуля тураһында һөйләр ҙә илап алыр ине. Һыҙланыуҙарын һис кешегә һиҙҙермәне. Шул яралар, һуғыш булмаһа, бәлки, ул да оҙағыраҡ йәшәр ине.

Үҙем тәүге иремдең фамилияһын ташламаным. Хәлитова фамилияһында йөрөйөм. Йәшлегемдең тәүге шатлыҡтары булып йөрәгемдә һаҡланды, ғүмеремдең әсе һағыштары булып оҙата килде мине ошо фамилия. Утыҙ йыл инде яңғыҙ йәшәйем. Гәзит уҡыйым, радио тыңлайым, телевизор ҡарайым. Һуғыш тураһында һөйләһәләр, күҙгә йәш тула. Миллионлаған ҡорбандар биреп, ҡайғы-хәсрәттәр менән яуланған Еңеү, һағыш менән үткән ғүмер - улар беҙҙе баҡыйлыҡҡа күскәнсе оҙатып килер инде. Еңеү байрамы ул бит беҙҙең өсөн байрам түгел - ул күҙ йәштәре аша һөйгәндәребеҙҙе хәтерләү, һуғышҡа тиклемге гүзәл көндәребеҙҙе иҫкә алыу, рәхимһеҙ һуғышты ҡәһәрләү көнө.

**Хәнифә ХӘЛИТОВА,**
**Бөрйән районы Килдеғол ауылы.**

# ОЛАТАЙҺЫҘ, ӨЛӘСӘЙҺЕҘ ИТТЕ

**- Әсәй, әсәй, башҡаларҙың ҡартатайҙары икәү, минеке берәү, өләсәйем дә юҡ, - тине улым. - Ҡайҙа улар?**

**Мин 6 йәшлек улыма яуап эҙләгәнсе, ҙур улым:**

**- Ҡунаҡҡа киткәндәр, - тине.**

**- Ә ни эшләп ҡайтмайҙар? Беҙҙе яратмайҙармы ни? - тип ныҡыша кесеһе.**

Ә мин, әсәй кеше, күҙ йәштәремде балаларыма күрһәтеүҙән уңайһыҙланып, артыма боролам. Әй, балаҡай, ҡайтыр ерҙә түгел шул ҡартатайың менән өләсәйең, тик быны һиңә нисек аңлатырға?

Мин үҙем дә бәләкәй саҡта атайымдан ҡартатай менән ҡартәсәй таптырып, аптырата торғайным. Хәҙер үҙем әсәй булғас ҡына аңым етә, ә ул саҡта... Мине ҡартатай менән ҡартәсәйһеҙ ҡалдырған, балаларымдың да шул бәхетен тартып алыусы ул - һуғыш. Шуға ҡуралмайым мин һуғышты. Әллә күпме ваҡыт айырып торһа ла, һаман ҡара күләгә һымаҡ арттан эйәрә.

Һуғыш башланғанда атайыма 2 йәш кенә була. 1895 йылғы атаһы Шәһимәрҙән Шәһиғәлин 1914 йылғы һуғышта ҡатнашҡан кеше була. 1942 йылдың 6 мартында ул һуғыш башланыу менән фронтҡа оҙатылған бер туған ҡустыһы Әбдрәхман (1906) артынан һуғышҡа алына. Ә 1900 йылғы ҡустыһы Әбдрәхимде лә колхоз рәйесе булып эшләп йөрөгән еренән 1942 йылда һуғышҡа алалар. Шулай өс бер туған төрлө ваҡытта һуғышҡа алына. Береһенә лә тыуған яҡтарына ҡайтырға насип булмай, уларҙың исемдәре тик "Хәтер китабы"нда. Атайымдар өс бала - апаһы, ағаһы, атайым ҡартәсәйем ҡулында ҡала. Ҡартәсәйемә үҙенең балаларын ғына түгел, һуғышҡа киткән ике ҡәйнешенең дә 3-әр балаһын эргәһенә алырға тура килә, сөнки килендәре үлеп китә.

- Әгәр һуғыш булмаһа, йәки өс ағайҙың берәүһе генә һуғыштан тере ҡайтһа ла, яҙмышыбыҙ бөтөнләй икенсе йүнәлеш алған булыр ине, - ти торғайны атайым. Бәләкәй саҡтан һаулыҡҡа туймаған атайыма һуғыш үҙ эҙҙәрен нык һала. Ошо уҡ Ҡыпсаҡ ауылынан, яҙмыштары ла оҡшаш булған әсәйем менән матур тормош ҡороп йәшәп ятҡан мәлдә, 40 йәшендә ауыр сиргә дусар була.

Әсәйемдең атаһы Аҡҡужин Әбделхәй ҙә һуғыштан ҡайтмай. 10 класта уҡып йөрөгәнендә әсәйемдең әсәһе лә үлеп китә. Яҡшы уҡыһа ла әсәйемә уҡыуҙы ташларға тура килә. Атайымдың ауырый башлауы бәләләрҙең башы ғына булған икән. 45 йәшлек кенә әсәйебеҙ беҙҙе, 4 балаһын ҡалдырып, гүр эйәһе булды. "Тере кеше нисек тә тереклек итә, йәшләй киткәндәргә ҡыйын", - тигәндәре дөрөҫтөр. Атайым әсәйемдән ҡалып 14 йыл йәшәне, беҙ ҙә һәр беребеҙ үҙ урыныбыҙҙы таптыҡ, донъя ҡорҙоҡ.

Тик бына балаларымдың ҡартатай менән өләсәйҙәрен таптырыуы үҙәкте өҙә. Мине генә түгел, балаларымды ла ҡартатайһыҙ, өләсәйһеҙ иткән өсөн һуғышты ҡуралмайым. Башҡа бер ваҡытта ла был мәхшәр ҡабатланмаһын, донъябыҙ имен, күгебеҙ аяҙ булһын.

**Зөмәрә АҠҠУЖИНА.**
**Йылайыр районы Йылайыр ауылы.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Февраль айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Суринды, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Мәрфуға Мырҙабулатованы, Иҫке Сибай ауылынан Айһылыу Тимерәсованы, Ниғәмәт ауылынан Гөлкәй Рыҫмөхәмәтованы, Билал ауылынан Гөлдәр Әлибаеваны, Йылым ауылынан Ғәли Фәхретдиновты, Йәрмәкәй районы Усман-Ташлы ауылынан И. Зарифуллинаны, **Дәүләкән районы** Ҡырҙас ауылынан Ф. Миңлеғәлинаны, **Бәләбәй ҡалаһынан** З. Слющенкованы, **Бәләбәй районы** Ановка ауылынан Р. Ибраһимованы, Зөләйха Хәбированы, **Әлшәй районы** Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылынан Ғайсар Садиҡовты, Мәрфуға Шәйхетдиновны, **Нуриман районы** Яңы Субай ауылынан Зәйтүнә Ғафарованы, **Ғафури районы** Сәйетбаба ауылынан Айгөл Шәйхулованы, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Исмәғил Яхинды, **Баймаҡ ҡалаһынан** Ислам Һабанғолов, Әхмәткәрим Хәйбуллин, Низаметдин Көмөшҡоловты, **Ейәнсура районы** Үтәғол ауылынан Миңлебай Байбулатовты, Малай Муйнаҡ ауылынан Рәйсә Аҡбашеваны, **Хәйбулла районы** Вәлит ауылынан Нәйлә Мостафина, Әбделнасир ауылынан Дауыт Ишмырҙинды, **Ишембай районы** Ҡолғона ауылынан Заһиҙә Мусина, **Ҡырмыҫҡалы районы** Алайғыр ауылынан Ғәлинур Ишемғоловты, **Учалы ҡалаһынан** Л. Байрашованы, **Әбйәлил районы** Буранғол ауылынан Сәүиә Сабитованы, **Учалы районы** Ҡоҙаш ауылынан Гүзәл Рәхмәтуллинаны, Һәйтәк ауылынан Ләлә Фәррәхованы, Мәҫкәү ауылынан Наил Бүләковты ихлас ҡотлайбыҙ!

**Көн һайын бәләкәй генә булһа ла уңыштарға өлгәшеп, еңеүҙәр яулап, Хоҙай Тәғәлә мәрхәмәттәренә өлгәшеп йәшәргә яҙһын һеҙгә. Күңел тыныслығы бер ҡасан да ташламаһын, сәләмәтлек һәм бәхет алдағы көндәрҙә лә тоғро юлдашығыҙ булһын!**

**Изге теләктәр менән,**
**"Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2 мартта** Т. Дәүләтбирҙинаның **"Минең ғаиләм"** мелодрамаһы.

**3 мартта** Т. Миңнуллиндың **"Мулла"** драматик хикәйәһе.

**4 мартта** М. Буранғоловтың **"Шәүрәкәй"** романтик-музыкаль драмаһы.

**5 мартта "Бар гүзәллек ҡатын-ҡыҙҙан..."** байрам концерты.

**6 мартта** Ф. Бүләковтың **"Эх, күгәрсенкәйҙәрем!"** мелодрамаһы.

### Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 мартта** 12.00 сәғәттә М.Кәримдең **"Беҙҙең өйҙөң йәме"** спектакле.

**3 мартта** 19.00 сәғәттә М.Кәримдең **"Йәләлетдин атай"** спектакле.

**4 мартта** 19.00 сәғәттә Т.Миңнуллиндың **"Йәнкиçәккәйем"** музыкаль комедияһы.

**6 мартта** 18.00 сәғәттә И.Зәйниевтың **"Люстра"** трагикомедияһы.

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

Популяр йырсы һәм оҫта алып барыусы **Рөстәм Ғиззәтуллин** яҙҙың иң матур байрамдарының береһе - 8 март уңайынан гүзәл заттарға ҙур концерт гөлләмәһе әҙерләй. **"8 март менән!"** тип аталған концертта Алина Дәүләтханова менән Рәил Өмөтбаев ҡатнашасаҡ.

ТАМАШАСЫҒА ӨНДӘШЕҮ

# БАҺАЛАУ ӨСӨН...

## талантлар ижад иткәнде тамаша ҡыл

**Театр донъяһын аҙмы-күпме белгән кешеләр өсөн билдәле факт - әгәр ҙур, ҡупшы залдарҙа классик пьесалар, билдәле драматург әҫәрҙәре ҡуйылһа, кесе залдар эксперименталь майҙансыҡ, яңы формалар, яңы тәжрибәләр өсөн бирелә. Театр үсешкән һайын, ул ҡыйыу эксперименттарға әҙер була, репертуарын киңәйтергә ашыға.**

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры иһә төрлө эксперименттар өсөн ҙур залын да, кесе залын да бирергә әҙер. Милли репертуар менән йәнәш Проспер Мериме, Кен Кизи әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған тамашалар урын ала. Сыңғыҙ-хан хаҡында риүәйәтте лә, беҙҙең Урал-батыр эпосы буйынса ҡуйылған спектаклдәрҙе ҡыйыу эксперимент тип атарға булалыр.

Көнбайыш мәҙәниәтенең, фәлсәфәһенең, әҙәбиәтенең төп объекты - ул Кеше. Уның психологияһы, уның шәхес булырға ынтылыуы, уның эске кисерештәре. Көнсығыш мәҙәниәтенең төп геройҙары иһә үҙен асып бирергә ашыҡмай, үҙенең етешһеҙлектәрендә, психикаһының аңлайышһыҙ күренештәрендә соҡсонмай. Үҙен әҙәпле, тыйнаҡ тотоп, камиллыҡҡа ынтыла, бөйөк маҡсаттар ҡуйып йәшәй. Көнсығыш мәҙәниәте әкиәткә тартым, көнбайыш мәҙәниәте иһә беҙҙе шапылдатып ергә төшөрә лә, беҙҙең алға көҙгө килтереп ҡуя.

Европа менән Азия ҡушылған ерҙә көн күргән башҡорт халҡының мәҙәниәте көнсығыш традицияларында үсешһә лә, беҙ бер ҡыйынлыҡһыҙ көнбайыш традицияларын да үҙләштерәбеҙ. Шуның өсөн дә, бер яҡтан, беҙҙең шиғриәт бай һәм көслө, икенсе яҡтан, Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшина кеүек романистар феномены ла бар.

Театр, әҙәбиәт, һынлы сәнғәтте, ғөмүмән, донъя мәҙәниәтен күҙаллағанда бар ижад кешеләре, алдынғы ҡарашлы кешеләр аралашып, бер-береһенең фекерләү кимәлен үстереп йәшәгәндә генә мәҙәниәт ысын мәғәнәһендә үсешә ала, үҙенсәлекле бер феномен булып балҡый, тигәнгә инанаһың. Үкенескә ҡаршы, әлеге көндәрҙә беҙҙең талантлар бөтөнләй тиерлек бер-береһенең ижад емеше менән ҡыҙыҡһынмай, үҙ ҡаҙанында ҡайнай. Ошо арҡала ла беҙҙең мәҙәниәттә ниндәйҙер яңы исемдәр балҡып китмәй. Шуға ла мин уҡыусыларҙың, айырыуса ижади йәштәрҙең иғтибарын беҙҙең академия театрының яңы спектаклдәренә йүнәлтә килә. Яңыраҡ ҡына уларҙың репертуарында француз режиссеры ҡуйған бик тә үҙенсәлекле, фәлсәфәүи "Сабырҙар һәм сәйерҙәр" спектакле ҡуйылды. Был спектакль беҙҙең гәзит-журналдарҙа ниндәйҙер шау-шыу, бәхәс ҡуптарыр, тип өмөт ителгәйне. Юҡ, бер кем дә тиерлек күрмәне лә, ишетмәне лә...

Ошо көндәрҙә Мәскәүҙән ҡайтҡан яҡташыбыҙ Нәркәс Искәндәрова театрҙа легендар Вуди Аллендың пьесаһы буйынса "Хәйерле иртә, Энид!" исемле спектаклен тамашасы хөкөмөнә сығара. Яратҡан артистарыбыҙ Хәмит Яруллин, Эльвира Юнысова, Алмас Әмиров, талантлы йәштәребеҙ уйнаған был психологик тамашаны ижадсыларыбыҙ ҙа, тамашасыларыбыҙ ҙа ҡарап, фекерен үстерһен ине.

Был мәҡәлә ниндәйҙер анализ биреү маҡсатын ҡуймай. Минең маҡсат - башҡорт тамашасыларын яңы театр тәжрибәләренә, йәштәрҙең милли театрҙар ниндәйҙер яңылыҡ индерергә тырышыуына иғтибарлыраҡ булыуға өндәү. Европа менән Азия ҡушылған ерҙә универсаль күренештәр тыуырға тейеш. Тик уларҙы потенциаль тыуҙырыусыларҙың аң, зауыҡ, белем кимәле үсешкән булырға тейештер. Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙҙең мәҙәниәттәге, әҙәбиәттәге ваҡиғаларға вайымһыҙ булһаҡ, бер кем дә ситтән килеп, беҙҙе донъя кимәлендә балҡытмаясаҡ. Ошо тәглимәтте бер ҡасан да иҫтән сығарырға ярамайҙыр.

Шулай итеп, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры һеҙҙе "Хәйерле иртә, Энид!" спектакленә саҡыра. Мәҙәни ваҡиғаларҙан ситтә ҡалмағыҙ.

**Зөһрә БУРАҠАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЕҢЕҮ ЯҠШЫМЫ,

## әллә еңелеү тойғоһон кисереүме?

Иртәме, һуңмы,яңылыш уйҙарың хаталы һөҙөмтәгә килтерә.

**(Джулиан Хаксли).**

Ҡыҙ-ҡатын һәм алтын - ут ялҡыны кеүек. Уларға ҡараһаң - тәнең яна, ҡағылһаң - үҙең янаһың.

**(Кәбир).**

Һуғышта ни яҡшы - дошманыңды еңеүме, әллә еңелеү тойғоһон кисереүме - быны беҙ белмәйбеҙ.

**(Вьяса).**

Ирмен тигән ир үҙен ғәйепләр, ваҡсыл ирҙәр башҡаларҙан ғәйеп эҙләр.

**(Конфуций).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Арыҫлан, бүре һәм төлкө бергәләп һунарға барырға һөйләшә. Әлбиттә, арыҫлан был эшкә әллә ни шатланмай, әммә баш тарта ла алмай. Быны улар бейек тау башына артыла. Һунар уңышлы килеп сыға, табыш - үгеҙ, кәзә һәм һимеҙ ҡуян. Табышты улар тау башынан төшөрөп, урман эсенә алып инә. Бүре менән төлкө бик нык асыҡҡан була, табышҡа ҡарап, һеләгәйҙәре ағып китә хатта. Арыҫлан быны һиҙә һәм: "Мин һеҙгә үҙегеҙгә лайыҡлы өлөшөгөҙҙө бүлеп бирермен, һис шикләнмәгеҙ", - тип ауыҙ эсенән генә мығырҙана. Шунан бүрегә ҡарап, шулай ти:"Һин, бүре, өлкәнһең һәм тәжрибәлеһең. Ошо табыштарҙы һәр берегеҙгә бүл һәм үҙеңдең ғәҙеллегеңде күрһәт". Бүре табышты үҙенсә шулай бүлә: "Хөрмәтле арыҫлан! Был ҙурағай үгеҙ һинеке булһын әйҙә. Һин дә ҙур, үгеҙ ҙә ҙур. Уртаса ҙурлыҡтағы кәзә минеке булыр. Әй, төлкө, һин ҡаршылашмай ғына бынау ҡуянды ал..." Шунда арыҫлан асыулы үкереп ебәрә: "Әй, бүре, һин нисек минең алдымда "Был минеке, был һинеке", тип әйтә алаһың? Кил әле бында, ишәк..."Бүре яҡынлашыу менән арыҫлан уны һуғып осора. Шунан төлкөгә әйләнеп:" Йә, хәҙер һин ғәҙел итеп табышты бүлеп ҡара", - ти. Төлкө шулай ти:" О,бөйөк арыҫлан! Был һимеҙ үгеҙ һиңә иртәнге ашҡа булһын. Ә был кәзә һинең төшкө табыныңды биҙәһен. Ҡуян иһә киске ашҡа ҡалһын..." Алыҫлан бик ҡәнәғәт ҡала һәм һорай: "Әй, төлкө, һин был тиклем ғәҙел итеп бүлергә кемдән өйрәндең?" "Бынау бүренән һәм ул дусар булған һабаҡтан", - ти төлкө.**

**Шуның һымаҡ, аҡыллы әҙәм күҙ алдында булған бәләләрҙән һығымта яһай белер. Мәҫәлән, фараондың халҡы, Ад ҡәбиләләре менән ни булғанын белгәс, байлыҡ артынан ҡыуыуҙан баш тарта, үҙҙәренең теләген һүндерә, ғорур һәм тәкәббер булыуҙан туҡтай. Әгәр байлыҡ артынан ҡыуыуҙы дауам итһәләр, улар осраған бәләнән башҡалар һабаҡ алыр ине..."**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН

### Баллы торт

Ҡамыр әҙерләү: 100 грамм аҡ майҙы иреткәс, бер стакан шәкәр ҡомо, 3 ҡалаҡ бал, ике йомортҡа, һүндерелгән ярты балғалаҡ аш содаһы, кәрәгенсә он ҡушып, йомшаҡ итеп ҡамыр баҫырға. Ҡамырҙы ете өлөшкә бүлеп, көлсәләр итеп йәйеп, уларҙы мейестә бешереп алырға. Әҙер көлсәләрҙе эҫеләй ситтәрен тигеҙләп ҡырҡып сығырға. Һәр йәймәнең өҫтөнә крем һылап, ҡатлап һалып сыҡҡас, ҡырҡып алынған киҫәктәрҙе ыуып, валсыҡтарҙы торттың өҫтөнә, тирәләренә һибеп сығырға. Крем һеңгәс, тортты 3-4 сәғәткә һыуытҡыста ҡуйып торһаң, уны ҡырҡыуы еңел була.

**Крем өсөн:** 200 грамм аҡ майға бер семтем ванилин, бер стакан шәкәр ҡомо ҡушып иҙергә лә, 300-400 грамм ҡаймаҡ һалып болғатырға.

### Сәтләүекле торт

Ҡамыр әҙерләү: 200 грамм ҡаймаҡ, ике йомортҡа, бер стакан шәкәр ҡомо, бер стакан ярым он, 200 грамм ҡуйыртылған һөт, бер балғалаҡ һүндерелгән аш содаһы ҡушып, яҡшылап болғатҡас, әҙер массаны артыҡ эҫе булмаған мейестә 50 минут самаһы бешереп алырға. Һыуынғас, уны ике өлөшкә бүлергә лә өҫтөнә крем һөртөп ҡатларға. Әҙер тортты өҫтәлгә ҡуйыр алдынан мотлаҡ 12 сәғәт һыуытҡыста тотоп алырға.

**Крем өсөн:** 200 грамм аҡ май менән ҡуйыртылған һөтҡә 100 грамм сәтләүекте ваҡлап ҡушырға.

### Еңел турама

300 грамм кишерҙе, 200 грамм алманы ҡырғыстан үткәреп, бөрәр ҡалаҡ лимон һыуы, иҙелгән сәтләүек, бөрәр балғалаҡ үҫемлек майы һәм бал менән болғатырға. Бик файҙалы һәм тәмле килеп сыға.

### "Хан" салаты

Киң кәстрүлгә бешкән йомортҡаларҙы ҡырғыстан үткәреп йәйергә. Икенсе ҡатҡа бешкән картуф, тоҙло ҡыяр, йәшел һуған турап һалырға. Өсөнсө ҡатҡа - ҡырғыстан үткәрелгән бешкән кишер, дүртенсе ҡатҡа йәшел борсаҡ һалырға. Бишенсе ҡатҡа - ваҡ итеп туралған бешкән ит һәм уның өҫтөнә ҡырғыстан үткәрелгән бешкән сөгөлдөр түшәргә. Беренсе, икенсе һәм аҙаҡҡы ҡат өҫтөнә ҡаймаҡ менән майонезды болғатып һөртергә кәрәк. Салатты бер ни тиклем ваҡытҡа һыуытҡысҡа ҡуйып торорға кәрәк. Өҫтәлгә ҡуйыр алдынан кәстрүлде әйләндереп батмусҡа түңкәрергә. Салаттың өҫтөн йәшел тәмләткестәр менән биҙәргә.

**Салат өсөн:** 6 йомортҡа, 4-шәр эре картуф менән кишер, 1 тоҙло ҡыяр, 1 стакан йәшел борсаҡ, 1 тотам йәшел һуған, 300 грамм бешкән ит, 2 уртаса ҙурлыҡтағы сөгөлдөр, 150 грамм ҡаймаҡ менән болғатылған майонез.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИСЕМДӘРЕ ФӘНИӘ...



Фотолағы был ҡыҙ Ишмөхәмәтова Фәниә булыр. Исеме матур, яңғырауыҡлы, мәғәнәле булғанға күрә, "Атың кем?" рубрикаһына яҙып, гәзит уҡыусыларҙы был матур башҡорт исеме менән таныштырып үтмәксе булдым.

Фәниә әлеге ваҡытта Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназияһында белем ала. Фәниә исеменең мәғәнәһе бик матур, фән - ғилем, иә - эйә, тигән һүҙҙәрҙән килеп сыҡҡан, йәғни был исем ғилем эйәһе, ғилем таратыусы, тигәнде аңлата. Уға исемде атаһы менән әсәһе ҡушҡан. Тағы ла әсәһенең балалыҡ әхирәте лә Фәниә исемле булған. Әхирәтем шул тиклем аҡыллы, тәрбиәле ҡыҙ булды, тип хәтерләй әсәһе. Ҡыҙының да шундай булыуын теләп, әсә кеше ошо исемгә туҡтаған.

**Миләүшә ЗӘЙНЕТДИНОВА.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 734